*Хөрмәтле уҡыусы, йортоңда аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәң, "Киске Өфө" - шундай бер сара. Уға яҙылырға онотма һәм таныштарыңды ла был хаҡта иҫкәрт. Индекстар - 50665, 50673, ярты йылға яҙылыу хаҡтары - 306 һум 84 тин, 294 һум 78 тин.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

24 - 30 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2009 ЙЫЛ

№43 (357)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Кескәй генә ҡырмыҫҡа -** оло һабаҡ тормошҡа...





2

**Яҡының яманға тарынымы?** Уны динебеҙ ҡотҡарыр - шуға ышан





6

**Күгәреп тә яткан Урал тауында...** башҡортомдоң тарихы баш алған






8-9

**Аҡыллылар оҙаҡ йәшәйәсәк,** ә ялҡауҙар үлеп бөтәсәк





12

**ТВ программа**

14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мостай Кәрим үҙенең интервьюһында: "...үлгәндән һуң, моғайын, онотолоп торормон..." - тигән фекер әйтә. Уның ошондай икеләнеүенең сәбәптәрен нимә күрәһегеҙ?

*Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:*

- Ләкин ул ошо уҡ фекерҙе әйткәндә: "...Ләкин ҡайтырыма ла өмөтөм бар. Һәр хәлдә, кешелек, теге йәки был халыҡ үҙен күтәрер, үҙ рухын сағылдырыр шәхесте тыуҙырмай ҡалмаҫ. Әгәр башҡорт халҡы ошондай даһи талантты тыуҙырһа, уның тамырҙарын барлағанда, мин, моғайын, шул тамырҙарға эйәреп ҡайтырмын...", - ти. Уның менән был интервьюны шағирҙың 70 йәше тулғанда "Башҡортостан ҡыҙы" журналы өсөн мин эшләгәйнем. Мостай Кәрим бында икеләнмәй, бары күңел өҫтөнлөктәрен инҡар иткән был осорҙоң һыҙланыулы икеләнеүҙәрен генә сағылдыра.

*Салауат ӘБҮЗӘР, шағир:*

-Был һүҙҙәрҙе шағир әүлиәлек ҡылып әйткән тимәҫ инем. Ул әҙәбиәт донъяһында, ғөмүмән, тормошта үҙ урынын, үҙ кимәлен яҡшы белгән шәхес. Тарихыбыҙҙа күҙгөләгеләй асыҡ сағыла: бөйөк шәхестәр донъянан киткәс, уларҙың өҫтөнә сүп өйөү кеүек сир бар. Есенинды, Пастернакты тыйҙылар, Бабичты баҫманылар, әммә улар барыбер халҡына ҡайттылар. Мостай ағай бына ошо "тәғлиматтан" сығып фекер йөрөткәндер был һүҙҙәрҙе әйткәндә.

*Гөлгөнә АҪЫЛОВА, уҡытыусы:*

-Шәхестең бөйөклөгөн үҙе йәшәгән заманы түгел, уның киләсәге, Ваҡыт ғәли йәнәптәре билдәләй. Шуға күрә бында халыҡ шағирының икеләнеүҙәрен аңларға була. Минеңсә, бары тик үҙ милләтенә хеҙмәт иткән, уның ғазап-шатлыҡтарын, уй-хыялдарын сағылдырған ижадсы ғына киләсәккә үтә ала. Сөнки шағир бары тик милли булғанда ғына дөйөм кешелек өсөн ниндәйҙер әһәмиәткә эйә. Ошо юҫыҡта ҡарағанда, киләсәктә башҡорт халҡының тарихын өр-яңы күҙлектән баһалаусылар Мостай Кәрим әҫәрҙәрен дә өр-яңы күҙлектән ҡараясаҡ. Ул саҡта мотлаҡ рәүештә шундай һорау ҙа ҡуйыласаҡ: "Мостай Кәрим ижадында башҡорт халҡының тарихы, уның уй-хыялдары, психологияһы ниндәй кимәлдә сағыла?"

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ҠУРАЙ КЕҮЕК

**Гәзит сыға башлағанда ҡайһы бер кешеләрҙең ауыҙынан: "Беҙҙең "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәребеҙ, журналдарыбыҙ бар бит, тағы ла "Киске Өфө" гәзите нимәгә ул?" - тигән һымағыраҡ һүҙҙәрҙе ишетергә тура килгеләне. Бындай һүҙҙәр: "Беҙгә бер Торатау еткән, Ирәмәлдең дә, Ямантауҙың да, Ирәндектең дә, Ҡырҡтының да хәҙер кәрәге юҡ, йә булмаһа, беҙгә бер Ағиҙел еткән, Ҡариҙелде, Димде, Һаҡмарҙы, Нөгөштө, Өршәкте, Йәйыкты, Ҡыҙылды, Таналыҡты юҡ итергә кәрәк", - тигәнде аңлатҡан һымаҡ килеп сыға. Бик сикләнгән ҡараш. Үкенескә ҡаршы, донъяла шундай ҡараш һаман да бар. Әммә "Киске Өфө" үҙенең йөкмәткеһе менән бындай һүҙҙәрҙең хаҡһыҙ булыуын иҫбат итте. "Киске Өфө"-нө алдырмаған, уҡымаған, аңламаған кешеләр - улар беҙҙең тормошобоҙҙо ла, ихтыяждарыбыҙҙы ла, киҫкен проблемаларыбыҙҙы ла бөтөнләй аңламай торған, йә булмаһа быларға ҡаршы эш алып барыусы кешеләр улар. Беҙгә бер генә матбуғат баҫмабыҙ ҙа артыҡ түгел, хатта тағы ла бер төп гәзитебеҙ булһа ла, зыян итмәҫ ине. Рухиәтебеҙҙе һаҡлай торған "Киске Өфө" үҙ бурысын еренә еткереп үтәй. Был гәзит беҙҙең оҙон көйөбөҙ, ҡурайыбыҙ һымаҡ, милләтебеҙҙең иң мөҡәддәс бурысын үтәгән баҫмаға әүерелде. "Киске Өфө" милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың киләсәген тәьмин итерлек, йүнәлеш булырлыҡ фекер таратыусы гәзит.**

**Рәшит ШӘКҮР.**
**шағир, филология фәндәре докторы, профессор.**




**2-се Өфө педагогия колледжының III курс студенты Әнфәр Нурмөхәмәтов. Уның тураһында 4-се биттә уҡығыҙ.**

ШАҢДАУ

# АҠЫЛ ЭЙӘҺЕЛӘЙ КҮРӘМ, "Киске Өфө"м, һине



**Ғүмер эсендә кешенең иң яҡын ун дуҫы булыр, тигән хәбәр бар. Шуларҙың береһе - үҙең өсөн уғата изгеләштерелгән, Аҡыл эйәһе итеп күргән дуҫың. Үҙем алдырған һәм яратып уҡыған "Киске Өфө"м тап шундай Аҡыл эйәһелəй минең өсөн.**

Башҡорт теле уҡытыусыларының семинарында билдәле яҙыусы, педагог Мәрйәм Бураҡаеваның яңы баҫма хаҡында телмәр тотҡаны хәтеремдә. Халҡыбыҙ аңын уятыусы, рухын терелтеүсе, йәшәү көсө биреүсе гәзит тип атағайны ул был баҫманы. Ана шул осрашыуҙан һуң күп уҡытыусылар "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылғайны. Беҙҙең ауылда төҙә ике генә уҡытыусы алдыра ине, хәҙер яйлап таратабыҙ гәзитте. Еңгәләрем Сәғиҙә һәм Маһикарам Ҡотоевалар, Мирас Хисамов күтәрмәләп ебәрҙе тәҡдимемде. Учалы ауылында йәшәүсе Лүзә менән Шәүрә ошондай бай йөкмәткеле баҫма менән таныштырғанға рәхмәт уҡып бөтә алмай. Уҡытыусы Әнисә Нуретдинованан да ошондай уҡ хуплау һүҙҙәре ишетәм. Былна әле Озерный, Урал ҡасабаһындағы әхирәттәремде лә гәзиткә яҙылырға күндерҙем. Дин әһеле Исмәғил хажи ҙа беҙгә ҡушылды.

Шуны ла таныу кәрәктер: дежур фекерҙәргә күнеккәнгәме, гәзиттәге һәр тема яңылыҡ тиерлек. Ҡайһы берәүҙәрҙең, был гәзиттә яҙылғандарҙы аңлай алмайбыҙ, тигәне лә тәбиғи. Донъяға әр-яңы күҙлектән баҡыу өсөн барыһында ла әҙерлек кимәле бер иш түгел. Тәҡдимдәрем шуларҙан ғибәрәт:

Тәрбиәүи сәғәттәрҙә, әсә теле дәрестәрендә гәзиттәге һәр материал үҙе ҙур ҡулланма. Август кәңәшмәһендә йыл һайын уҙғарыла килгән секция ултырыштарында әҙәбиәт уҡытыусылары менән бәйләнеш булдырыу өсөн бик тә ҡулайлы ул баҫма.

Әхмәр Үтәбайҙың "Мин эсеүемде ташланым" мәҡәләһе һоҡланыу һәм ихтирам уята. Нәфсеһе менән көрәшкән икеләтә батыр, тиҙәр. Уның кеүектәр гәзитте уҡыусылар араһында ла килеп сығыуы мөмкин. Улар ҙа үҙ-үҙҙәре менән көрәш тәжрибәһе тураһында яҙып ебәрһә, аҙаҡ эскелеккә ҡаршы көрәшеүселәрҙән тотош бер төркөм барлыҡҡа килһә...

Беҙҙең ғаилә "Киске Өфө"нөң һәр яңы һанын түҙемһеҙләнеп көтөп ала. Улым, киленем дә ҡыҙыҡһынып уҡый. Кесе улыбыҙ үҙенең шәхси эшен башлап ебәрҙе. Закондар шул тиклем йырып сыҡҡыһыҙ. Уның нымактарға "Әшҡыуарлыҡ әлифбаһы", "Психолог кәңәше" рубрикалары ҡамасауламаҫ ине. Үҙем дә ҡайһы ваҡытта улыма кәңәш бирә алмай, аптырап ҡалам. Үҙемде гел ҡара һыҙатка юлыҡҡандай тойоп китәм. Унышҡа өлгәшкәндәр кәртәләрҙе нисек үтә икән?

Дингә кешеләр күпләп ылыға хәҙер. Шөкөр, китаптар, кәрәкле әйберҙәр һатыуҙа ирекле. Ә бына мосолманса кейенә белеү ҡағиҙәләре, хәләл булмаған ризыҡтар теҙелгән өҫтәлдә мәжбүри рәүештә ултырырға тура килгәндә алтын уртаҡлыҡты нисек табыу тураһындағы мәҡәләләрҙе табыуы ҡыйын. "Киске Өфө" мосолман ҡағиҙәләре һәм әҙәбе тураһында материал әҙерләгәндә, ошо темаларға ла иғтибар итһә ине.

Үрҙәргә артылыу бер ҡасан да еңел бирелмәй. Әммә иң ауыры - әсе тирең, көндәлек хеҙмәтең ярҙамында улланған, йоҡоһоҙ төндәр сарыф ителгән бейеклекте юғалтмау. Халҡыбыҙҙың балҡышы һеҙҙең кеүек эшһөйәр, ижади эҙләнеүсән коллектив, тынғыһыҙ хәбәрселәр һәм битараф булмаған уҡыусылар ҡулында.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА,**
**Учалы районы Сораман ауылы.**

ИШАРА

# КЕСКӘЙ ГЕНӘ ҠЫРМЫҪҠА - олo һабаҡ тормошҡа…

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Европа-Азия" шиғырында шундай юлдар бар:**

**"Мәҙәк итеп ҡарап торҙом**
**Кескәй генә ҡырмыҫҡаға:**
**Йөк күтәреп сығып бара**
**Азиянан**
**Европаға…"**

**Азиянан Европаға йөк күтәреп сығып барыусы ҡырмыҫҡаны күрә белеү һәм ошо дөйөм иғтибарҙан ситтә торған иң ябай күренешкә ҡиттғаларҙы, илдәрҙе һәм дәүләттәрҙе тоташтырырлыҡ фекер, идея һала белеүе, әлбиттә, авторҙың дөйөмләштереүгә маһир ижадсы икәнлеге тураһында һөйләй. Тәбиғәттең ошо бәләкәй генә йән эйәһе булған ҡырмыҫҡаның тормошо ла милләтте бер күс итеп тупларлыҡ, илдәрҙең, дәүләттәрҙең һыйышып йәшәүен тәьмин итерлек идеяға нигеҙ була алыуы хаҡында ла уйландыра ала. Ысынлап та, ҡырмыҫҡа иләүенә күҙ ташлаһаң, ундағы бер туктауһыҙ хәрәкәтте, тормоштоң ҡайнап торғанын күреп, иҫең-аҡылың китерлек шул. Ҡырмыҫҡаларҙың кешеләргә үрнәк, һабаҡ булырлыҡ мөғжизәһе бының менән генә бөтмәй…**

Әбйәлил районының Ҡырҙас ауылы янында ғәжәйеп бер тәбиғәт күренешенә шаһит булдыҡ. Ауылдан алыҫ булмаған урындағы Бағыруҫман әүлиә шишмәһенән һыу алып ҡайтып килгәндә урман ситендәге бер гектар самаһы майҙанда бер-береһенән күҙ күреме араулыҡта урынлашҡан ете ҡырмыҫҡа иләүен тап иттек. Фотоға иғтибар итһәгеҙ, был иләүҙәр кеше буйынан да бейегерәк. Ете иләүҙән тыш, ошо уҡ майҙанда тағы ла йөҙҙәрсә ваҡ иләүҙәр һибелеп киткән. Иләүҙәрҙе Ҡырҙас ауылы хакимиәте һәм урта мәктәп уҡыусылары кәртәләп алған һәм даими рәүештә тәрбиәләп тота. Ҡырҙаста йәшәүсе билдәле яҙыусы, тыуған яҡты өйрәнеүсе эҙәрмән, журналист, урындағы ауыл хакимиәте хеҙмәткәре Иҙрис Ноғоманов беҙгә был үҙенсәлекле иләүҙәр хаҡында түбәндәгеләрҙе бәйән итте:

- Фән ҡырмыҫҡалар тормошон шулай аңлата: бер гектар, гектар ярым майҙанга бер генә ҡырмыҫҡа иләүе урынлашырға тейеш. Киреһенсә булған осраҡта ҡырмыҫҡалар йәшәйешенең яҙылмаған ҡағиҙәһе буйынса көслөрәк иләү көсһеҙән был майҙандан ҡыҫырыҡлап сығара. Бында иһә бер гектар майҙанда күбә ҙурлығындағы ете ҙур һәм йөҙләгән ваҡ иләүҙәр урынлашҡан. Биология, зоология буйынса фән докторҙары ошо күренеште аңлатып бирһен ине. Мин үҙемсә ошо ҡырмыҫҡаларҙы тикшереп ҡараным. Улар башҡа ҡырмыҫҡаларҙан эрерәк һәм әллә ни тешләшеп тә бармай, үҙҙәрен тыныс тоталар. Башҡа ерҙәге иләүҙәр янына барһаң, ҡырмыҫҡалар йәһәт кенә тәндең яланғас еренә йүгереп менеп, тешләшеп, тиҙерәк был тирәнән китеүеңде талап итәләр. Ә былар һиңә иғтибар ҙа итмәйҙәр. Былна ошо бәләкәй генә майҙанда миллион ғына түгел, миллиард ҡырмыҫҡа һыйышып йәшәй ала.

Ошо мөғжизәле күренештең сере нимәлә һуң? Был һорауға күмәкләшеп яуап эҙләп ҡарайыҡ, булмаһа. Мин үҙем, мәҫәлән, ошо бер гектар майҙандағы иләүҙәрҙе Башҡортостанға оҡшатам. Ете иләүҙе ошо ерҙә башҡорт халҡын барлыҡҡа килтергән ете ырыуға, башҡаларын башҡа ваҡ ырыуҙарыбыҙға тиңләргә була. Ҡырмыҫҡаларҙың башҡаларға түҙеп ҡарауы ла башҡорт халҡының күркәм сифаты хаҡында һөйләй түгелме? Нисек кенә булмаһын, мин ошо иләүҙәрҙә йәшәгән йән эйәләрен айырым бер тоҡомға, йәғни ҡәүемгә тиңләйем.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Ауылы берҙең ҡәүеме бер", тигән мәҡәл-әйтем бар халыҡта. Кем белә, бәлки, тап ошо принципты төп йәшәү ҡануны итеп алғанға күрә лә ни бары тик бер генә иләү һыймалы урында шунсама иләү һыйышып йәшәй алалыр? Һыйышыуын һыйышып йәшәй ҙә, уларға бит ашарға ташыу өсөн йөҙәр-йөҙәр аҙым ситкә китергә тура килә. Кем белә инде, бәлки, ҡырмыҫҡаларҙың ошо тәрә, ошо тоҡомо донъяла тик ошо хәтлем генә тороп ҡалғандыр ҙа, үҙҙәренең ҡәүемен һаҡлар өсөн ҡыҫынҡылыҡҡа, шартһыҙлыҡҡа күнеп, ғүмер итәләр? Ә бит, уйлап ҡараһаң, Мостай Кәрим әйтмешләй, Азиянан Европаға йөк ташыусы ошо кескәй генә йән эйәләренә ҡарап тороп та, милләттең именлеге, киләсәге өсөн әллә күпме фәһем алырға була.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**



Ҡырмыҫҡа иләүе янында Ҡырҙас ауылы уҙаманы Иҙрис НОҒОМАНОВ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов Калуга ҡалаһында төбәктәр үҫеше мәсьәләләре буйынса Хөкүмәт комиссияһы ултырышында ҡатнашты. РФ субъекттарында башҡарма власть органдары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеге мәсьәләләрен тикшергән был ултырышты РФ Хөкүмәте рәйесе Владимир Путин алып барҙы. Башҡортостан Президенты Рәсәй Хөкүмәте рәйесенең артыҡ административ ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөү кәрәклеге тураһындағы тәҡдимен хупланы. Республика башлығы билдәләүенсә, төбәктәрҙә функцияларҙы ҡабатлаусы байтаҡ федераль күҙәтеү органдары вәкилдәре урынлашҡан. Төбәк властары менән федераль ведомстволар вәкилдәре эшендәге таркаулыҡ, Президент фекеренсә, көрсөккә ҡаршы һөҙөмтәле саралар үткәреүгә булышлыҡ итмәй.

✓БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай эргәһендәге икенсе саҡырылыш Йәштәр йәмәғәт палатаһын формалаштырыу башланды. Уның 20 ағзаһы Ҡоролтай тарафынан раҫланды ла инде. Тағы ла 15 ағза йәштәр һәм балалар йәмәғәт берекмәләре тәҡдиме менән конкурс буйынса һайлап алынасаҡ. Ғаризалар 31 октябргә тиклем ҡабул ителә. Конкурс тәртибе менән ошо сайтта танышырға мөмкин: www.gsrb.ru.

✓Мәскәүҙә үткән "Алтын көҙ" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә Башҡортостан ауыл хужалығы етештереүселәре 459 миҙал яуланы. Бынан тыш, Башҡортостан ауыл хужалығы предприятиелары 5 "Бөтә Рәсәй күргәҙмәләр үҙәге лауреаты" миҙалы һәм 38 "Һөнәре буйынса иң яҡшыһы" билдәһе менән бүләкләнде. Күргәҙмә һөҙөмтәләре буйынса, БР Хөкүмәте агросәнәғәт комплексында юғары ҡаҙаныштары өсөн Гран-приға лайыҡ булды. БР Хөкүмәте шулай уҡ "Стенд менеджерҙарының әүҙем эшмәкәрлеге өсөн" махсус призына лайыҡ булды. Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге продукцияһы 131 алтын миҙал менән билдәләнде.

✓Республика Халыҡ ижады үҙәге һәм уның көнбайыш төбәктәге филиалы Бәләбәй районы хакимиәте менән берлектә башҡорт фольклор коллективтары һәм башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары ансамблдәре етәкселәре өсөн семинар-лаборатория үткәрҙе. Сарала республиканың 22 ҡала һәм район вәкилдәре ҡатнашты.

✓ *Бер зоопарктың директоры ла ябай ишәкте һыҙат-һыҙат буяҡ һөртә лә, ҡунаҡтар алдында: "ә беҙҙә зебра тигән бик һирәк хайуан бар", тип маһая, имеш.*



АҘНА ШАҢДАУЫ

# КӘЗӘЛӘНМӘГЕҘ!

## ЛДПР, КПРФ һәм "Ғәҙел Рәсәй" партияларының Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһындағы фракцияларына Ап-асыҡ хат



**Хөрмәтлеләрем - Владимир Жириновский, Геннадий Зюганов, Николай Левичев! (Һуңғыһы - "Ғәҙел Рәсәй" партияһының Думалағы фракция етәксеһе).**

Күрҙем. Ишеттем. Баһаланым (Һүҙ өҫтә әйтеп үтелгән фракцияларҙың 14 октябрҙә Дәүләт Думаһын ташлап сығып китеүе тураһында бара). Ишекте "шап" иттереп ябып сығып китеү өсөн көс кәрәк бит. Физик көстән бигерәк (йәғни, кәүҙәнең ҡайһы бер өлөштәрен креслоларҙан айырып алыу өсөн), рухи көс талап ителә. Һеҙ ул көстө таптығыҙ. Мәслихәт. Был ябай ғына бер эш түгеллеген яҡшы аңлағанһығыҙҙыр. Һеҙ бит, ҡулға өйрәтелгән булһа ла, оппозиция. Йәғни, башҡаларҙан айырмалы, бигерәк тә власть партияһынан айырмалы, үҙегеҙҙең ҡарашығыҙ, фекерегеҙ булырға тейеш. Бармы ул, юҡмы - уныһы башҡа мәсьәлә. Иң мөһиме, һеҙ - оппозиция. Думаға үткәнһегеҙ икән, тимәк, үҙ һайлаусыларығыҙ, йәғни, илебеҙҙең икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрендә һеҙҙең позицияғыҙҙы, платформағыҙҙы, сәйәси ҡараштарығыҙҙы уртаҡлашҡан кешеләр бар. Күп түгел, әммә бар. Думаны ташлап сығып китеп барғанда, һуңынан телекамералар алдында был ҡылығығыҙҙы аңлатҡанда, һеҙ иң тәүҙә улар тураһында уйлағанһығыҙҙыр, моғайын? Йәғни, ҡарағыҙ беҙгә, һайлаусыларыбыҙ, беҙ һеҙҙең мәнфәғәттәрегеҙҙе яҡлау маҡсатында йомшаҡ һәм йылы креслоларыбыҙҙы ҡалдырып, ҡайҙалыр билдәһеҙлеккә сығып китеп барабыҙ. Был залға бүтән ҡайтмауыбыҙ ҙа ихтимал. Әммә беҙ барыбер сығабыҙ, сөнки беҙ - оппозиция, тигәнерәк мәғәнә һалынған булғандыр бит һеҙҙең был ҡылығығыҙға? Булғандыр. Тик мин мәғәнә тапманым. Әйткәндәй, төбәктәрҙәге һеҙҙең фекерҙәштәрегеҙ ҙә тапмаған, буғай. Юғиһә, күтәрелеп сығырҙар ине, моғайын. Исмаһам, береһе генә булһа ла ауыҙ асып бер генә һүҙ әйтһә ине һеҙҙең был ҡылығығыҙҙы яҡлап. Йәки аҡлап. Юҡ шул. Ләммим. Үҙ һайлаусыларығыҙға әллә кәрәк һеҙ, әллә - түгел.

Һеҙҙең сығып китеүегеҙ залда ҡалғандарға берәй төрлө йоғонто яһаны микән? (Ә унда, йәмәғәт, бер генә партия - "Берҙәм Рәсәй" партияһы вәкилдәре генә тороп ҡалды). Асылда, илебеҙ 14, 15, 16 октябрь көндәрендә бер партиялылыҡ системаһы шарттарында йәшәне. Йәғни, һеҙҙең булышлығығыҙ менән беҙ бер нисә көнгә уҙған заманаларға ҡабаттан әйләнеп ҡайттыҡ. Шул турала уйлап ҡараманығыҙмы? Залдағы депутаттарҙың һеҙҙең был демаршты нисек ҡабул итеүен бөтәбеҙ ҙә күрҙек. "Берҙәм Рәсәй" өсөн коммунистар, либерал-демократтар һәм "Ғәҙел Рәсәй"ҙәр бар ни ҙә, юҡ ни. Ошоно күрҙек беҙ. Улар шым ғына үҙҙәренең төп эшен - закондар ҡабул итеүҙе дауам итте. Уларға һеҙ кәрәкме, тигән һорауға яуап эҙләп ҡараманығыҙмы? Күрәһең, юҡтыр. Юғиһә, улайтып баш күтәреп сығып бармаҫ инегеҙ Дәүләт Думаһынан. Баймаҡса әйткәндә, "Берҙәм Рәсәй"ҙәр коммунистарһыҙ, ЛДПР-һыҙ һәм "Ғәҙел Рәсәй"һеҙ йәшәй ала ул, ә бына һеҙ Думаһыҙ йәшәй алырһығыҙ микән? Ай-һай!

Ултырыштар залынан сығып барыуыбыҙ менән беҙ үҙ партияларыбыҙҙың абруйын арттырабыҙ, тип фекер йөрөткәнһегеҙҙер, ә? Ә ул абруй бармы һуң? Бөгөн бит илдә бөтөнләй башҡа "абруй"ҙар хакимлыҡ итә.

Шулай итеп, һеҙ үҙ һайлаусыларығыҙға ла, Дәүләт Думаһына ла кәрәк түгелһегеҙ. Ә кемгә кәрәгегеҙ бар? Бәлки, беҙҙең хөрмәтле Президентыбыҙ Дмитрий Анатольевич Медведевҡа? Һеҙҙең бит төп талаптарығыҙҙың береһе - уның менән осрашыу ине түгелме? Әйткәндәй, нишләп һеҙ үҙегеҙҙең фекерҙәштәрегеҙгә, партияларығыҙҙың ағзаларына, һеҙҙең өсөн тауыш биреүселәргә мөрәжәғәт итмәнегеҙ әле, ә? Әллә уларҙың һеҙҙе яҡлап сығыш яһамаясаҡтарын алдан белеп торҙоғоҙмо? Хәйер, һүҙем Президент хаҡында ине бит әле. Шуныһы ғәжәп, һеҙ Конституция гарантына ла кәрәк булмай сыҡтығыҙ. Ул хатта һеҙҙең менән осрашырға ла теләмәне. Сәләмен генә еткерҙе. Һәм - вәссәләм.

Һеҙ бер кемгә лә кәрәкмәй булып сыҡтығыҙ. Думала һеҙһеҙ ҙә кворум бар. Халыҡ (йәғни, һайлаусылар) коммунистик, либерал-демократик һәм "Ғәҙел Рәсәй"ский идеяларһыҙ ҙа ғүмер итә ала. Һеҙҙең идеяларығыҙға һәм идеалдарығыҙға (әгәр улар, ысынлап та, була ҡалһа) ул... төкөрөп тип үк әйтмәҫ инем, әммә битараф ҡарай. Президентҡамы? Һеҙ, бәлки, кәрәкһегеҙҙер, дәүләтебеҙҙә күп партиялылыҡ принцибы, тимәк, демократия сәскә атыуын һынландырған символ булараҡ. Бер зоопарктың директоры ла ябай ишәкте һыҙат-һыҙат буяҡ һөртә лә, ҡунаҡтар алдында: "ә беҙҙә зебра тигән бик һирәк хайуан бар", тип маһая, имеш. ЛДПР, КПРФ һәм "Ғәҙел Рәсәй" тап ана шул дәүләтебеҙҙең "тиреһендәге" "демократия һәм күп партиялылыҡ" тигән һыҙаттар улар. Әммә һеҙҙең менән осрашырға теләмәүенә ҡарағанда, Президент та һеҙгә төкөр... ғәфү, хөрмәтлеләр, битараф ҡарай.

Ни эшләргә һуң һеҙгә? Был хаҡта уйлап ҡарағанығыҙ юҡмы? Әлбиттә, Думаға ҡайтырға, тип яуап бирерһегеҙ, моғайын. Был мәҡәлә баҫмаға әҙерләнгәндә һеҙ шулай иттегеҙ ҙә. Һәм был бөгөнгө шарттарҙа (иҡтисади көрсөктө күҙҙә тотам) иң дөрөҫ аҙым. Үҙ теләге менән йылы, йомшаҡ һәм табышлы урынды ташлап киткән кешене күргәнегеҙ бармы? Мин дә юҡ. Башҡалар, ана, өҫтәренә таш яуып торһа ла, эш урынынан китергә ашыҡмай. Әммә мин һеҙгә шөғөлдәрегеҙҙе алмаштырырға тәҡдим итер инем. Ҡасан да булһа электән мауыҡҡан эшегеҙгә башкөлләйе менән сумырға ваҡыт таһа.

Һеҙгә, хөрмәтле Владимир Жириновский, берәй театрға барырға кәрәк. Үҙегеҙҙең, йәғни "жириновский" ролен башҡарыр өсөн. Һеҙҙе танымаған берәй тамашасы, бәлки, һоҡланып, "ҡалай килештереп уйнай, хас та үҙе кеүек ҡыландыра", тип, бот сабып көлөр һәм устары туҙғансы алҡышлар. Һеҙҙең күңелегеҙ булыр.

Һеҙгә, Геннадий Зюганов, кәмендә ике тәҡдимем бар. Береһе - Мавзолейҙы һаҡлау. Юғиһә, В.И.Ленинды хәҙер алып барып күмергә торалар. Ә һеҙ, исмаһам, уның тыныс йоҡоһон һаҡларһығыҙ. Оҡшамаһа, Ульяновскийға килегеҙ. Бында В.И.Лениндың музейын ҡарауылларға була. Эш хаҡы, әлбиттә, әҙерәк. Әммә идеалдар - аҙым һайын.

Һәм һуңғыһы. Һеҙҙең был ҡылығығыҙҙы Рәсәй ваҡытлы матбуғат саралары нишләптер "баш күтәреү" тип атаны. Нимәнән сығып ундай фекергә килгәндәрҙер инде журналистар - аңлашылмай. Баш күтәреүҙең нимә икәнлеген улар белә микән һуң? Башҡорттар баш күтәргәндә тотош империяны дер һелкеткән. Йылғалар буйлап дар ағастары ҡуйылған һалдар аҡҡан. Күҙ йәштәре урынына ҡан ҡойолған. Башҡорттар ауылы-ауылы менән үртәлеп юҡҡа сыҡҡан. Ә һеҙҙың был ҡылығығыҙ... Башҡорттар ундай нәмәне йомшаҡ ҡына итеп "кәзәләнеү" тип атай. Был күренештең тәбиғәтен аңлатып үтәйем, булмаһа. Ҡойроҡ аҫты ҡортлай башлағас (һеҙҙең осраҡта йомшаҡ йылы креслоларҙа оҙаҡ ултырыу менән бәйле булыуы мөмкин), кәзә ни эшләргә белмәй аптырана. Туҡтауһыҙ ҡысыныуҙан тамам алйыған мәхлүк артҡы һандарына күтәрелеп, юлында осраған нәмәне һөҙгөләй башлай. Өй мөйөшөмө, ҡапҡамы, ҡаяташмы - ул ваҡытта кәзәнең күҙенә бер нәмә лә күренмәй. Бының төп сәбәбен (ҡойроҡ аҫтындағыһын, тимәк) белмәгәндәр кәзә тәкәһе мөгөҙҙәренең ныҡлығын һынап ҡарай, тип фараз йөрөткән була. Йәнәһе, алыштарға әҙерләнә. Эштең айышына төшөнгән хужа иһә кәзәнең ҡойроҡ аҫтын ентекләп таҙалай һәм башҡа ҡортламаһын өсөн махсус май - креолин һөртөп ебәрә.

Күрәһең, хөрмәтле депутаттар, һеҙҙең менән дә шул уҡ хәл. Ә инде өс көн үтер-үтмәҫтән һеҙ туҡмалған сәүек кеүек хужа йортона (йәғни, Дәүләт Думаһына) ҡабат ҡайтыуығыҙға ҡарағанда, ҡортлаған ҡойроҡ аҫтығыҙҙы ентекләп, рәхәтләндереп таҙалағандар.

Борсолмағыҙ. Ваҡыт тиҙ үтә. Яраларығыҙ уңалыр. Үпкәләрегеҙ онотолор. Кеше хәтере ҡыҫҡа - һеҙҙең был ҡылығығыҙ ҙа онотолор. Дәүләт Думаһына яңынан һайлауҙар булыр. Шул ваҡытта һеҙҙе иҫкә төшөрөрҙәр. Һеҙ ҡабаттан кәрәк булырһығыҙ. Юҡ, юҡ, халыҡҡа түгел. Уға һеҙ күптән кәрәк түгелһегеҙ. Демократия һәм күп партиялылыҡ принциптарын яҡлаусыларға. Конституция гарантына.

Түҙегеҙ. Көтөгөҙ.

Ихтирам менән,

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ Бүздәк районында Матбуғат байрамы үткәрҙе. Благовар, Илеш, Кушнаренко, Саҡмағош, Дүртөйлө, Шаран райондарынан хакимиәт башлыҡтары урынбаҫарҙары, мәғариф һәм почта хеҙмәткәрҙәре, башҡа матбуғат таратыусылар ҡатнашҡан был сарала республика гәзиттәре һәм журналдары баш мөхәррирҙәре сығыш яһаны. Бындай Матбуғат байрамы гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы барышында тағы ла Өфө районының Алексеевка ҡасабаһында (27 октябрь), Мәләүез (29 октябрь), Бәләбәй (5 ноябрь), Сибай (13 ноябрь), Дыуан районы Мәсәғүт ауылында (17 ноябрь), Белорет ҡалаһында (20 ноябрь), Нефтекама ҡалаһында (25 ноябрь) яҡынтирәләге районлар вәкилдәре ҡатнашлығында үтәсәк.

✓ Өфөнөң Салауат Юлаев исемендәге майҙанында митинг булып үтте. Унда ҡатнашыусы йәштәр Республика суверенитетын ҡайтарыуҙы һәм Башҡортостандың 1993 йылғы Конституцияһын тергеҙеүҙе талап итте. Белеүегеҙсә, 1993 йылдағы референдум һөҙөмтәләре буйынса республика халҡының 75,5 проценты Башҡортостандың Рәсәй Федерацияһы менән мөнәсәбәттәрен килешеү нигеҙендә көйләү яҡлы булыуын күрһәткәйне. Әммә 2000 йылдан алып федераль үҙәк баҫымы аҫтында республика Конституцияһы 5 тапҡыр үҙгәртелде һәм унан "суверенитет" тигән төшөнсә бөтөнләй алып ташланды.

✓ Башҡорт дәүләт аграр университеты Ҡытай Халыҡ Республикаһынан килгән ҡунаҡтарҙы ҡабул итте. Шанхай ауыл хужалығы фәндәре академияһының Тупраҡ һәм ашламалар институты директоры һәм Хэйлунцзян провинцияһының ХОНЛИ инженер-биология фирмаһы президенты университеттың тупраҡ музейы менән танышты, тупраҡты тикшереү, органик ашламалар индереү, тупраҡ эрозияһы һәм уның ундырышлылығын күтәреү буйынса фекер алышыу ойошторолдо. Яҡтар тупраҡты тикшереү буйынса БР һәм ҠХР уҡыу йорттары араһында хеҙмәттәшлек итеү, ғилми мәғлүмәттәр менән уртаҡлашыу тураһында килеште.

✓ РФ Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин күптән түгел, 2010 йылда Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының барыһы ла торлаҡ менән тәьмин ителәсәк, тип белдерҙе.

СОБХАНАЛЛА!

# ХӘЛӘЛ РИЗЫҠ ЭҘЛӘП...

**БР мосолмандары диниә назаратында хәләл аҙыҡ индустрияһын үҫтереү буйынса кәңәшмә үтте. Унда "Хәләл" стандарты буйынса комитеттың етештереүселәр менән хеҙмәттәшлек итеү формалары һәм шарттары ҡаралды. Алдан хәбәр иткәнсә, БР мосолмандары диниә назараты эргәһендә төҙөлгән "Хәләл" стандарты буйынса комитет Башҡортостан территорияһында "Хәләл" индустрияһын үҫтереүҙе һәм контролдә тотоуҙы төп маҡсат итеп ҡуя һәм ул, тәү сиратта, аҙыҡ индустрияһына һәм дөйөм туҡланыу предприятиеларына ҡағыла.**

"Хәләл" һүҙе (ғәрәп телендә ул, рөхсәт ителгән, тигәнде аңлата) күптән инде мосолманға ашарға яраҡлы әйберҙәрҙең синонимына әүерелде. "Хәләл" - ул, тимәк, Ислам ҡанунына ярашлы итеп әҙерләнгән продукция маркаһы. Шәриғәт буйынса салынған мал ите татлы ғына түгел, ә кеше сәләмәтлегенә өсөн файҙалы ла һанала. Һуғымға әҙерләгән малға гормональ өҫтәмәләр ҡушылмаған экологик яҡтан таҙа аҙыҡ ашаталар. Унан һуң, түшкәнән ҡан һарҡытылғанға күрә лә ит татлы була. Заводтарҙа хәләл продукция әҙерләнгән ваҡытта шулай уҡ айырым техник шарттар күҙәтелә.

Бөгөн хәләл продукция етештереүгә донъя буйынса ҙур иғтибар бүленә. Рәсәй етештереүселәре өсөн был баҙар бигерәк тә перспективалы, ни тиһәң дә илдә 20 миллион мосолман йәшәй. Башҡортостанда был өлкә продукция етештереүселәрҙе һәм сауҙа селтәрҙәренең иғтибарын нығыраҡ йәлеп итә бара. Хәҙер республика предприятеларына тейешле маркировка тапшырыу һәм уларҙың етештереү технологияларын күҙәтеү менән "Хәләл" аҙыҡтарын етештереүгә, был өлкәлә эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә һәм башҡа производство әйберҙәренә ҡарата шарттар уйлап сығарған "Хәләл" стандарты буйынса комитет шөғөлләнә. БР Хөкүмәте эргәһендәге дин эштәре буйынса комитет рәйесе Вячеслав Пятков Башҡортостанда "Хәләл" продукцияһын етештереү дәүләт кимәленә ҡуйыла, тип билдәләп үтте. Сөнки былай аҙыҡ йәмғиәтте сәләмәтләндереүгә, уны сифатһыҙ продукциянан һаҡлауға булышлыҡ итә. Вячеслав Пятков, үҙ сиратында, туҡланыу аҙыҡтарын етештереүселәрҙе хәләл индустрияһы үҫешенә әүҙем ҡушылырға, был продукцияның башҡорт маркаһын үҫтерергә саҡырҙы.

- "Хәләл" продукцияһы - ул заман, беҙҙең тормош талабы, ул, әйтергә кәрәк, Рәсәйҙең бөтә субъекттарында ла ҙур һорау менән файҙалана, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алып китте БР мосолмандары диниә назараты рәйесе урынбаҫары Әйүп Бибарсов. - Һәм был бик мөһим, сөнки "хәләл" аҙыҡ мосолман кешеһенең донъяны аңлауында ҙур әһәмиәткә эйә.

БР Ауыл хужалығы министрлығы, Башҡортостан сертификация һәм экспертиза үҙәге, республика предприятиелары вәкилдәре ҡатнашҡан кәңәшмәлә "Хәләл" стандартының көнкүрештә ҡулланылышы тураһында һүҙ алып барылды. Әйтәйек, Турбаслы ҡошсолоҡ фабрикаһы был өлкәлә абруйлы тәжрибә булдырған да инде, бында "Хәләл" стандарты буйынса аҙыҡ-түлек 12 йыл тирәһе етештерелә һәм ул республикала ғына түгел, унан ситтә лә ҙур һорау менән ҡулланыла. Бик күп һатып алыусылар өсөн, ниндәй диндә булыуҙарынан ҡарамаҫтан, "Хәләл" маркаһы үҙенә күрә сифат билдәһе булып тора. Хәҙер төп бурыс - хәләл продукцияһының юғары сифат кимәлен тәьмин итеү.

Әйткәндәй, комитет председателе Илшат Ғизәтуллин әйтеүенсә, "Хәләл" стандарты буйынса комитет производство өлкәһендә "хәләл" ҡанунын күҙәтеүҙе контролдә тотоуҙы ғына түгел, ә уны етештереүҙе төшөндөрөүҙе лә ниәт итә. Хәләл продукцияһын сертификациялау ирекле рәүештә башҡарыласаҡ.

АФАРИН!

# БЕЙЕГӘН КЕШЕ...

## бай ҙа була, башҡаһында ла һынатмай



**Үҙе ҡурайсы, үҙе йырсы, үҙе маһир бейеүсе булған Әнфәр Нурмөхәмәтовты күптәр танып беләләр, моғайын. Яңыраҡ 50 йыллыҡ түңәрәк кенә юбилейын билдәләгән 2-се Өфө педагогия колледжының III курсында уҡый ул, музыка уҡытыусыһы булырға әҙерләнә.**

Хәҙер ғаиләләре менән Өфөлә йәшәһәләр ҙә, Әнфәр Баймаҡ районы Темәс ауылында тыуып үҫкән. Атаһы Әсҡәт Нурмөхәмәтов профессиональ бейеүсе, ул тамашасыға Йәүҙәт Бикбирҙин һалған "Игзаков" бейеүе аша яҡшы таныш. Атаһының олатаһы Абдулхаҡ та үҙе яһап алған бәләкәй генә сәхнәһен урамға сығарып һалып, саң туҙҙырып бейергә ярата. Шуға ла уға ауылдаштары "Саңтояҡ" тигән ҡушамат та таға. Ошондай бейеүселәр ғаиләһендә тәрбиәләнһә лә, Әнфәрҙе сәхнәгә тәүге тапҡыр кәнфиткә алдатып, көсләп сығаралар, ул саҡта уға өс йәштәр тирәһе була. Сәхнәнең түмен бер тойғас, әле үҙләштергән уҡытыусы һөнәрен ратһа ла, киләсәген бейеү менән бәйләргә уйлай. Тәүге уҡытыусыһы - атаһы. Уның бейеү буйынса биргән тәүге һабағын - тирә-йүнде, кешеләрҙе, уларҙың хәрәкәттәрен күҙәтергә өйрәтеүен бейеүсе өсөн мөһим һыҙаттарҙың береһе тип иҫәпләй Әнфәр, бигерәк тә ауылға ҡунаҡҡа ҡайтҡанында гел оло ҡарттарҙың ҡылыҡтарын, атлап йөрөштәрен, уларҙың шаян йөҙөндә нур булып балҡыған һәр һырҙы иҫендә ҡалдыра: был уға бейегәндә образға инергә ярҙам итә.

Һәләтле егет 2-се Өфө педагогия колледжына уҡырға килгәс, ҡурай һәм ҡумыҙға өҫтәп, бер нисә инструментта уйнарға өйрәнә, спорт менән шөғөлләнә башлай. Уҡыуҙа ла һынатмай, уҡытыусы һөнәренең бар нескәлектәренә төшөнөргә балалар баҡсаларында үҙе үткәргән практик дәрестәр булышлыҡ итә. Тәжрибәле, үҙ һөнәренең оҫталары булған колледж уҡытыусылары ла студенттарға һәр ваҡыт ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер. Улар һоҡландыра ла, ғәжәпләндерә лә белә, ижади эшмәкәрлек - ул күңел талабы, ә сәнғәт - тормоштоң айырылғыһыҙ өлөшө икәненә төшөндөрә. Уҡытыусы эшенең ни тиклем яуаплы икәнен хәҙер үҙ иңендә татып белә Әнфәр, бер генә дәрес үткәреү өсөн дә күп эҙләнергә, белергә, балаларҙы ятарырға кәрәклегенә көндән-көн инана бара. Уның фекеренсә, колледж студентҡа һөнәр биреп кенә ҡалмай, ә белгәненде бер системаға һалырға ла, уларҙы тормошта ҡулланырға ла өйрәтә. Республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған талантлы студенттар төрлө кимәлдәге конкурс һәм ярыштарҙа ла үҙҙәрен һынап ҡарай, күргәҙмәләр ойоштора, уларҙың иң һуңғы еңеүе булып юғары һәм урта белем биреү йорттары араһындағы "Ритайым" студенттар марафонында Гран-при яулау тора.

Бәләкәстәргә бейеү өйрәткәндә йыш ҡына үҙенә лә бейеүҙәр һалырға, төрлө хәрәкәттәр уйлап табырға тура килә Әнфәргә. Йышыраҡ тәбиғәттә булырға, һыу ағышын, төнгө күк йөҙөндәге йондоҙҙар емелдәүен күҙәтергә ярата, тап шул саҡта яңы бейеүҙәр, идеялар тыуа. Тарихи шәхестәр менән ҡыҙыҡһына, уларҙың тормошон өйрәнә. Быйыл "Байыҡ" телевизион конкурсында ҡатнашырға уйлап, атаһы менән "Ҡаһым түрә" тигән бейеү һала, бында уға белгәндәре яңы деталдәр уйлап табырға мөмкинлек бирә. Бейеүҙең башында Ҡаһым түрә ҡурайҙа уйнап сыға, ә бейеүҙең аҙағында уның тоғро юлдашы ҡурай ерҙә ятып ҡала, был Ҡаһым түрәнең дошмандары тарафынан ағыуланып үлтерелеүенә ишара яһай. "Ҡайтыу" тип аталған бейеүен дә тамашасы яҡшы ҡабул итә. Конкурстың өсөнсө турын уңышлы үткән Әнфәрҙе тиҙҙән "Байыҡ"тың гала-концертында һеҙ ҙә күрә аласаҡһығыҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

МӨҺИМ ХӘБӘР!

# ЭШЕНДЕ ҠУЙЫП ТОР - акция һине хәстәрләй, гүзәл зат

**31 октябргә тиклем Өфөлә "Үҙенде тикшер һәм сәләмәт бул: күкрәк биҙе яман шешен профилактикалау" акцияһы үтә. Баш ҡалабыҙҙа беренсе тапҡыр бындай акция былтыр үткәрелде һәм унда 6 меңгә яҡын ҡатын ҡатнашты.**

2003 йылдан алып күкрәк биҙе яман шеше сире онкологик ауырыуҙар араһында үпкә яман шешенән ҡала икенсе урында тора. Ул онкологик ауырыуҙарҙың 10,5 процентын тәшкил итә. 1996 йылда 100 мең кешегә 20 ошондай сирле ҡатын-ҡыҙ теркәлһә, бөгөн Башҡортостанда 100 меңгә 30-ҙан ашыу сирле теркәлә. Үлем осрағы 40 процентҡа етә. Бөтә яман шеш ауырыуҙары кеүек үк, күкрәк биҙе яман шеше 4 стадиянан тора. 1-2-се стадияла ауырыуҙы дауалап була. Ләкин 3-4-се стадияла дауалау ҡыйынға төшә. Сирҙең юғары нөктәһе 50 йәшкә тура килә. Төп сирлеләр контингенты - 40-60 йәшлектәр. Ләкин һуңғы йылдарҙа 30 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙарға ла күкрәк биҙе яман шеше диагнозы ҡуйыла.

Баш ҡалала поликлиникалар, ҡатын-ҡыҙ консультацияһы кабинеттары етерлек булыуға ҡарамаҫтан, 4-се стадияла, дауалау бөтөнләй ауыр булғанда ғына табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр күп. Ваҡытында тикшеренеү үткәндә шеште башланғыс стадияларҙа уҡ белеп була. Ә башланғыс стадияла 90 проценттан ашыу осраҡта сирҙе дауалап була. Шуға ла 40 йәште үткән ҡатындарға йылына бер тапҡыр булһа ла табип-маммологҡа күренергә кәңәш ителә.

Акция ҡатын-ҡыҙҙарға үҙ теләге тикшеренеү үтергә мөмкинлек бирәсәк. Тикшереүҙәрҙә баш ҡала дауаханалары онкологтары, маммологтары ҡатнаша. Бөтә процедуралар бушлай. Шулай уҡ консультация алырға була. Акция барышында 40 йәште үткән ҡатын-ҡыҙҙар алдан уҡ маммографияға 246-46-46 телефоны буйынса шылтыратып яҙыла ала. Шулай уҡ 279-04-81 телефоны буйынса "Ҡыҙыу бәйләнеш" эшләй. Һәр кем үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы иртәнге 9 сәғәттән 17 сәғәткә тиклем белгестәргә бирә ала. Шылтыратыу бушлай.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Яңыраҡ Өфөлә "Затон" подстанцияһының беренсе сираты файҙаланыуға тапшырылды. Ул "8 март" микрорайоны тирәһендә, Ағиҙел йылғаһының һул ярында төҙөлгән.

✓Черниковка биҫтәһендә урынлашҡан "Ижад" күргәҙмә залында Учалы рәссамы Рим Юнысовтың шәхси күргәҙмәһе асылды. Ул октябрь аҙағына тиклем дауам итәсәк.

✓24-25 октябрҙә лә Өфөлә 18 майҙанда ауыл хужалығы йәрминкәләре үтәсәк. Был юлы уларҙа Благовар, Баҡалы, Мишкә, Архангель, Ауырғазы, Ҡырмыҫҡалы, Борай, Нуриман, Ҡариҙел, Стәрлебаш, Иглин, Шишмә, Стәрлетамаҡ райондары етештереүселәре ҡатнаша.

✓Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында 30 октябрҙә популяр рэп башҡарыусыһы МС Баштың (Заһит Ҡунафин) яңы концерты буласаҡ. Программала шулай уҡ билдәле йәш рэп башҡарыусылар ҡатнаша. Ә 31 октябрҙә Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Флүрә Килдейәрованың ижад кисәһе үтә. Йырсының 30 йыллыҡ сәхнә ижадына арналған концертта Рәил Кучуков, Йәмил Әбделмәнов, Хәлит Фәтихов, Хәмит Ижболдин һәм башҡа артистар, уҡыусылары ҡатнаша.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Территориаль финанс идаралығы начальнигы Илгиз Насыртдинов быйылғы туғыҙ айҙа ҡала бюджеты үтәлеше тураһында мәғлүмәт бирҙе. Билдәләнелеүенсә, ҡала округы территорияһында йыйылған бөтә кимәлдәге бюджет килемдәре 72 миллиард һум тәшкил иткән, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 23 процентҡа кәмерәк.

✓20 октябрҙән 18 декабргә тиклем БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы башланғысы менән йәштәр мөхитендә сәләмәт тормош алып барыуға арналған республика социаль реклама конкурсы уҙғарыласаҡ. "Тышҡы реклама", "Видеореклама", "Аудиореклама", "Иң яҡшы тематик сайт интернет селтәрендәге бит" номинацияларында еңеүселәр призлар менән бүләкләнәсәк. Конкурс эштәре "Башҡортостан медицина профилактикаһы үҙәге" дәүләт һаулыҡ һаҡлау учреждениеһында ҡабул ителә. Белешмә телефондары: 272-66-84, 272-84-02.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# КИТАП УҠЫУҘАН...

## туҡтаманыҡ һәм туҡтамабыҙ ҙа

**Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 90 йыллығына арналған "Мин түгелмен ерҙең ҡунағы" тип аталған республика әҙәби марафонында еңеүселәрҙе ҡотлау тантанаһы булып үтте. Әҙәби марафонда республиканың муниципаль район һәм ҡала округтары ҡатнашты. Еңеүселәрҙең бер нисәһенә түбәндәге һорау менән мөрәжәғәт иттек:**



**Бөгөнгө йәмғиәтебеҙҙә, кешеләр тормошонда китапханалар ниндәй урын биләй? Халыҡ китап уҡыймы?**

**Айгөл БУРАНҒОЛОВА, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың тыуған яҡты өйрәнеү һәм туған тел бүлеге етәксеһе:** Беҙҙең китапхана - республикала иң ҙур һәм төп китапханаларҙың береһе. Республикала уҙғарылған мәҙәни сараларҙа ҡатнашмайынса ҡалмайбыҙ, бигерәк тә беҙҙең бүлек һәр сараның уртаһында ҡайнай. Шулай уҡ әленән-әле үсмә күргәҙмәләр ойошторабыҙ. Китапхана йәмғиәттә һәр саҡ төп урындарҙы биләне. Бынан бер нисә йыл элек китапханаға йөрөүселәр бер аҙ әҙәйеп киткәйне. Хәҙер, киреһенсә, халыҡ йыш килеүҙән китапхана ишектәре ябылмай, тип тә әйтә алабыҙ. Улар араһында йәштәр ҙә бар. Хәҙер китапханабыҙ заман талаптарына яуап бирә: бүлектәрҙә компьютерҙар ҡуйылды, уҡыусылар электрон вариант менән дә ҡуллана ала.

**Нәзирә КӘРИМОВА, Ейәнсура үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры:** Хәҙерге заманда ауыл ерлегендә китапхана мәҙәни үҙәк тә, мәғлүмәт үҙәге лә, ваҡыт уҙғарыу һәм аралашыу урыны ла булып тора. Ысынлап та, бында кеше китап уҡыйым, тигән маҡсат менән генә килмәй. Элегерәк китапханаларға халыҡтың 70 проценты йөрөһә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер ул һан түрлө кимәлдә тирбәлә. Беҙҙең китапхананан кешеләр өҙөлгәне юҡ, Аллаға шөкөр. Китапханаға йөрөүсе, китапһыҙ йәшәй алмаусы айырым бер ҡатлам бар, тип әйтергә кәрәк. Улар араһында уҡыусылар ҙа, пенсионерҙар ҙа, уҡытыусылар ҙа бар. Улар араһында пенсионерҙар - иң әүҙеме. Шулай уҡ гәзит-журналға яҙылырға мөмкинлектәре булмағандар ҙа китапханаларға килә.

Тормошобоҙға заманса технологиялар килеп инеп, бар халыҡ интернетҡа ябырылғас, кешеләр китапты онотор инде, тип ҡурҡҡайныҡ. Ләкин китаптың алмаштырғыһыҙ ҡиммәт икәненә тағы бер тапҡыр инандыҡ: халыҡ һаман да китап уҡый, китапханаларға йөрөй. Был уларҙың күңел талабы, сөнки китап - ул рухи хазина. Китап уҡыу - үҙе бер ләззәт бит ул. Бындай тойғоларҙы компьютер бирә алмай. Уҡыусыларҙы йәлеп итеү, уларҙың ҡыҙыҡһыныуын уятыу маҡсатында төрлө саралар уҙғарабыҙ. Мәктәп менән бергә эшләйбеҙ, сөнки китапҡа, әҙәбиәткә һөйөүҙе кесе йәштән тәрбиәләү мөһим.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА, Баймаҡ үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры:** Китапхана тарихына күҙ һалһаҡ, барлыҡҡа килгәндә уларҙың төп бурысы китап биреп ултырыу, кешеләрҙе грамотаға өйрәтеү булған. Йылдар үткән һайын, китапхананың роле үҙгәрә, киңәйә. Китапхана хәҙер мәғлүмәт үҙәге генә түгел, рухи тәрбиә үҙәге ролен да уйнай. Халыҡ бында ял итә, күңел аса, аралаша.

Китапханаларҙа кешелектең мең йыллыҡ тарихы һаҡлана. Беҙ шул китаптарҙы халыҡҡа, киләсәккә еткереүселәр. Нисә йылдар буйы һаҡланған гәзит-журналдар, ҡулъяҙмалар, китаптар аша беҙ милләтебеҙҙең йылъяҙмаһын уҡый алабыҙ. Бында шулай уҡ ябай кешеләрҙең ижади эштәре лә һаҡлана. Заман башҡа - заң башҡа, тигән кеүек, һуңғы йылдарҙа республика китапханалары заманса технология менән яңыртылды, яңы системалар барлыҡҡа килде, юридик хеҙмәттәр булдырылды. Мин бер ваҡытта ла интернет менән китапты ҡара-ҡаршы ҡуймайым, һәр береһенең үҙ роле, үҙ урыны бар. Киреһенсә, улар бер-берен тулыландырып тора. Улар беҙҙән эшебеҙҙе еңеләйтә генә, хәҙер беҙ кешеләргә төрлө мәғлүмәтте тиҙ арала табып бирә алабыҙ. Төрлө ҡатламдағы уҡыусылар менән даими эшләйбеҙ, әҙәбиәткә йәлеп итер саралар уҙғарабыҙ. Заман һулышы менән бергә атларға тырышабыҙ. Уҡытыусылар, уҡыусылар беҙгә килеп материал ала. Конкурстар, ижади бәйгеләр уҙғарған саҡта халыҡтың ижад офоғо киңәйә. Заман үҙгәрһә лә, китаптың бәсе төшөргә тейеш түгел, беҙ ҙә үҙ эшебеҙҙә китапхананың кешеләргә кәрәклеген иҫбат итергә тырышабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Китап уҡыған - уңыр, уҡымаған - туңыр, тигән мәҡәл бар халыҡта. Бөгөнгө көндә интернет төп мәғлүмәт сығанағы булғанға күрә, ошоға тиклем китапханаларҙа халыҡ һаны кәмегәндер, тигән фекерҙә инем. Тырыш, яуаплы китапханасылар менән аралашҡандан һуң, улар кеүек үҙ эшенә мөкиббән киткән һөнәр эйәләре булғанда, улар халыҡ китапты онотмаһын, тип янғанда, китаптың бәсе бер ҡасан да һүнмәҫ, китапхана ишектәре бер ҡасан ла ябылмаҫына инандым.**

Зәкирә АБДУЛЛИНА
яҙып алды

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮ ҘӘ ЕҢЕҮ...

## Артабан да шулай булһын

**Хәҙер "Өфө - Арена" боҙ һарайы эргәһендә ҙур сират теҙелеүе гәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Мәскәүҙең "ЦСКА" хоккейсылары менән осрашыу алдынан сират айырыуса ҙур булды. Шулай булмай һуң! "ЦСКА" уйынсылары һуңғы 8 уйында бер тапҡыр ҙа отолманы бит. Тимәк, юлаевсылар менән Мәскәүҙән килгән ҡунаҡтар араһындағы көс һынашыу айырыуса мауыҡтырғыс буласаҡ. Тәжрибәле көйәрмәндәр буласаҡ матчты шулайыраҡ самаланы.**

Ғәмәлдә матч көтөлгәндән дә ҡыҙыҡлыраҡ булып сыҡты. Тәүҙә хоккейсылар тулҡынтулҡын булып ике яҡҡа ла ябырылды. Һуңыраҡ майҙан хужаларының өҫтөнлөгө нығыраҡ һиҙелә башланы һәм беренсе осор аҙағында Виктор Козлов ҡунаҡтар ҡапҡаһына тәүге шайбаны сәпәне.

Икенсе осорҙа ла юлаевсылар тиҙлекте кәметмәне. Дәғүәселәр ҡапҡаһы алдында хәүефле хәлдәр әленән әле ҡабатланып торҙо һәм Патрик Торесен икенсе шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына елгәрҙе.

Өсөнсө осорҙа еңеү голын Сергей Зиновьев индерҙе.

Дәғүәселәр хатта күпселектә уйнағанда ла уңышҡа өлгәшә алманы. Мауыҡтырғыс матч 3:0 иҫәбе менән тамамланды.

Нижний Новгородтың "Торпедо" командаһы Рәсәйҙә иң көслөләрҙең береһе. Исеме генә лә ни тора! Әммә был юлы ул юлаевсылар менән алышҡанда исемен аҡлай алманы, дөрөҫөрәге, мәргәнлек күрһәтә алманы. Беренсе осорҙа Александр Пережогин иҫәпте асты. Икенсе осорҙа, ниһайәт, Руслан Нуретдинов мәргәндәр сафына ҡушылды. Ул ҡунаҡтар ҡапҡаһы артында ҡабыҙған ут йүнләп һүнеп тә бөтмәне, Дмитрий Калинин 3-сө шайбаны "Торпедо" ҡапҡаһына сойорғотто.

Икенсе осор башынан алып ахырынаса юлаевсылар өҫтөнлөгө менән үтте. Һуңғы 4-се голдың авторы әлеге лә баяғы Александр Пережогин булды. Бер матчта ике гол индереү һәр кемгә лә тәтемәй.

Ҡунаҡтар бары тик өсөнсө осорҙа ғына бер шайба менән яуап ҡайтара алды. Максим Варнаков күпселектә уйнауҙан оҫта файҙаланды.

Һөҙөмтәлә, ышандырырлыҡ еңеү: 4:1!

21 октябрь көнө "Салауат Юлаев" Мәскәү өлкәһенең Чехов ҡалаһынан "Витязь" командаһын ҡабул итте. Ҡунаҡтар әллә ни ҡаршылыҡ күрһәтә алманы, улар бары тик бер шайба ғына индерә алды. Ә майҙан хужалары иһә Чехов ҡалаһы хоккейсыларына ябай еңеү генә түгел, 6 гол сәпәп, уларҙы бөтөнләй иҫәңгерәтте. Шайбаларҙы Максим Кондратьев, Руслан Нуретдинов, Дмитрий Калинин индерҙе, ә Патрик Торесен 3 гол авторы булды.

Юныс ӘХМӘҘИЕВ.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Бал



Бал иммун системаһын нығыта, бөтә ағзаларҙың эшен нормалләштерә. Балда тәбиғи антибиотик бар, ул организмдағы микробтар менән көрәшә.

Балдың һәр төрө файҙалы, шулай ҙа һайлап алырға мөмкинлек булһа, витаминдарға иң байы - сәскә балы. Һыуыҡ тейгәндә, ангина, ҡурылдай (бронхит) ауырыуынан йүкә балы яҡшыраҡ. Йөрәк ауырыуҙарына ҡандала үләне (донник) балы, үт, һейҙек ҡыуыу өсөн күк сәскә (василек) балы яҡшы. Ҡарабойҙай балы организмға кәрәкле тимергә бай. Балдың кире тәьҫире юҡ, шулай ҙа көнөнә 2 балғалаҡ бал ашаһа, кешегә етә.

Ҡан тамырҙары насарайып, тәндең төрлө ерендә (ҡул, бармаҡтарҙа, аяҡта) бәләкәй ҡан тамырҙары шартлап, күгәреп торһа, 2 ай ошо төнәтмәне эсергә: 1-әр балғалаҡ меңъяпраҡ, юл үләне япрағы, кесерткәнде ҡушып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтмәне көнө буйы эсеп бөтөргә. Үләндәрҙе пакеттарға һалынғандарын һатып алһағыҙ, 1-әр пакет үләнгә ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ябып торорға ла, 1 балғалаҡ бал өҫтәп, көнө буйы эсергә.

Был төнәтмә ашҡаҙан аҫты биҙенең эшмәкәрлеген яйға һала, хроник панкреатит менән сирләгән кешеләрҙең хәлен яҡшырта, эс күбеүҙе бөтөрә. Кукуруз ептәре, бәпембә тамыры - 1-әр ҡалаҡ, цикорий, меңъяпраҡ, шалфей 1-әр балғалаҡ алып, ярты литрлы һауытҡа һалып, ҡайнар һыу өҫтәп, ярты минут һыу ҡайнатырға ла, 20 минут таҫтамалға урап тотҡас, һөҙөп алырға. Төнәтмәне өскә бүлеп, ашарға 15 минут ҡалғас, ете көн буйы эсергә. Оҡшаһа, бер аҙ ял иткәс, ҡабатларға. Был төнәтмәгә лә бал ҡушырға була, тик уны өҫтәгәндә төнәтмә 60 градусҡа һыуынырға тейеш, юғиһә балдың составы боҙола. Был төнәтмә бауырҙы таҙарта, эсәктәрҙең эшен яйлай, аппетитты нормаллләштерә, нервыларҙы тынысландыра. Был составта фитогормондар бар, улар организмды йәшәртә.

Организмды йәшәртеү өсөн тағы бер төнәтмә: 1/2 стакан миләш менән баланды иҙеп, өҫтөнә 0,5 л ҡайнар һыу өҫтәп, йылымыс хәлгә килгәс, 3 ҡалаҡ бал өҫтәп, көнө буйы эсеп бөтөрөргә.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

ДИНЕБЕҘҘӘ- КӨНӨБӨҘ

**Баш ҡалабыҙҙың Максимовка биҫтәһендә урынлашҡан "Асия" мәҙрәсәһендә мосолман реабилитация үҙәге асылды. Унда эскелек, наркоманлыҡ кеүек афәттәр тырнағына эләккәндәргә ярҙам күрһәтәләр. Ошо изге башланғыс, ғөмүмән, Ислам дине тураһындағы фекерҙәре менән был үҙәкте ойоштороусы, "Асия" мәсетенең имамы Нурмөхәмәт хәҙрәт НУРИЕВ уртаҡлаша.**



# ЯҠЫНЫҢ ЯМАНҒА ТАРЫНЫМЫ?

## Уны динебеҙ ҡотҡарыр - шуға ышан

### Аңыбыҙ дауаланыуға мохтаж

Һуңғы йылдарҙа кешелекте ялмап алған наркоманлыҡ, эскелек кеүек афәттәрҙән ҡотолоу өсөн төрлө саралар һынап ҡаралды. Медицинаға мөрәжәғәт итеп, көслө-көслө дарыуҙарҙа ҡулландыҡ, халыҡ дауалаусыларына ла барып ҡараныҡ... Төҙәлгән кеүек булһа ла, бер аҙ ваҡыт үҙыу менән был сиргә тарыусылар барыбер элекке хәленә кире ҡайта. Ә был сир унның һайын ҡотора, арабыҙҙан йөҙәрләгән кешене упҡынға тәгәрәтә...

Килеп тыуған ошо афәтте бер аҙ хәл итеү маҡсатында мәсетебеҙҙә мосолман реабилитация үҙәге астыҡ. Был Рәсәйҙә әлегә тәүге һәм берҙән-бер үҙәк булып тора. Ә христиан реабилитация үҙәктәре күптән эшләп килә, сөнки улар былдай проблемалар менән элек-электән таныш. Хатта улар араһында бушлай дауалау тәҡдим итеүселәр, ошо юл менән бөләгә осраған беҙҙең милләт вәкилдәрен үҙҙәренә йәлеп итеүселәр ҙә бар. Халҡыбыҙҙың күпләп сиркәүгә киткәнен, хатта ҡайһы берҙәренең христиан диненә күсеп, суҡынғанын күреп, йөрәк әрней.

Беҙҙең реабилитация үҙәгенең төп маҡсаты - кешегә рухи көс биреү, уның күңелен, аңын дауалау. Беҙҙең халыҡ араһында наркоманлыҡҡа ҡарағанда, эскелек менән мауығыусылар күберәк. Эскелеккә бирелгән кеше өсөн иң тәүҙә уның яҡындары борсола һәм уны был сирҙән ҡотҡарыу юлдарын эҙләй. Тик эскән кеше имандың рухи ҡиммәттәрен үҙе аңлауға килергә тейеш, шунһыҙ уны дауалауҙың файҙаһы юҡ. Шундай хәлдәр ҙә осраткаԋыбыҙ бар: ҡайһы бер имамдарыбыҙ, дауалайбыҙ, тип, айнып та етмәгән кешенең ҡулдарын Ҡөрьән өҫтөнә ҡуйып, ант иттерә. Хатта уға, һин Аллаһ ҡаршыһында ант бирҙең, тип, сертификат формаһында ҡағыҙ ҙа яҙып тоттора. Был дөрөҫ түгел. Беҙ кешене тәрбиәләгән ваҡытта иң тәүҙә уға ғүмер ҡәҙере, тормош мәғәнәһе, иман тураһында аңлатырға тейешбеҙ.

Ҡөрьән-Кәримдә былай тиелә: "Һеҙ үҙегеҙҙең хәлегеҙҙе үҙегеҙ үҙгәртергә теләмәйенсә, мин һеҙҙең берегеҙҙең дә хәлегеҙҙе үҙгәртмәйем". Ябай итеп әйткәндә, беҙҙең халыҡта шундай мәҡәл бар: "Һәр кемдең бәхете үҙ ҡулында". Кем булһаң да, ҡайҙа эшләһәң дә, нимә менән шөғөлләнһәң дә, тормошоңдоң мәғәнәһен таба, бәхетеңде яулай белергә кәрәк. Башҡа бер кем дә беҙҙең хәлебеҙҙе үҙгәртә алмай.

Бөләгә тарығындарға беҙ бер ниндәй ҙә мөгжизәләр вәғәҙә итмәйбеҙ. Реабилитация үҙәгендә дауаланыуҙың айырым бер ваҡыты бар: эскелек сиренән яфаланыусылар ярты йыл, ә наркотик ҡулланыусылар бер йыл дауалана. Беҙ дауаланған кешеләргә киләсәктә юғары дини белем алырға ла тәҡдим итәбеҙ. Ул кеше ниндәй эш башҡарһа ла, ғаиләһендә ҡатыны өсөн һөйөклө ир, балалары өсөн яратҡан атай, эшендә кәрәкле хеҙмәтсе булып ҡалырға тейеш.

### Дауалау нимәнән ғибәрәт?

Беҙгә мөрәжәғәт итеүселәр күп булһа ла, араларында нәҡ беҙ тәҡдим иткән юл менән дауаланырға теләүселәр бик аҙ. Килгән кешене дауалай башлағанда иң беренсе Аллаһты танырға өйрәтәбеҙ. Артабан Ислам дине нигеҙҙәре, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләре менән таныштырабыҙ, күңелһеҙ булмаһын өсөн видеотаҫмалар күрһәтәбеҙ, мосолмандар менән аралаштырабыҙ.

Һәр кемдең дә тормошонда хаталар була. Әммә кемдер яңылышҡан икән, беҙ уға үҙенең хатаһын аңларға ярҙам итергә тейешбеҙ. Тәүге кисектергеһеҙ аҙым - тәүбә итеү. Тәүбә итеү - ул наркоманлыҡтан, эскелектән, башҡа етешһеҙлектәрҙән дә арынып, ысын күңелдән Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итеү, намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу. Кеше тәүбәһенә килһә, әсәнән яңы тыуған сабый кеүек саф булыр.

Дауаланыусылар менән төрлө ерҙәргә экскурсияға сығабыҙ. Төрмәгә лә алып барабыҙ, сөнки үҙ күҙҙәре менән күрмәйенсә, күп нәмә әҙәмдең башына барып етмәй. Беҙ тормоштоң төрлө яҡтарын ҡоро һүҙ һөйләп кенә түгел, ә күрһәтеп, миҫалдар менән дә аңғартырға тейешбеҙ. Төрмәгә алып барған ваҡытта ундағыларҙың ниндәй ыҙа менән йәшәгәнен күреп, тетрәнеп ҡайталар. Унан һуң, йәштәргә эскән, тартҡан, наркотик ҡулланған кешенән ниндәй балалар тыуғанын күрһәтергә кәрәк. Йәмғиәткә бер ниндәй файҙа килтерә алмаҫлыҡ балалар тыуыуы - халҡыбыҙҙың афәте.

Интернетта "Нәсихәт" тигән сайтыбыҙ бар, унда был афәттән ҡотолған кешеләр үҙҙәренең кисерештәре, тормошта нисек юл табыуҙары тураһында уртаҡлаша. Үҙеңдең хатаңды аңлай белергә кәрәк. Күптәрҙең үҙ-үҙенә ышанысы, ихтыяр көсө юҡ.

Беҙҙә күбеһенсә бала саҡтан эш эшләп, тир түгеп үҫмәгән етәкселәрҙең, йә булмаһа, ғаиләләрҙә иркә генә үҫкән балалар дауалана. Ғөмүмән, наркоманлыҡ, эскелек менән мауыҡҡан кешелә хроник ялҡаулыҡ була. Шуға күрә, уҡыуҙан тыш, уларҙы хеҙмәткә лә өйрәтәбеҙ. Улар үҙҙәре ашарға бешерә, кейемен йыуа, бүлмәләрҙе таҙарта. Мәҙрәсә булһа ла ҡаты тәртип урынлаштырҙыҡ, дауаланыусылар бөтә эште лә беҙҙең рөхсәт менән генә башҡара. Әгәр тәртип боҙа ҡалһалар, өс тапҡыр иҫкәртеү яһайбыҙ. Тәртип боҙоу тағы ла ҡабатланһа, уйларға ваҡыт бирәбеҙ, төҙәлмәһә, өйөнә ҡайтарабыҙ.

### Дини кеше хөрмәткә лайыҡ

Үкенескә күрә, ҡайһы берәүҙәрҙән: "Кисә ҡапҡа төбөндә эсеп ятҡан кешеләр бөгөн мулла булып алған", - тигән фекерҙәр ишетергә тура килә. Әгәр ҙә кемдер тормошта хаҡ юлды тапҡан, элекке бөтә кәмселектәренән, хаталарынан, гонаһлы эштәренән ҡотолған, тәүбә иткән, нәфсеһен еңергә көс таба алған икән, ул - оло хөрмәткә лайыҡ һәм был кешенән дә хәйерле кеше юҡ. Беҙ ул кешене маҡтамаһаҡ та, Аллаһ быны белә, күрә. Ниндәй генә кеше булмаһын, дингә килгән, намаҙға баҫҡан икән, әлхәмдүлиллаһ, шөкөр итергә кәрәк. Ул кешеләргә ҡарап, үҙенде уларҙан өҫтөн ҡуйыу кәрәкмәй, ә ҡыуаныу һәм фәһем алыу, миңә лә мәсеткә барып, намаҙ уҡырға, сауабымды арттырырға кәрәк, тип уйланыу мөһим. Үҙебеҙгә ситтән ҡарарға өйрәнһәк, файҙалы булыр ине. Күптәр мәсеткә йөрөмәҫ өсөн ниндәйҙер сәбәп, һылтау эҙләй. Уларға йә мәсете, йә уны төҙөткән кешеһе, йә муллаһы оҡшамай. Ә үҙенең кемлеге һәм ниндәй сифаттарға эйә булыуы тураһында уйлап та ҡарамай. Кемдендер етешһеҙлеген уның артында һөйләп йөрөү - ҙур гонаһ. Бигерәк тә дини юлға баҫҡан, хаҡлыҡты тапҡан кешегә беҙ хөрмәт менән ҡарарға, уның өсөн ҡыуанырға тейешбеҙ.

Бәйғәмбәребеҙҙең бер хәҙисендә: "Ҡайһы бер халыҡтарға дин тыныслыҡ менән инде һәм улар уны үҙ иректәре менән ҡабул иттеләр, уларға ахыры заманға тиклем тыныслыҡ, бәрәкәт булыр. Ҡайҙалыр дин ҡылыс менән урынлаштырылды, ҡиәмәт көнөнә тиклем шулай дауам итер", - тиелә. Миҫалға беҙҙең халыҡты килтерергә була. Беҙҙә ихтилалдар, һуғыштар булып уҙһа ла, дин нигеҙендә һуғыштар булманы. Ә ҡайһы бер илдәрҙә дин урынлашҡан ваҡытта ҙур-ҙур ҡаршылыҡтар килеп сыҡты.

Халҡыбыҙҙы наҙан, диндән йыраҡ, тип һис тә әйтергә ярамай. Борон ауылдарҙа һәр өйҙә тиерлек ғәрәп, фарсы, рус, төрки телдәрен белеүсе дини ғалимдарыбыҙ булған. Элек беҙҙең Волга буйы халыҡтары бер йылға 2000 дана Ҡөрьән алдырған. Бөгөнгө көндә лә мосолмандар күп, Аллаға шөкөр, шул уҡ дана китаптар алына. Әммә ул замандарҙа бер Ҡөрьән бер һыйыр хаҡына тиң булған. Ул ваҡытта башҡортса тәфсирҙәр булмаған, сөнки беҙҙең халҡыбыҙ ғәрәп телен һыу кеүек эскән.

Халҡыбыҙҙың Зәйнулла ишан, Мөжәүир хәҙрәт кеүек әүлиәләргә тиң дини кешеләре шул тиклем күп булған. Тик уларҙың юлы ныҡлап өйрәнелмәгән. Бөгөнгө көндә кеше ышандырып, бер-ике сүрә ятлап, ауырыуҙарҙы өшкөрөп йөрөгәндәр күбәйеп бара. Ә диндә белмәгәндәр уларҙы әүлиә тип күрергә ғәҙәтләнеп китте. Әүлиәләрҙең төп сифаты - баҫалҡылыҡ, халыҡ алдында ул кешеләр үҙҙәренең абруйын ошо күркәм сифат менән һаҡлаған. Маҡтаныу, ихласһыҙлыҡ күрһәтеү уларға бөтөнләй хас булмаған. Әүлиәләрҙең дөрөҫлөгөн аңлай һәм аңлата белеү өсөн бөгөн ғилемле белгестәребеҙ етешмәй.

### Мәсеттең төп функцияһы

Һуңғы йылдарҙа илебеҙҙә мәсеттәр күбәйеүе ҡыуанлыслы хәл булһа ла, уларҙың буш, йә бикле тороуы күңелде әрнетә. Бында беҙҙең дә хатабыҙ бар, сөнки эште дөрөҫ башламайбыҙ. Дини тарихыбыҙға күҙ һалайыҡ әле. Бәйғәмбәребеҙ нисә йылдар буйы Мәккәлә, Мәҙинәлә Ислам динен таратҡан. Һуңынан ғына Мәккәлә төп изге мәсетебеҙҙе төҙөткән. Ә беҙ эште киреһенсә башлайбыҙ. Дин таратыу маҡсатында ауылдарҙа бер ниндәй ҙә эш башҡармайынса, иң беренсе мәсет төҙөйбөҙ. Уныш йыйыр өсөн башта орлоҡ сәсергә кәрәк, ә беҙ үҫмәгән емештәрҙе йолҡоп маташабыҙ. Унанбынан аҡса йыйып төҙөлгән мәсеттәр буш тора, бер ниндәй ҙә дини уҡытыуҙар алып барылмай. Шулай уҡ мәсет төҙөлгән ваҡытта тик хәләл аҡсалар ғына ҡулланылырға тейеш. Мәсет һәм мәҙрәсә - иман йорто, рухи тәрбиә урыны. Эшебеҙҙе дөрөҫ һәм изге ниәттәр менән башлаһаҡ, иман таратһаҡ, халыҡ мәсетте үҙе үк төҙөп ҡуйыр. Борон беҙҙең ауылдарҙа бөләкәй булһа ла өс-дүрт мәсет булған. Утын булмаған хәлдә лә, тиҙәк яғып булһа ла, мәсеттәрҙе йылытҡандар, сөнки улар буш тормаған. Биш ваҡыт намаҙға кешеләр һәр ваҡыт йыйылған. Был беҙҙең халыҡтың иманы ни тиклем юғары булғанлығын күрһәтә.

Бөгөнгө көндә илебеҙҙә, әлхәмдүлиллаһ, ас-яланғас кешеләр юҡ, йәшәйешебеҙ матур, әммә беҙ рухи ҡиммәттәребеҙҙе юғалта барабыҙ. Бөтә был ҡот осҡос афәттәр халҡыбыҙҙың динһеҙлеге арҡаһында килеп сыҡты. Халҡыбыҙҙың аңын уятырға, рухи ҡиммәттәребеҙҙе тергеҙергә, белемебеҙҙе арттырырға кәрәк. Бының өсөн беҙгә асылыбыҙға ҡайтырға, динебеҙ ҡушканса йәшәргә кәрәк. Иншалла, Аллаһы Тәғәлә изге ниәттәребеҙҙе бойомға ашырһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кеше Аллаһы Тәғәләнең ерҙәгә хәлифәһе булараҡ, Ислам дине, шәриғәт буйынса ғүмер итеү өсөн яратылған бер зат. Бәйғәмбәребеҙ ҙә: "Ошо ике әйбергә тотонһағыҙ, аҙашмаҫһығыҙ. Улар - Ҡөрьән менән хәҙис", - тигән. Тормошта яңылышмаҫ, асылыбыҙҙан тайпылмаҫ, шайтандың төрлө тоҙаҡтарына эләкмәҫ өсөн, ысынлап та, Ҡөрьәнгә таянып, хәҙистәрҙән һабаҡ алып тормош көтәйек. Әгәр ҙә инде яҡындарығыҙ бөләгә юлыҡһа, үҙегеҙҙе борсоған һорауҙар тыуһа, ярҙам кәрәк булһа, "Асия" мәсетенә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Телефоны 261-02-33.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

✔ **Мәләүез районының төньяғында ла юрматылар көн күрә. Әгәр тәүҙә аталған ике ырыу башҡорттарҙың берләштерелгән беренсе дөйөм дәүләте Ете ырыуға инһә, юрматыларҙың айырым ханлыҡта йәшәүе мәғлүм.**

ТАРИХИ ХӘТЕР

# ӨС ТАҒАН ТАРҠАЛМАҪ, ТИП...

## Мәләүездә өс ырыуға арнап стела астылар

**Милли үҙаңды тергеҙеүҙә, илһөйәрлек тәрбиәләүҙә "Шәжәрә байрамдары", "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" кеүек йолауи саралар менән бер рәттән, ырыуҙар хәрәкәте лә мөһим роль уйнай.**

**Мәләүез районы күршеләренән майҙаны, тәбиғәте, уңған кешеләренән тыш, был төбәкте үҙ иткән өс башҡорт ырыуы -юрматы, тамъян, ҡыпсаҡ вәкилдәре йәшәүе менән дә айырыла. Тимәк, бөгөн беҙҙә өс мәҙәниәт, өс гөрөф-ғәҙәт, өс традиция йәшәй, ижад итә. Бәлки, шуғалыр ҙа, мәләүездәр тырыш, сәмле, киләсәккә ҙур пландар ҡора. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына, өс таған тарҡалмаҫ, тимәгән.**

**Ошо көндәрҙә Мәләүездә ғәжәп матур тамаша булды - Смаҡ ауылы эргәһендәге матур аҡланда ошо өс ырыу дуҫлығын сағылдырған стела асылды. Бына ырыу бейҙәре Шәғәле Шаҡман, Арыҫлан батыр Аҡколов һәм Тәтегәс бейҙәрҙең ырыуҙаштарын берҙәмлеккә әйҙәгән, телде, ерҙе һаҡларға өндәгән саҡырыу-орандары яңғырай. Артабан ошо йыйындың ҡорбашы итеп һайланған Мәләүез районы етәксеһе Малик Вахитов телмәр тота. Шунан һүҙ ҡунаҡтарға - Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башкарма комитеты рәйесе Румиль Аҙнабаев, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге етәксеһе, "Юрматы" ырыуы ҡорбашы Риф Иҫәновҡа бирелә. Улар барыһы ла әлеге өс ырыу йыйынының башҡа төбәктәр өсөн өлгө булып тороуын билдәләне. Ошо уҡ аҡланда ҡыпсаҡтарҙың "Көнгәккә сығыу", тамъяндарҙың "Сөмбөлә", юрматыларҙың "Бәпес күреү " йолалары башҡарылды. Шулай уҡ ырыуҙар араһында халыҡ уйындары, бәйгеләр ойошторолдо. Ысын мәғәнәһендә халыҡ йыйынына әүерелде был сара һәм уны тамаша ҡылыусылар үҙенсәлекле байрам ойошторғаны өсөн Мәләүез районы һәм ошо райондың ҡоролтай етәкселәре адресына маҡтау һүҙҙәре еткерҙе.**

### Ҡыпсаҡтар

Ҡыпсаҡ төрки донъяһында айырым урын алып тора. Улар ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡырғыҙ һәм бик күп башҡа милләт составында осрай. Хатта бөгөнгө украиндарҙың да 90 проценты ҡыпсаҡ ҡанлы, имеш. Баш ҡалалары ла беҙҙеңсә атала бит - Кейәү, ә үҙҙәрен ҡыпсаҡтар араһындағы иң юғары ҡатлам итеп иҫәпләй "хохол", йәки һауа улы.

Рәсәй дәүләте составына ла ҡыпсаҡтар тәүгеләрҙән булып ҡушыла. Бөгөн Мәләүез районының өстән бер өлөшөн, Күгәрсен районын тулыһынса ошо ырыу ауылдары биләй. Совет власы урынлаштырылып, яңы административ берәмектәр ойошторолғанда башҡорттарҙың ырыу фактты иҫәпкә алынған, күрәһең. Тарихи йылъяҙмаларҙа ғына ҡалған Йомағужа районын ғына алайыҡ. Мәләүез районына ҡушылған өлөшө тик ҡыпсаҡ башҡорттары ауылдарынан ғына тора бит. Тимәк, уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарында ҡыпсаҡтарҙың үҙ-ара бәйләнеше көслө булған әле.

Беҙҙең яҡташ ҡыпсаҡтарҙың иң билдәлеһе, һис һүҙһеҙ, 1773-1975 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең береһе, баш полковник Кинйә Арыҫланов. Милли геройыбыҙҙың атаһы ла заманында күренекле шәхестәрҙән иҫәпләнгән һәм Арыҫлан батыр исемен лайыҡлы йөрөткән.

1812 йылғы Беренсе Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан 1-се һәм 9-сы башҡорт полктары ла нәҡ ҡыпсаҡтар ерендә, күпселеген был ырыу вәкилдәренән формалаша. Үрге Таш ауылы уҙаманы Ихсан Әбүбәкиров күрһәткән батырлығы өсөн 3-сө дәрәжә изге Анна, 4-се дәрәжә изге Владимир ордендарына лайыҡ була. Уның бер туған ҡустыһы Хөсәйен, ауылдаштары Мәҡсүт Мәсәғүтов, Мырҙаш Моратов, шул уҡ 1-се башҡорт полкы яугирҙәре Томансынан Иҫәнгол Ишҡужин, 8-се полктан Кинйәбай Дәүләтбаев, 9-сы башҡорт полкынан Апастан Динмөхәмәт Ишдәүләтовтар икешәр көмөш миҙал менән бүләкләнеүселәр исемлегендә тарихҡа инеп ҡалған.

Икенсе Бөйөк Ватан һуғышында ла ҡыпсаҡтар Һыртландан Садиҡ Һайранов, Һарыштан Минетдин Әминевтар ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған.

Бөгөн дә бошман-ҡыпсаҡ, сәңкем-ҡыпсаҡ вәкилдәре республика, район данын ҙурлай.

### Тамъяндар

Шәжәрәнән күренеүенсә, Тамъян иле бейе Шәғәли Шаҡман үҙ ырыуҙаштары киләсәген хәстәрләп, Бикбау бей һәм Мәшәүле Ҡара Ҡужаҡ бей менән оҙон юл үтеп, Рәсәй дәүләте батшаһы Иван IV Грозныйҙың Ҡаҙан ҡалаһындағы вәкиленә бара. Ул осорҙан һуң дүрт ярым быуат ғүмер уҙҙы, ун өс-ун дүрт быуын алмашынды. Ниндәй хәлвәҡиғалар булып үтте ошо тарих арауығында?

1661-1773 йылдарҙа башҡорттар 89 тапҡыр яуға күтәрелә. Шуларҙың иң ҡатыһы, ауыһыҙы, үҙенең масштабы буйынса тарихи, нәфис әҙәбиәттә ҙур урын алған 1773-1775 йылдарҙа бөтә Башҡортостан биләмәһен яулап алған Крәҫтиәндәр һуғышы. Ил күргәнде тамъяндар ҙа бергә күрә, үҙ араһынан лайыҡлы батырҙарын халҡын яҡларға өндәй. Крәҫтиәндәр һуғышы полковниғы Ҡотоштан Ҡасҡын Һамаров, йәҙ башы Иҫке Мусанан Муса һөйәровтар милләттәштәре, ырыуҙаштары йәҙәнә тап төшөрмәй, башҡорттарға хас ҡыйыулыҡ, саялыҡ күрһәтә. Тамъяндар ырыуы был ҡаһарман улдары менән бөгөн дә хаҡлы рәүештә ғорурлана.

XIX быуат башында француздар Рәсәй сиктәрен баҫып ингәс, тәүгеләрҙән булып көньяҡ башҡорттары яуға йыйына. Улар араһында тамъяндар ҙа лайыҡлы урын биләй. Иҫке Муса ауылы уҙаманы Нигмәтулла Аҡманаев француздарҙы "өнө"нә тиклем ҡыуалап, милләтен данға күмеп ҡайта, ҡаһарманлығы өсөн ике көмөш миҙал менән бүләкләнә.

Тамъяндар ҙа башҡа ырыуҙар менән бер осорҙа ултыраҡ тормошҡа күсә. Район биләмәһендәге бөгөнгө Ҡотош, Бәләкәй һәм Оло Моҡас, Айтуған, Смаҡ, Исламғол, Яңауыл, Яҡтыкүл, Сураҡол, Иҫке Муса, Түләк, Тамъян, Ташлыкүл ауылдарына нигеҙ һала. Нөгөш йылғаһы Агиҙелгә ҡойған ерҙә ике Сәйет ауылы булып, улар күсенгәс, тик береһе генә бөгөн тарихи исемен һаҡлай. Ул әле йөмле Һуҡайлы һыуын һыулаған Федоровка районындағы Сәйет ауылы, икенсеһе - Көйөргәҙе районындағы Мәмбәтҡол ауылы.

### Юрматылар

Тамъян, ҡыпсаҡтарҙан айырмалы, юрматылар бер тирәлә генә урынлашҡан. Бөгөнгө Федоровка, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Ишембай райондары - нәҡ уларҙың биләмәһе. Мәләүез районының төньяғында ла юрматылар көн күрә. Әгәр тәүҙә аталған ике ырыу башҡорттарҙың берләштерелгән беренсе дөйөм дәүләте Ете ырыуға инһә, юрматыларҙың айырым ханлыҡта йәшәүе мәғлүм. Бөгөнгө юрматы иләндә мадьярҙар (венгрҙар) милләт булып формалаша һәм Халыҡтарҙың бөйөк күсенеүе тип аталған осоронда Дунай буйҙарын биләп ала. Башҡорт һәм мадьяр телдәре оҡшаш булмаһа ла, һуңғыларына беҙҙеңсә һөйләшергә өйрәнеү әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Шуғалыр ҙа сит илдәргә башҡорт теле белгестәрен нәҡ Венгрияның Сегед университетында әҙерләнеләр. Башҡорт республикаһына нигеҙ һалыусы, юрматыларҙың ғына түгел, ә бөтә башҡорт халҡының бөйөк улы Әхмәт-Зәки Вәлидиҙең 100 йыллыҡ юбилейын билдәләгәндә мадьяр дуҫтарыбыҙҙан ике вәкил килде. Профессорҙар Йозеф Тормала, Ҡуныр Мандоки ҙа саф башҡортса сығыш яһаны. Ике ғалим да үҙҙәренең юрматы (дарьмят) ырыуынан икәнен еткергәс, Вәлиди ҙә беҙҙең ҡан-ҡәрҙәш, тип белдерҙе.

Юрматылар бөгөн Иван IV Грозныйға барған бейҙәре Тәтегәстең исемен мәңгеләштереү маҡсатында Күндерәк йылғаһы буйындағы тау башында күмелгән ырыу башлығы ҡәберенә стела ҡуйыу менән мәшғүл. Эштәре уң булһын! 1812-1814 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы геройы, юрматы егете, башҡорт атлы полкы командиры, бөйөк полководец Кутузовтың "Ҡыйыулығың өсөн нәмә кәрәк?" тигән һорауына "Башҡорттарға азатлыҡ бирегеҙ!" тип яуап биргәне өсөн Муром ҡалаһында ағыу эсереп үлтерелгән Ҡаһым Мырҙашев (Ҡаһым түрә) менән бер полкта Дәүләтҡол, Йомаҡ, Йомаҡай, Нурдәүләт, Һабаш, Юлдаш, Ҡамбулат ауылдарынан сыҡҡан яугирҙәр ҙа үҙҙәрен данға күмеп ҡайта. Йомаҡай уҙаманы, ике көмөш миҙал кавалеры Баллыбай Мәсәләмов һуғыштан һуң да әүҙем тормош юлы үтә.

Юрматы ерендә урынлашҡан райондан сыҡҡан әллә күпме шәхестәрҙе һанап үтергә мөмкин. Был юлы республикала беренсе булып ырыу йыйынын ойошторған Булат Рафиҡовты ғына телгә алып үтәм. Уның был башланғысынан һуң һәр ырыу үҙ ҡорон йыйҙы. Баш ҡалабыҙ Өфөгә йыйылған ырыуҙар вәкилдәре яҡташыбыҙ, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, күренекле әҙип һәм дәүләт эшмәкәре Булат Рафиҡовты бөтә башҡорт ырыуҙарының баш бейе итеп һайланы. Юрматылар элек-электән яугир ҙа, дәүләтселек эшендә лә маһир булған заттар.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**



*✓ Волга буйы һәм Урал халыҡтары араһында башҡорттар үҙҙәренең фольклорының бай булыуы менән генә түгел, ә унда бик боронғо ҡатламдар ҡатнашыуы менән айырылып тора.*



# КҮГӘРЕП ТӘ ЯТҠАН башҡортомдоң тарихы

**Ер йөҙөндә көн иткән һәр халыҡтың үҙ тарихы бар. Бөтә донъя тарихын да иң боронғо дәүерҙәрҙән башлап хәҙерге заманғаса йәшәгән халыҡтар тарихы тип атап була. Башҡорт халҡының да бик тәрәнгә, ваҡыт төпкөлдәренәсә барып еткән тарихи тамырҙары бар. Ошо өлкәлә ғалимдар тарафынан иҫәпһеҙ мәҡәләләр, том-том айырым китаптар яҙылһа ла, быға тиклем башҡорт тарихының ысынбарлыҡта булған ҡатмарлы асылын һәм үҫеш этаптарын бар тулылығында сағылдырған комплекслы академик баҫма юҡ ине. Ниһайәт, БР Хөкүмәте ҡарары нигеҙендә күп томлы "Башҡорт халҡының тарихы"н әҙерләү һәм нәшер итеү буйынса башланған эштең тәүге һөҙөмтәһе булып, был баҫманың 1-се томының сигнал экземпляры донъя күрҙе. Был академик хеҙмәт РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙерләнде. Уның ғилми етәксеһе - билдәле тарихсы Марат Ҡолшәрипов, редакция коллегияһына Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың күренекле тарихсылары ингән. Академик баҫманың 1-се томында башҡорт халҡы формалашҡан Көньяҡ Урал тарихының иң боронғо дәүерҙәре сағылдырыла, ул тарих фәндәре кандидаттары Владимир Овсянников, Виталий Федоров һәм филология фәндәре докторы Фирҙәүес Хисамитдинова мөхәррирлегендә әҙерләнгән. Тарихи Башҡортостандың иң боронғо осорҙары хаҡында "Киске Өфө" гәзите редакцияһында уҙғарылған әңгәмәлә тарих фәндәре докторы, профессор Марат ҠОЛШӘРИПОВ, РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғилми хеҙмәткәрҙәре, тарих фәндәре кандидаты Вячеслав КОТОВ һәм филология фәндәре докторы Фәнүзә НӘҘЕРШИНА ҡатнашты.**




**▸ Ватан историографияһында Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тарихын өйрәнеү торошон нисек баһалар инегеҙ?**



**М. ҠОЛШӘРИПОВ:** Әйтергә кәрәк, тарихи Башҡортостан һәм башҡорттар менән бәйле ғилми хеҙмәттәр Октябргә тиклемге осорҙа ла байтаҡ була. Мәҫәлән, 1899 йылда Санкт-Петербургта Д. П. Никольскийҙың "Башкиры: этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" исеме аҫтында төплө хеҙмәте донъя күрә. В. И. Филоненконың 1915 йылда нәшер ителгән "Башкиры" исемле хеҙмәтендә Башҡортостанда батша властары тарафынан алып барылған ер сәйәсәте, башҡорт ихтилалдары хаҡында ҡайһы бер мәғлүмәттәр урын алған. Х. Атласиҙың "История башкир", М. Өмөтбаевтың "Йәдкәр", Ғ. Ғүмәриҙең "Вымирают ли башкиры?" кеүек әҫәрҙәрендә башҡорт тарихы бер ни тиклем сағылыш тапҡан. Әхмәтзәки Вәлиди Туған Истанбул университетында алып барған "Колонизаторҙар тарихы" курсы сиктәрендә беренселәрҙән булып башҡорт халҡы тарихын эҙмә-эҙлекле рәүештә һүрәтләй алған.

Совет осоронда ла башҡорттарҙың боронғо, урта быуаттар һәм хәҙерге тарихы мәсьәләләре буйынса бик күп айырым мәҡәләләр, монографиялар, ғилми йыйынтыҡтар донъя күрә. Этнология өлкәһендә С. И. Руденконың 1955 йылда нәшер ителгән "Башкиры. Историко-этнографические очерки" хеҙмәте үҙенең әһәмиәтен бөгөн дә юғалтмаған. Уҙған быуаттың 50-се йылдарында донъя күргән "Материалы по истории Башкирской АССР" йыйынтығы башҡорт халҡы тарихын өйрәнеү өлкәһендә яңы аҙым булды, ғалимдарыбыҙ иғтибарын ҡыҙыҡлы тарихи сығанаҡтарға йүнәлтте.

Ошондай мөһим тарихи хеҙмәттәрҙән Р. Г. Кузеевтың "Происхождение башкирского народа", Б. Х. Юлдашбаевтың "История формирования башкирской нации", Н. А. Мәжитов һәм Ә. Н. Солтанованың "История Башкортостана с древнейших времен до XVI века" тигән китаптарын күрһәтергә була. Әлбиттә, был осорҙа өҫтөнлөк иткән ҡараштарҙың барыһы менән дә килешеп булмай, теге йәки был проблема буйынса тикшеренеүселәрҙең хаҡ булыу-булмауы, уларҙың субъектив позицияһынан бигерәк, идеологик ҡалыптар менән дә бәйле булыуын оноторға ярамай. Мәҫәлән, Көньяҡ Уралдың һуң төркиләшеүе тарихи ысынбарлыҡҡа тура килмәй. Башҡортостан тарихы буйынса төрлө яҡлы һәм бик әүҙем ғилми тикшеренеүҙәр алып барылһа ла, күп йылдар дауамында тупланған мәғлүмәттәрҙе дөйөмләштереп, системалылыҡ һәм эҙмә-эҙлеклелек, тарихилыҡ һәм объективлыҡ принциптарына нигеҙләнгән ҙур күләмле академик хеҙмәт әлегә тиклем булманы. Ошондай ғилми баҫманы әҙерләү өсөн составына Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың билдәле ғалимдары ингән махсус ғилми төркөм булдырылды ла инде.

**▸ Башҡорт халҡының күп томлы тарихын әҙерләү һәм нәшер итеү идеяһы нисек барлыҡҡа килде?**

**М. ҠОЛШӘРИПОВ:** Был идеяның барлыҡҡа килеүе уҙған быуат аҙағында башланған яңы башҡорт хәрәкәте менән бәйле. XX быуат башында башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре милләтебеҙ өсөн хәл иткес булған мәсьәләләрҙе үҙҙәре ойошторған съездар ҡарамағына сығарған кеүек үк (быны тарихи традиция тип атау дөрөҫ), шул ваҡытта ҡайтанан ойошторолған йыйындарҙың берәһендә, башҡа мөһим тәҡдимдәр менән бер рәттән, башҡорт халҡының тулы тарихын яҙыу мәсьәләһе лә күтәрелгәйне. Әммә көсөргәнешле 90-сы йылдарҙа был мәсьәләне хәл итеү мөмкинлеге булманы, һәм ул бер ни тиклем ваҡыт онотолоп торҙо. Яңы быуат башында ошо идея яңынан ҡуҙғатылды, һәм, әйтергә кәрәк, был турала иң тәүгеләрҙән булып хөрмәтле академигыбыҙ Нияз Мәжитов сығыш яһаны. Беҙ, Башҡортостан тарихсылары, уның тәҡдимен хуплап, республика етәкселегенә мөрәжәғәт иттек. Президентыбыҙ М.Ғ. Рәхимов, республика фәне һәм халыҡ рухиәте өсөн үтә әһәмиәтле булған ошо идеяны ғәмәлгә ашырыуҙы бик ваҡытлы һәм урынлы тип танып, тейешле ҡарар ҡабул итте, ә Хөкүмәтебеҙ баҫманы әҙерләү планын төҙөп, эштәрҙе финанслау мәсьәләһен хәл итте. Республикабыҙ, халҡыбыҙ өсөн бик мөһим булған ошо ҙур эш беҙгә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтте.

Беҙ әҙерлек эштәренә 2005 йылда уҡ тотонғайныҡ инде, тәүҙә ошо академик хеҙмәттең дөйөм концепцияһы, шулай уҡ һәр томдың үҙ концепцияһы эшләнде. Буласаҡ академик хеҙмәт өҫтөндә аныҡ эштәр 2008 йылда ғына башланды: ижади коллективҡа ғалимдар йәлеп ителде, һәр томдың етәксеһе билдәләнде, эш пландары төҙөлдө. Тәүге томды бер йыл эсендә, 2009 йылдың октябренә тиклем әҙерләп бөтөргә ҡарар ителде. Әйтергә кәрәк, үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты атҡарыу өсөн археолог ғалимдарыбыҙ ал-ял белмәй эшләне, мәҫәлән, таш быуат осоро өр-яңынан яҙылды, тиһәк тә артыҡ булмаҫ.

Беҙ һүҙ алып барған күп томлы тарихтың 1-се томында тарихи Башҡортостан территорияһында таш, бронза, иртә тимер быуаттарында барлыҡҡа килгән боронғо мәҙәниәттәрҙән Көньяҡ Уралға һундар үтеп ингәнгә тиклем бик оҙайлы ваҡыттар һүрәтләнә, башҡорт халҡының этногенезын асыҡлаусы антропологик тикшеренеүҙәр ҙә сағылдырылған. Шул уҡ ваҡытта 1-се томда лингвистик, мифологик һәм фольклор материалдарының урын алыуы бик оригиналь булып тойола. Боронғо тарих, мифология һәм фольклор араһындағы бәйләнеште нисек баһаларға була?



**Ф. НӘҘЕРШИНА:** Һәр халыҡтың матди мәҙәниәтенән башҡа рухи мәҙәниәте лә бар, һәм уны бик фәһемле, киң һәм бай тарихи сығанаҡ сифатында ҡарап була. Башҡорт халҡы тарихының 1-се томы бына ошондай материалдары булыуы менән үҙенсәлекле, тип әйтергә була. Халҡыбыҙҙың бик бай, күп төрлө фольклор мираҫы бар, уны башҡа тарихи сығанаҡтар менән сағыштырмаса өйрәнеп, байтаҡ ҡына һорауҙарға яуап табырға була. Рухи мәҙәниәттең дә үҙ тарихы бар бит, һәм уны халыҡтың дөйөм тарихын яҙғанда ҡулланыу бик урынлы.

**М. ҠОЛШӘРИОВ:** Халыҡ тормошоноң күп яҡлы икәнен оноторға ярамай: уның ижтимағи, иҡтисади, сәйәси, матди һәм рухи компоненттарының бер бөтөнлөктө тәшкил итеп, тарихта билдәле бер сағылыш табыуын иҫтә тотоу фарыз. Беҙҙең алдыбыҙға башҡорт халҡының академик, фундаменталь тарихын яҙыу бурысы ҡуйылды, һәм бындай фәнни эш халыҡтың матди, мәҙәни һәм рухи тарихын төплө сағылдыра алыуҙы талап итә. Шуға күрә беҙ төрлө фән йүнәлештәре араһындағы бәйләнеште күҙ уңында тоттоҡ та инде. Әммә күп томлы хеҙмәтебеҙҙең 1-се томының үҙәгендә археологтарыбыҙҙың тикшеренеүҙәре урын алған: таш быуат дәүеренән алып Халыҡтарҙың бөйөк күсеше осорона тиклем (б.э. IV быуаты) бик ҙур ваҡыт арауығы дауамында тарихи Башҡортостан территорияһында барлыҡҡа килгән мәҙәниәттәрҙең күсәгилешлеге хаҡындағы концептуаль ҡараш раҫлана ошо академик хеҙмәттә.

Ошо өр-яңы ғилми хеҙмәттең тәүге биттәрен асыу менән, "Тарихи Башҡортостан" тигән төшөнсә иғтибарҙы йәлеп итә. Минеңсә, тап ошо ғилми термин менән бәйле фәнни ҡараш башҡорт халҡы тарихының боронғо тамырҙарын объектив рәүештә, тарихи ысынбарлыҡҡа хилафлыҡ килтермәйенсә асыҡларға ярҙам итә.

**В. КОТОВ:** Һүҙҙе беҙҙең өсөн концептуаль булған мәсьәләнән - Көньяҡ Урал территорияһында йәшәгән халыҡтарҙың ҡасан төркиләшеүенән башларға кәрәк. Көньяҡ Уралға төркиҙәр ҡасан килгән, йәғни төркиләшеү һуң башланғанмы, иртәрәкме, әллә фәндә Урал-Алтай берлеге халыҡтары тип йөрөтөлгән ҡәүемдәр бында палеолит (иртә таш быуат) дәүеренән бирле йәшәгәнме - бындай һорауҙар тик матди мәҙәниәт ҡалдыҡтарын барлап, сүлмәк ярсыҡтарын һанап ҡына ултырмаған һәр тикшеренеүсене ҡыҙыҡһындыра. Бындай һорауҙарға яуапты бары археология күҙлегенән ҡарап ҡына табып булмай, шуның өсөн дә был осраҡта иғтибар рухи мәҙәниәткә йүнәлтелергә тейеш. Волга буйы һәм Урал халыҡтары араһында башҡорттар үҙҙәренең фольклорының бай булыуы менән генә түгел, ә унда бик боронғо ҡатламдар ҡатнашыуы менән айырылып тора. Евразияла әкиәттәренән башҡа боронғо эпосы ла булған халыҡтар аҙ. Мәҫәлән, славян халыҡтарында эпостар һуңғараҡ, дәүләтселек формалаша башлаған осорҙа барлыҡҡа килә. Башҡорт эпостарында архаик ҡатламдар сағылыш тапҡан, һәм уларҙы мифологик әҫәрҙәр иҫәбенә индереп була. Башҡорт эпостары берҙәм мифологик нигеҙҙә барлыҡҡа килеп, тотош бер циклды барлыҡҡа килтерә: "Урал батыр - Аҡбуҙат - Заятүләк менән Һыуһылыу - Ҡуңыр буға". Иң мөһиме, улар бер этник ерлектә тыуҙырылып, урындағы топонимик атамалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, бо-

# УРАЛ ТАУЫНДА...

## баш алған

ронғо инаныстар менән тығыҙ бәйлелекте күрһәтеп тора. Һыу аҫты донъяһынан, күлдән сыҡҡан шул уҡ ҡанатлы ат - Аҡбуҙат образының тап Көньяҡ Уралдың географик объекттары менән бәйле булыуы эпостар циклының ошо ерлектә яралғанына дәлил. Ошо мөхиттә башҡа халыҡтарҙа булмаған был боронғо мифтар башҡорт фольклорының үҙаллы күренеш булыуын раҫлап тора ла инде. Беҙҙә этнография, археология һәм фольклор мәғлүмәттәрен берләштереүсе, уларҙың тарихи ысынбарлыҡтағы бәйләнешенең төп күрһәткесе итеп ҡарарлыҡ тәбиғи объект - Шүлгәнташ мәмерйәһе бар. "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостарында Шүлгән күле, ер-һыу аҫты донъяһы, ошонан сыҡҡан малдар, батырҙың ошонда үҙенә кәләш табыуы, уларҙан башҡорт халҡының ата-бабалары булған нәҫелдең үрсепишәйеп китеүе тураһында мифологик картиналар һүрәтләнә. Космогоник мифтар рәтендә торған "Урал батыр" эпосы ошондай мифологик ҡараштарҙың боронғо таш быуат дәүерендә үк яралғанлығына ишара. Ә бына бронза дәүерендә ерҙе, йылға-күлдәрҙе барлыҡҡа килтергән ата-бабаларының изге эштәрен дауам итеүсе батырҙар тураһында героик эпостар тыуа.

**М. ҠОЛШӘРИПОВ:** 1-се том тарихи Башҡортостандың ошо боронғо таш дәүерен һүрәтләүҙән башлана. Көньяҡ Урал, Башҡортостан үҙенең бөтә донъяға билдәле булған палеолит осоро ҡомартҡылары менән ғорурлана ала. Шүлгәнташтағы палеолит осоро дәүеренә ҡараған таш һүрәттәр донъяла бик һирәк осрай торған ҡомартҡы һанала. Европала бындай һүрәттәр Франция һәм Испанияла ғына табылған. Ә беҙҙә тағы ла Игнатьев, йәки Ямаҙыташ мәмерйәһендә, шулай уҡ Иҫке Мораҙым мәмерйәһендә лә ошондай уҡ таш быуат кешеләре ҡалдырған һүрәттәр бар. Ғөмүмән, Башҡортостанда таш быуат дәүеренә ҡараған башҡа археологик ҡомартҡылар ҙа байтаҡ табылған.

**Ф. НӘҘЕРШИНА:** Теге йәки был халыҡтың боронғолоғо тураһында һүҙ йөрөткәндә, фольклор материалдарын да ҡулланыу фарыз. Фольклор - үҙенсәлекле өлкә, һәм ул халыҡ тормошоноң даими йәшәп килеүсе күренеше булып тора. Беҙҙең фольклор ҡомартҡыларыбыҙ үҙҙәре сығарылған замандарҙа ниндәйерәк булғандыр, әйтеүе ҡыйын, әммә эпостарҙа сағылған боронғо мотивтарҙы иҫәпкә алырға кәрәк. Унан һуң, матди мәҙәниәт объекттарының ваҡыт үтеү менән емерелеп, юҡҡа сығыуы ла мөмкин, ә фольклор әҫәрҙәре, өҫтәлә һәм тулыландырыла барып, иң боронғо замандарҙан хәҙерге осорға тиклем килеп етә ала. Фольклорҙың таралыу ареалы аша башҡорт халҡының географик йәшәү мөхитен күҙалларға була. Мәҫәлән, беҙҙең эпостарыбыҙҙағы күп географик объекттар Көньяҡ Урал ерлеге менән бермә-бер бәйле: Урал батырҙың улдары исеме менән Иҙел, Һаҡмар, Нөгөш йылғалары, "Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙағы Асылыкүл һәм башҡа бик күп географик атамалар эпостарыбыҙҙа башҡорт халҡының бик боронғо замандарҙан бирле йәшәгән ерҙәрен туранан-тура күрһәтеп тора. Эпос-мифтарыбыҙҙың мотивтары ла бик боронғо, һәм улар бер мәғәнәүи бөтөнлөктө хасил итә. Кендек ҡаны тамған, тыуып-үҫкән ғәзиз ер-һыу тойғоһо, Урал тәбиғәтенең мәңгелек гүзәллеге, уны яман көстәрҙән ҡурсалау, изгелек менән яуызлыҡ араһында барған аяуһыҙ көрәш - быларҙың барыһын да башҡорт халҡының тәү Ватанының Уралда булыуына асыҡтан-асыҡ ишара итеп ҡабул итергә кәрәк. Эпик ҡомартҡыларыбыҙҙың этник мәғәнәүи нигеҙе һәм асылы кире ҡаҡҡыһыҙ, һәм башҡорттарҙың хәҙер билгән ерҙәренә ҡайҙандыр күсеп килеүе тураһындағы уйҙырмаларҙан күптән ваз кисеү бик урынлы булыр ине. Урал менән бәйле космогоник мифтарҙың ошо боронғо территорияла барлыҡҡа килеүен бер кем дә инҡар итә алмаясаҡ.

**М. ҠОЛШӘРИПОВ:** Боронғо дәүерҙәрҙән хәҙергә тиклем дауам иткән күсәгилешлек рухи өлкәлә генә түгел, матди мәҙәниәт өлкәһендә лә күҙәтелә. Бына, мәҫәлән, иртә тимер быуатына ҡараған ҡатын-ҡыҙҙар кейемен алып ҡарайыҡ: ул башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кейеменән бер нисек тә айырылмай, тиерлек.

**Ф. НӘҘЕРШИНА:** Беҙҙең тулыһынса һаҡланмаған тағы бер эпосыбыҙ бар, ул "Уҙаҡ һәм Туҙаҡ - бала бәшнәк ярсығы" тип атала. Унда бәшнәк-печенегтар дәүеренән дә боронғораҡ ҡатламдарҙы табып була: ерҙең космик есем булып, кешенең дә йыһан менән бәйле йән эйәһе булыуы тураһындағы ҡараштар ҙа сағыла был эпоста. Ошо үтә боронғо фольклор ҡатламдары аша халҡыбыҙҙың этник сығышын да күҙалларға була.

**В. КОТОВ:** Академик Толстой әйткәнсә, матди мәҙәниәттең юҡҡа сығыуы, халыҡтарҙың телдәренең үҙгәреүе, хатта алышыныуы мөмкин, әммә боронғо дәүерҙәрҙә үк яралған донъяға ҡараш һаҡланып ҡалыусан. Боронғо космогоник идеялар кеше йәшәгән ландшафт менән бәйле. Этностың рухи ҡиммәттәре уның билдәле бер территорияны үҙләштереүе барышында ярала, халыҡтың инаныстары, ғөрөф-ғәҙәттәре - тыуған төйәкте рухилаштырыу һөҙөмтәһе. Башҡорттарҙа ер-һыу, йылға-тау культы, мәмерйәләрҙең аҫҡы донъя менән бәйләнеш урыны булыуы, ҡанатлы ат, Һомай һәм башҡа изгеләштерелгән заттар - былар барыһы ла боронғо мифик ҡараштарҙың хәҙерге заманға тиклем һаҡланып ҡалып, ошо ерлектә меңәр йылдар дауамында рухи күсәгилешлекте тәьмин итә. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәр башҡорт эпостарындағы сюжеттар менән тап килә. Шул уҡ ат кешене (батырҙы) ҡурсалаусы булараҡ изгеләштерелә, ә гигант мамонттарҙы һуңғараҡ барлыҡҡа килгән аждаһа образы менән тиңләргә була. "Урал батыр"ҙағы ике изге ҡош - Һомайғош менән өйрәк-Айһылыу боронғо төркиҙәрҙең донъяны барлыҡҡа килтергән мифик өйрәктәре менән тап килә. Бында шулай уҡ уларҙың Ай һәм Ҡояш сығышлы булыуы боронғо космогоник ҡараштарға тап килә.

**М. ҠОЛШӘРИПОВ:** Әңгәмәбеҙҙә мифология, фольклор темаһы өҫтөнлөк алып бара. Уҡыусыларҙа яңылыш фекер тыумаһын: 1-се том нигеҙҙә археологик материалдар тупланмаһын тәшкил итә, ул тарихи Башҡортостандың иң боронғо дәүерҙәрен бик асыҡ күҙаллау мөмкинлеген бирә.



**В. КОТОВ:** Мифологияны Көньяҡ Уралда мәҙәниәттәр күсәгилешлегенең ысынбарлыҡҡа тап килеүен раҫлаусы өҫтәмә дәлил итеп ҡарау фарыз. Бындай күсәгилешлекте беҙ үрге палеолит дәүеренән, йәғни б.э. тиклем 14 мең йылдан бронза быуатына тиклем асыҡ күрәбеҙ. Бынан һуңғы осорҙа картина ҡатмарлаша, төрлө ҡәүемдәрҙең ҡушылыуы, күсеп китеүе, бер-береһенә йоғонтоһо арта бара. Ғөмүмән, Көньяҡ Урал территорияһының уникаль ландшафтлы булыуы көнсығыш һәм көнбайыш, көньяҡ һәм төньяҡ халыҡтары мәҙәниәттәрен тоташтырып, бәйләп тороусы зонаға әйләндерә. Ошо бай тәбиғәтле ерҙәр күп халыҡтар өсөн ылыҡтырғыс була. Бында йәшәгән ҡәүемдәр араһында рухи күсәгилешлек һаҡланыуы табыныу урындарының оҡшашлығында ла тойола.

**▸ Шүлгәнташтан башҡа, тағы ла ниндәй боронғо сакраль үҙәктәр булыуы билдәле?**

**В. КОТОВ:** Ямаҙыташ мәмерйәһендә лә мамонт, ат, йылан һүрәттәре, төрлө билдәләр бар. Бында шулай уҡ таш быуат дәүеренең табыныу урыны булған. Иң үҙенсәлекле һүрәттәрҙең береһе - ҡош ҡойроҡло кеше һыны, һәм шундай уҡ һүрәт Мораҙым мәмерйәһендә лә бар. Шулай уҡ мәмерйәлә мөгөҙморон, мәмерйә айыуы һөйәктәренән, таштарҙан яһалған ҡоралдар табылыуы бында ла, Шүлгәнташтағы кеүек, үрге палеолит осорона ҡараған табыныу урыны булыуын аңлата. Көньяҡ Уралды палеолит дәүеренең төп үҙәге тип атарға була. Унан һуңғараҡ осорҙарҙа был ерҙәрҙе төрлө цивилизациялар осрашҡан юл саты сифатында ла һүрәтләү дөрөҫ булыр ине. Боҙлоҡтар иреүҙән ҡалҡҡан туфан һыуҙары кипкәндән һуң бында тереклек һәм кешеләр өсөн бик уңайлы шарттар барлыҡҡа килеүе раҫ.

**М. ҠОЛШӘРИПОВ:** Бына беҙ Торатау шиханы тип атап йөрөткән геологик ҡомартҡы ҡасандыр ерҙе ҡаплаған океандағы коралл атолы булған, һәм ул шулай уҡ башҡорттарҙың изге урындарынан һанала.

**В. КОТОВ:** Эйе, ғилми тикшеренеүҙәр Торатауҙың иртә тимер быуатынан урта быуаттарға тиклем шулай уҡ урындағы халыҡтың уникаль табыныу үҙәге булыуын раҫлай, һәм был халыҡ хәтерендә хәҙергә тиклем һаҡланып килә.

**Ф. НӘҘЕРШИНА:** Яңыраҡ миңә килгән хаттарҙың береһендә балаһы сирле бер ҡатындың уны һауыҡтырыу ниәтендә йәй буйына Шүлгәнташ эргәһендә йәшәүе, был ҡатындың томанлы бер иртәлә аҡбуҙ төҫлө ат күреүе, һәм шул уҡ көндө фалиж сиренән интеккән баланың аяҡҡа баҫыуы тураһында яҙылғайны. Күрәһегеҙ, боронғо инаныуҙар бөгөн дә үҙ көсөнә эйә.

**▸ Изге Торатау кеүек боронғо географик һәм тарихи объектты тәбиғи ресурс сифатында файҙаланырға теләүселәр ҙә юҡ түгел...**

**В. КОТОВ:** Был енәйәткә тиң ғәмәл булыр ине. Боронғолар ҡарашына ярашлы, изге урынды дошман ҡулына ҡалдырыу халыҡтың юҡҡа сығыуына тиңләнгән, шуға күрә бындай табыныу урындары йән аямай һаҡланған, һәм ошо туралағы мәғлүмәт хәҙерге замандарға тиклем килеп еткән.

**М. ҠОЛШӘРИПОВ:** Палеолит осоронда йәшәгән ҡәүемдәрҙе этник яҡтан идентификациялап булмай, бында боронғо мәҙәниәттәрҙең күсәгилешлеген генә билдәләп була. Ә бронза һәм иртә тимер быуаттары дәүерендә йәшәгән ҡәүемдәрҙең башҡорт халҡы этногенезына туранан-тура ҡағылышлы булыуы хаҡындағы фекерҙе ғалимдарыбыҙ элегерәк тә әйтә килде. Ошо ерлектә фин-уғыр, иран һәм төрки телле ҡәбиләләрҙең башҡорт этносының формалашыуында ҡатнашыуын инҡар итеп булмай.

**В. КОТОВ:** Тарихи Башҡортостанды бронза һәм иртә тимер быуаттарына ҡараған археологик ҡомартҡылар иле, тип әйтергә лә булыр ине. Һынташты, Алакүл, Бура, Межов, Маклашеев, савромат, сармат, Ананьин һәм Ҡара абыҙ мәҙәниәттәре, Мәсәғүт урман-дала халҡы, Көньяҡ Уралдағы һундар дәүере буйынса 1-се томда бай мәғлүмәттәр бирелгән. Антрополог Р.М. Йосоповтың башҡорт халҡының расо-һәм этногенезының тәү этаптары, лингвистар А.В. Дыбо һәм Ф.Ғ. Хисамитдинованың башҡорт теленең формалашыуының иң боронғо осоро хаҡындағы тикшеренеүҙәренең ошо томда урын алыуы ла маҡсатҡа ярашлы.

Көньяҡ Уралда таш быуат замандарынан төпләнеп йәшәүселәрҙең нәҫелдәре лә бер ҡайҙа ла юҡҡа сыҡмаған, шулай уҡ сит тарафтарҙан килгәндәр ҙә барыбер ерле халыҡтың мифик-мәҙәни мираҫын ҡабул иткән, сөнки ул ошо осорҙарҙың өҫтөнлөклө һәм ҡеүәтле рухи көсөн тәшкил итә алған. Ошондай рухи мираҫты зороастризм, христиан һәм Ислам диндәре идеялары ғына алыштыра ала, әммә улар бында беҙгә яҡыныраҡ осорҙарҙа үтеп ингән. Унан һуң, Көньяҡ Урал үҙе гигант тәбиғи ҡәлғә булғанлыҡтан, бында күп быуаттар дауамында билдәле бер ҡәүемдәрҙең, үҙ булмышын һәм рухи мираҫын һаҡлап ҡалып, бер тарихи дәүерҙән икенсеһенә ҡаршылыҡһыҙ күсә алыуы мөмкин булған. Ғөмүмән, ошо академик хеҙмәтебеҙҙә тарихи Башҡортостан ерлегендә б.э. тиклем 14-15 мең йылдарҙан хәҙерге осорға тиклем бер өҙлөкһөҙ барған рухи-мәҙәни күсәгилешлектең хәҡиҡәткә тап килеүен иҫбат итә алдыҡ, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хөрмәтле ғалимдарыбыҙ белдереүенсә, "Башҡорт халҡының тарихы" тип аталған күп томлы академик хеҙмәттең тәүге томы донъяға сығып килә. Был ғилми хеҙмәттә беҙҙең замандарҙан үтә лә алыҫ дәүерҙәр тарихы сағылыш тапҡан. Әлбиттә, ошо китаптағы мәғлүмәттәрҙе, һығымталарҙы барса ғалимдар ҙа берҙәй ҡабул итмәүе лә мөмкин. Фән бәхәсһеҙ, фекер алышыуһыҙ булмай, шулай ҙа халҡыбыҙҙың тулыраҡ тарихын тергеҙеүҙә ошо беренсе аҙымдың яһалыуы үҙе үк ҡыуаныслы. Ошо ваҡиғаға ваҡыт үҙе тейешле баһа бирер, тип өмөтләнәйек.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Ҡатынының бер ни булмағандай йөрөүен, тыныс йөҙөн күреп, Мирғәле аптырап ҡалды. Ул асыу-ярһыу, күҙ йәштәре, туҙыныу көткәйне. Быларҙың береһе лә булманы.**






Һуңғы ваҡытта һаулыҡҡа йәлсемәгән Нурбикәгә йыраҡ медосмотр ваҡытында тағы бер ҡурҡыныс хәбәр әйттеләр:" Балаятҡылығында шеш бар. Яман шешкә әүерелмәҫ элек тиҙ арала операция талап ителә". Врач- гинекологтың ҡарары ҡәтғи ине.

Ҡаҡшаны инде һәр төрлө сирҙәрҙән Нурбикә. Рәт ауырыуҙары булһынмы, киҙеү- фәлән йөрөһөнмө, уға иң беренсе ҡағыла. Йылдың- йылы грипптән яфа сигә. Утыҙҙан уҙғайны, операция артынан операция китте. Башта һуҡыр эсәккә яһатты. Унан һауығып, ике йыл да үтмәне, үт ҡыуығын алдыртты. Ни эшләһен, яҙмышын Хоҙай Тәғәләгә тапшырып, был юлы ла хирург бысағы аҫтына ятырға күнде Нурбикә.

Тамам йонсоған, хәл өҫтөндә яткан ҡатын операциянан һуң өс көн реанимация палатаһында булды. Килеүселәрҙе эргәһенә индермәнеләр. Нурбикәлә йәшәү теләге һәр ваҡыт көслө булды. Әле лә врачтар ярҙамы менән ауырыу- һыҙлауға бирешмәй, тырышып- тырмашып тороп, аяҡҡа баҫты. Хирургия палатаһына күсерелгәс, яҡындарына килергә рөхсәт бирҙеләр. Иң башта ҡыҙҙары килде. Лилиә менән Зилә әсәләренең һурылып һарғайған йөҙөн, ҡуранысланып киткән күҙәрен күреп, илап ебәрҙе. Етмәһә, анды-тондо белмәгән кесе ҡыҙы Зилә туп-тура хәбәр һалды:

- Атайым хәл белергә килдеме? Һин балнисҡа ятҡаны бирле йүнләп өйгә ҡайтканы ла юҡ унының...

"Тимәк, һөйәркәһе эргәһендә", - тигән уй йүгерҙе Нурбикәнең башынан. Ул ҡара янды. Ир бирмәк- йән бирмәк. Инде ни ҡылырға? Асыу- ярһыу менән: "Ирҙәргә беҙ һау саҡта ғына кәрәкбеҙ шул. Минең кеүек ауырыу ҡатын уға нимәгә", - тине лә, тамам кәйефһеҙләнеп, һөйләшмәҫ булды. Ҡыҙҙары, нинә әйттек, тигән көнгә төшөп, күңелһеҙләнеп, ҡайтып киттеләр.

Былай ҙа йөрәге ниҙер һиҙенеп, болоҡһоп торған ҡатын тамам күңел төшөнкөлөгөнә бирелде. Илап та алды. Йәшәү менән үлем араһында йәне. Бөгөн дә температураһы юғары. Врач был ҡан составын күрә. Ҡан ебәрергә кәрәк, ти. Яҡындарығыҙҙан бер-нисә кеше ҡан бирһен, ти. Ә ире килеп хәл дә белмәй. Бынан ары ул хыянатсы менән нисек йәшәр?

Ни ҡылырға белмәй, аҙарынып торғанда, ҡыҙҙары әйбер төрөп килтергән гәзит күҙенә ташланды. Алып ҡарай башланы. "Бөтәһе лә - үҙеңдән". Ҡыҙыҡ... Кем яҙа был мәҡәләне? Автор был һүҙҙәр менән ни әйтергә теләгән? Ул ҡулындағы гәзит киҫәген ҡыҙыҡһынып, иғтибар менән уҡып сыҡты.

"Һаулыҡ та, бәхет тә, уныш та кешенең үҙенән тора,"- тигән халыҡ табибы. Нурбикәгә был ҡыҙыҡ тойолдо. Ул мәҡәләне тағы бер ҡат ентекләп уҡып сыҡты. Тағы уйланды. Уҡыған һайын, уйланған һайын, халыҡ табибының хаҡлығына инаныс артты. Яраларының һыҙлауына, башы ярылып ауыртыуына, хәлһеҙлегенә тәҡәт итмәгән ҡатын: "Был юлы мин йә үләм, йә үҙемде нык ҡына итеп ҡулға алып, яныса йәшәп китәм",- тип уйланы. Һаулығының ҡаҡшауына, ысынлап та, ул үҙе лә ғәйепле. Ҡәҙерен белдеме, һаҡланымы ул һаулығын. Ҡасан үҙ-үҙенә иғтибар биреп, үҙен яратып йәшәгәне бар? Йә, ҡасан башҡалар кеүек санаторийҙарҙа ял итә? Ҡасан гәзиттәге теге имсе өйрәткәнсә, тәбиғәткә сығып, саф һауала иркенләп йөрөнө? Ҡасан үҙенә килешле матур кейем алып кейҙе? Үҙ гүмерендә, исмаһам, бер парикмахерскийға барып, сәсен төҙәттерҙеме, матурлыҡ салонына инеп, битен-ҡашын рәтләттеме? Донъя йөмен белмәй- күрмәй, эштән баш ҡалҡытмай, һуҡырҙарса орҙо- бөрҙө йәшәне бит ул. Кешенән кәм булмайым, донъя көтәм, тип үлемләште. Хәҙер, ана, өйөнөң эсе сынъяһау, байлығы әйләнеп сыҡҡыһыҙ. Тик уның кемгә хәжәте бар. Үҙенең һаулығы юҡ, ире икенсе бисә менән теттерә. Үлеп китһә, йыйған донъяһы шул хыянатсы иргә тороп ҡаласаҡ.

Ниндәйҙер эске тойғо уға артабан былай йәшәргә ярамағанлыҡты әшкәртте. Үҙгәрергә кәрәк... Тик нисек? Әйтеүе анһат. Һорауҙарына яуап эҙләп, тағы гәзит битенә текләне. Эйе, ана, халыҡ табибы: "Теләһә, кеше үҙгәрә. Ауырыуҙы кеше, гәҙәттә, үҙе- үҙенә яҡынайта. Уйы, фекере, күңел халәте менән тартып ала. Ауырлыҡтарға, сырхауҙарға бирешмәйенсә, тормошон икенсе йүнәлешкә бороп ебәрә алған кешеләр була", - тигән. Миҫалдар килтергән. Бәләҡаза, ҡайғы ҡайһы берәүҙе бөгөп һала: кеше аҙым һайын зарын һөйләп, ҡаңғырыуҙан башы сыҡмай, төшөнкөлөккә бирелә, нервылар системаһын зарарлай. Ундайҙар үҙен-үҙе ағыулай, аҙаҡ йә эскесегә әйләнә, йә йәшәү йәмен тапмай, түбән тәгәрәй. Ә ихтыяр көсө булған кешене ҡайғы бары сыныҡтыра ғына. Көслө кеше, гәҙәттә, ҡайғыны эш менән баҫа. Йыш ҡына үҙен ҡыҙыҡһындырған шөғөл таба. Рәссам, шағир, коллекционер,баҡсасы һәм һәр төрлө ижади эштәр менән шөғөлләнеүселәр йыш ҡына үҙ ваҡытында бер тетрәнеү кисергән була, әммә үҙҙәрен ҡулға алырға көс тапҡан улар. Ижадсылар нәҡ шундай көслө рухлы кешеләр араһынан сыға. Ә Нурбикә үҙен шулай итеп нығлап ҡулға алырға, тормошон ҡырҡа үҙгәртеп, яныса йәшәй башларға үҙендә ихтыяр көсө табырмы?

Дауахана саҡта Нурбикәнең үҙ-үҙенә ҡуйған тәүге талабы шул булды: иренең хыянатын йөрәгенә яҡын алмаҫҡа. Ҡайғырып, һауығыу өсөн кәрәкле көстө юҡ-барға сарыф итмәҫкә. Ул бары үҙенең һаулығы, йәшәүе өсөн көрәшәсәк. Врачтарҙың, һаулығығыҙ үҙ ҡулығыҙҙа, тип ҡабатлауы юҡҡа түгелдер әле. Әҙерәк көҙ-баш алыу менән ҡатын, халыҡ табибтарының өйрәтеүен, врачтар ҡушыуын, үҙенең эске һиҙемләүен бергә туплап, үҙенә һауыҡтырыу планы төҙөнө. Ҡыҙына әйтеп, һаулыҡҡа ҡағылышлы гәзит- журналдар, китаптар алдырҙы, уларҙы уҡып сыҡты. Үҙен рухи яҡтан тәрбиәләүгә лә иғтибар итте. Белә, алдында дилемма: "Йә операцияны күтәрә алмай үлеү, йә үҙен нык итеп ҡулға алып, яңыса йәшәп китеү..." Ул йәшәүҙе һайланы. Тормош ниндәй матур! Ниңә ваҡытынан алда ҡара ер аҫтына инеп ятырға ашығырға? Ул үҙенә яңы аныҡ маҡсат ҡуйҙы: бирешмәҫкә! Фекере мейеһенә һеңһен, йөрәгенә үтеп инһен өсөн хатта эре хәрефтәр менән яҙып, ҡаршы стенаға элеп ҡуйҙы: "Бирешмәҫкә!!! Бөтәһе лә - үҙеңдән!!!

Уның ниәтен белгәс, дауалаусы табиб та нәҡ теге гәзиттәгесә әйтеп ҡуйҙы: "Бөтәһе лә ауырыуҙарҙың үҙенән тора. Үҙе һауығырға тырышһа, иң өмөтһөҙ ауырыу ҙа йүнәлеп аяҡҡа баҫа." Һәм ауырыуға ихласланып төрлө яңы кәңәштәр бирҙе.

Ауырыуҙың үтә лә йонсоу йөҙөн, кесерәйеп ҡалған күҙәһен күреп, дауаханаға хәл белергә килгән яҡын әхирәте Сәриәнең башынан шомло уйҙар үтте, күҙҙәренә йәш алды: "Әхирәтем әҙәм була алмаҫ, ахырыһы, хәле мөшкөл. Былай булғас, күпкә бармаҫ..."

Сәриәнең күҙҙәрендә өмөтһөҙлөк йәштәре күреп, Нурбикәнең йөрәге ҡыҫылды. "Үлермеме икән ни? Ҡыҙҙарым әсәйһеҙ ҡалһа, ни эшләр?"- тигән ҡот оскос уй мейеһен телде. Шул саҡ күҙҙәре ҡаршыһындағы яҙыуға төштө: Бирешмәҫкә!!!... Бөтәһе лә үҙеңдән!!!" Алдына һауығырға тигән маҡсат ҡуйған Нурбикә тиҙ арала үҙен-үҙе ҡулға алды. Шул көндө үк ултырып теге гәзиттәге авторға, халыҡ табибына, хат яҙҙы, ярҙам һораны. Мин йәшәргә тейешмен! Бөтә ауырлыҡтарҙы, ауырыуҙарҙы еңеп, яңыса йәшәргә! Көттөрмәйенсә, халыҡ табибынан хат килде. Ул бик күп файҙалы кәңәштәр яҙып ебәргәйне. Кәрәкһә, осрашырға ла ҡаршы түгеллеген яҙған. Бына бит, бирешмәҫкә тырышыуы юҡҡа булманы, иншалла, Нурбикә дауахананан сығып, үҙ аяғы менән өйөнә ҡайтып инде. Был уның тәүге ҙур еңеүе булды.

Үҙ донъяһ - үҙендеке инде. Уның һауаһы ла шифалы. Үҙ-үҙенә юҡ-барға көйәләнмәҫкә фарман биргән ҡатын ире өйҙә булмауҙан трагедия яһаманы. Ҡайтҡас та балаларынан мунса яҡтырҙы. Тәне әҙерәк ипкәһапҡа килгәс, иртәнсәк Лилиә ҡыҙына:

- Магазиндарға сығып әйләнәйек әле. Ябыҡҡас, бар күлдәктәрем дә һәленеп төшкән, өҫ-башҡа яңы кейем-һалым алайым, - тине.

Иртәгәһен улар әсәле- ҡыҙлы магазиндар буйлап сығып китте.

Унынсы класҡа күскән ҡыҙ бала әсә хәлен аңларҙай. Был юлы миңә тегене ал, быны ал, тип теңкәһенә теймәне. Нурбикә үҙенә бер-нисә күлдәк, эске кейем, өйҙә кейеп йөрөргә унайлы тапочкалар һайлап алды. Биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәрен дә яңыртты. Ҡайтҡас, өр- яңынан кейенеп алды ла көҙгөгә ҡараны.

- Аллаға шөкөр, төҫ ташламағанмын икән әле. Ябығыу килешкән дә һымаҡ. - Ул үҙ- үҙенә ҡәнәғәт йылмайҙы.

Бер көндө уларға әхирәте Сәриә килде. Тамам хәлдән тайғандыр, иҫке-моҫҡо дебет шәлгә төрөнөп, диванда ыңғырашып яталыр, тип күҙ алдына килтергәйне ул Нурбикәне. Әхирәтенең йәшәреп киткән йөҙөн, матур итеп кейенгән өҫ-башын күреп, шаҡ ҡатты. Әйтерһең, дауаханала түгел, курортта булып ҡайтҡан. Кәйефе лә ап- арыу күренә. Башҡа саҡтағы кеүек, сурытып, сирен һөйләп тә торманы. Сәриә әхирәтенә һынап ҡарап торҙо ла бот сабып аптыраны..

- Китсе әле, Нурбикә, һин бит торғаны Шахризада. Нурҙан яралған илаһиә, ысын әйтәм. Мирғәлиен ҡайтһа, иҫе китер әле.

- Рәхмәт,әхирәт. Һин лакмус ҡағыҙы кеүекһең, эсендәге - тышында. Мин, ысынлап та, матур булырға хыялланғайным. Тимәк, уйым бойомға ашҡан. Беләһеңме, Сәриә, берәй нәмәне нык теләһәң, барыбер ҡабул була.

Сәриә әхирәтенең ире өйҙә булмауына ла иҫе китмәй, туҙынмай, һин дә мин тып-тыныс ултырыуын күреп, тағы хайран ҡалды. Үҙе булһа, ҡайтыу менән балаларын эйәртеп барып, теге бисә өйөндә дыу ҡуптарыр, ирешеп, һуғышып, ирен барыбер алып ҡайтыр ине. Сәриә бында ниндәйҙер сер бар һымаҡ күреп, һаман нығышты.

- Әхирәт, әллә һине балниста алыштырып ҡайтарҙылар инде?

Нурбикә хәҙергә уға барыһын да сисмәй торҙо. Тик ошоларҙы әйтте:

- Кеше, теләһә, үҙгәрә ала. Бөтәһе лә үҙеңдән тора.

Үҙен-үҙе ҡарап, һаулығын ҡайғыртып йөрөгәс, ҡатындың хәл-әхүәле көндән-көн арыуланды. Диета, гимнастика, режим үҙенекен итә инде, Нурбикә күҙгә күренеп матурланды.

Бер көндө шулай ғаилә төшкө ашҡа ултырғайны ғына, ире Мирғәле ҡайтып инде. Үҙен ғәйепле һанауҙандыр, башта ни эшләргә белмәй, тапанып, бер талай ишек төбөндә баҫып торҙо. Шунан сит кеше кеүек, тиҙ-тиҙ генә һаулыҡ һорашты ла төпкө бүлмәгә үтте. Ваннаға инеп, йыуынып сыҡты. Бөтәһе ашап таралғас ҡына табынға килде. Нурбикә һауыт-һаба йыуып тора ине. Эшен ҡуйып, ире алдына йылы аш килтереп ултыртты, башҡа ризыҡтарҙы эргәһенә теҙҙе. "Ашың шифалы булһын", - тип теләк теләне. Ҡатынының бер ни булмағандай йөрөүен, тыныс йөҙөн күреп, Мирғәле аптырап ҡалды. Ул асыу- ярһыу, күҙ йәштәре, туҙыныу көткәйне. Быларҙың береһе лә булманы. Үҙенә һиҙҙермәҫкә тырышып, бер ни тиклем ҡатынын күҙәтеп ултырғас, ниһайәт, ир кеше телгә килде.

- Нурбикә, мин коммерция эштәре менән ситтә йөрөп ҡайттым. Сауҙа эшен яйға һалыу, беләһеңме, күпме ваҡыт талап итә. Ғәфү ит, эргәңә барып булманы.

- Аңлайым, - тине ҡатын.- Һин - эш кешеһе. Сәбәптәр булғандыр. Тик шуны бел, мин үлеп терелдем. Операция ауыр булды. Доктор артабан санаторийҙа дауаланырға тәҡдим итә. Миңә путевка хәстәрләүеңде үтенәм.

Нурбикә иренең мин-минләгенә теймәй, ыҙғыш-талаш сығармай, һәүетемсә генә һөйләшеүгә үҙен алдан уҡ әҙерләгәйне. Бер-береңде битәрләү, кәмһетеүҙән ни файҙа! Ир - ҡатындың, ҡатыны ирҙең шәхси милке түгел, ти бит, ана, халыҡ табибы. Эйе, һәр кем ирекле, кемде теләй, шуны һөйә. Быны хәҙер ул яҡшы төшөндө. Ауырыу ҡатын менән йәшәүе ир кеше өсөн дә еңел түгел икәнен аңланы. Мөхәббәтте ирешеп-талашып яулап булмай. Улар айырылышҡан көндә лә дуҫтар булып ҡалырға тейеш. Ҡыҙҙарына атай ярҙамы кәрәгәсәк. Тиҙҙән ситкә китеп уҡый башларҙар. Кейәүгә сығырҙар. Бөтә ауырлыҡты үҙ елкәһенә алмаҫ бит инде тере атайҙары була то-

роп. Шулай тип уйланы "Бөтәһе лә үҙеңдән тора" теорияһын ныҡлы уҙләштергән Нурбикә.

Ә Миргәле иһә ҡатынының һөйкөмлө йөҙөнә, яғымлы тауышына, иплe һөйләшеүенә әрәңынан ғашиҡ булып ултырҙы. Ярата бит ул үҙенең Нурбикәһен, бик ярата. Башын шайтан аҙҙырғандыр, ахырыһы. Әле үҙе эйәләгән ҡуштан Рәхиләнең үҙ бисәһенән ҡайһы ере артыҡ? Ғаиләһен ташлап сығып китергә башына тай типмәгән әле уның. Әҙерәк йөрөп алды, етте.

- Уйлашырбыҙ, Нурбикә. Был көйө һинең бер үҙеңде ебәреп булмаҫ, икәүләп барырбыҙ.

- Бына рәхмәт. Ҡыҙҙар үҙҙәре донъя көтәрләк. Һис булмаһа, күршеләргә әйтеп торорбоҙ.

Улар бер-береһенә йылмайып ҡараны. Миргәле ҡатынының үҙен аңлауы өсөн рәхмәтле, Нурбикә иһә, үҙе ҡуйған маҡсатҡа өлгәшеүенә шат ине.

Нурбикә, ысынлап та, үҙгәрҙе. Үҙ-үҙен камиллаштырыуы уны ябай ҡатындан зәңгәр күк йөҙөндә ҡанаттарын киреп осҡан инә бөркөткә әүерелдерҙе. Үҙ-үҙенә ышаныу уны көслө рухлы итте. Камиллыҡҡа ынтылыуы таң ҡалдырғыс матурлыҡ бүләк итте. Ул хәҙер барлыҡ ғүмерен "Бөтәһе лә үҙеңдән" төшөнсәһен тәрәнерәк үҙләштереүгә бағышлаясаҡ. Бөтә нәмәнең дә тик үҙебеҙҙән тороуына тамам инанды, инде башҡаларҙы инандырасаҡ. Ике ҡыҙы ла, әсәләренән күреп, бер минутын әрәм итмәй, эшкә өйрәнә. Әҙәп, тәүфиҡ ҡағиҙәләрен үҙләштерә, үҙ-үҙҙәрен ҡарап тәрбиәләү,һаулыкты һаҡлау, шифалы үләндәр серен өйрәнеү менән мәшғүлдәр. Матур итеп кейенеү әҙәбенә эйә, тукланыу, аралашыу культураһын үҙләштергән ҡыҙҙары ҙур тормошҡа әҙерлекле аяҡ баҫасаҡ, иншалла.

Таныштары, ауырыу кешеләр йыш ҡына хәҙер Нурбикәгә кәңәш һорап килә. Кәүҙәһе йөштәрҙеке кеүек һығылмалы, бите-йөҙө алһыуланып торған, барлыҡ булмышынан изгелек бөркөлгән, бөхтә кейенгән матур ҡатындың тыныс, яғымлы тауышын ишетеп, һәр кем уның һүҙҙәренең хаҡлығына инана. Байтаҡ тәжрибә тупларға өлгөргән Нурбикә кешеләр менән аңғәмәһен үҙен бөхетле иткән төшөнсәнән башларға ярата:

- Бөтәһе лә үҙебеҙҙән тора,- ти ул теге гәзиттәге һарғайып бөткән мәҡәләне кешеләргә күрһәтеп. Ксерокстан үткәрелгән биттәрҙе өләшеп сыға. - Беҙ үҙебеҙгә маҡсат ҡуйырға, ниәтләгән эште тормошҡа ашырыр өсөн ныҡышмал булырға тейешбеҙ. Төрлө насар уйҙарҙы баштан сығарып ташлағыҙ, үҙегеҙгә лә, кешеләргә лә гел изге уйҙа булырға тырышығыҙ, шул саҡта ни теләһәгеҙ, шуның барыһына өлгәшә алырһығыҙ!

Уртаҡлашҡандан аҡыл арта, ә ҡайғы - кәмей. Белгәне менән уртаҡлашып, рухи байлығын арттырып, камиллыҡҡа ынтылып йәшәй Нурбикә. Уның өлгөһө, мөғайын, күп ҡыҙ-ҡатындарҙы уйландырыр. Уйлаһын ҡына ҡалмаһағыҙ, ә мотлаҡ үҙегеҙҙе үҙгәртергә тырышһағыҙ ине, әхирәттәр.

ИЖАДХАНА

# "ТЕАТРҒА ЛА ЕРЕКТЕМ,

## Сибайға ла," - ти Риф Сәйфуллин



**Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры тамашасы араһында ҙур абруй ҡаҙанған театрҙарҙың береһе. Бигерәк тә ауыл халҡы элегерәк уның тамашаларын ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп алып, шығырым тулы зал, ихлас алҡыштар менән ҡарай торғайны. Әле лә шулай. Сибайҙар, тиһәң, шундуҡ халыҡсанлыҡ төшөнсәһе күҙ алдына баҫа. Был ҡала ижадсыларының үҙҙәренә генә хас моңо, сәхнә алымдары, ижад балҡышы бар. Ана шуның менән күңелдәрҙе арбай ҙа инде ул. Ошо театрҙа үҙенең сәхнә юлын башлап, әлегәсә тоғро хеҙмәт итеп, уға 36 йыл ижад ғүмерен бағышлаған Башҡортостандың халыҡ артисы Риф СӘЙФУЛЛИН театр, драматургия, актер һәм ябай кешегә ҡағылышлы уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты:**

### Халыҡсанлыҡ халыҡ араһында йөрөүҙән

Сибай театры һәр ваҡыт юлда, ябай халыҡ араһында йөрөгәнгә күрә лә халыҡсан театрға әүерелгәндер. Бөгөн республика театрҙары, нигеҙҙә, ҡала халҡы өсөн эшләһә, беҙҙең театр халыҡ араһында, ауылдар буйлап йөрөүен дауам итә. Шуның менән дә беҙ халыҡҡа, халыҡ беҙгә яҡын булып тора. Ә тамашаларға килгәндә, әҫәр һөйбәт булып, режиссер тарафынан яҡшы итеп ҡуйылһа, актерҙар урын-еренә еткереп уйнаһа, спектаклде ауыл кешеһе лә, ҡала халҡы ла берҙәй ҡабул итәсәк. Драматургия инде һәр заманда ла киҫкен мәсьәлә булып торҙо. Театрҙарҙың бер ваҡытта ла сәхнә әҫәрҙәренән ғарыҡ булғаны ла булманы. Дәрәс, Мостай Кәрим, Әнғәм Атнабаев, Нәжип Асанбаев, Рафаэль Сафиндар заманында тулы ҡанлы әҫәрҙәр күберәк булды. Тик һуңғы осорҙа был ҡытлыҡ үтә лә ныҡ һиҙелә. Бер ни тиклем драматургтар бар ул, тик улар ғына театр ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмай. Миңә ҡалһа, драматургияның юҡлығына зарланып ултырғансы, бары менән ҡәнәғәт булып, шуның өҫтөндә эшләргә лә кәрәктер ул. Ғөмүмән, өлгөргән әҫәр бик һирәк була. Беҙҙең театрға килгәндә, беҙ яңы аяҡҡа баҫып килгән йәш драматургтарҙы күтәрергә тырышабыҙ. Юғиһә, театрҙарыбыҙ йәш ижадсыларҙың әҫәрен уҡып ҡарай ҙа, сифатһыҙ, тип, кире бороп сығара. Күп осраҡта улар, әлбиттә, сейле-бешле була, күпселектә уны сәхнәгә сығарыу кимәленә еткереү ауырлығы режиссер өҫтөнә ауа, улар юҡ ҡына әҫәрҙән дә бына тигән спектакль ҡойоп ҡуя ала. Әлбиттә, бында артистарҙың да өлөшө юҡ түгел. Шулайтып эшләргә тура килә. Һуңғы ун йыл эсендә Гөлшат Әхмәткужина, Тамара Ғәниева, Таңсулпан Ғариповалар драматург булараҡ беҙҙә ҡанат нығытты. Наил Ғәйетбаевтың да тәүге әҫәре - "Койма ямғырҙар"ҙы беҙ сәхнәләштерҙек. Флорид Буләков та драматург булараҡ беҙҙең театрҙан фатиха алды.

### Сәхнәне еңел-елпе баҫты

Беҙ тамашасы ихтыяжын күҙ уңында тотһаҡ та, пьеса һайлағанда ошо ихтыяж ғына роль уйнай, тип әйтмәҫ инем. Әҫәрҙең күтәргән темаһы, проблемаһы бөгөнгө көнгә ятышлымы, был әҫәр аша халыҡҡа ни әйтергә теләйбеҙ - бына ошо һорауҙар ҙа мөһим. Беҙ халыҡ талабы артынан ғына эйәрә башлаһаҡ, бигерәк тә бөгөнгө көн тамашасыһы артынан, еңел-елпе әҫәрҙәрҙән үтә алмаҫ инек. Бөгөнгө тамашасының тәрән мәғәнә һалынған, ҙур проблема күтәргән әҫәрҙе уйланып, фекер йөрөтөп ҡарап ултырғыһы килмәй, улар күпселектә театрға ял итергә, көлөргә, күңел күтәрергә килә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең тамашасы ана шундай битараф күңеллегә әйләнеп бара, беҙ ҙә улар артынан эйәрә башланыҡ. Икенсе яҡтан уйлап ҡарағанда, проблемалы әҫәр ҡуям, тип, буш залға уйнап та ултырып булмай бит әле. Унан һуң, тамашасыны ла аңлап бөтөп булмай, комедия ҡуйһан, улар уйландырырлыҡ мәғәнәүи әҫәр һорай, проблема күтәрелгәнен тәҡдим итһәң, бындай ҡатмарлыҡтар тормошта ла етерлек, беҙ театрға ял итергә киләбеҙ, тиҙәр. Шуға ла беҙгә репертуар һайлағанда алтын урталыҡ табырға өйрәнергә кәрәк.

Эйе, 60-70-се йылдарҙа театр сәхнәләренә еңел-елпе әйбер бик һирәк сыға ине. Комедиялар ҙа ҡуйыла торғайны, әммә уларҙа ла тормоштан алынған етешһеҙлектәр сатирик рәүештә күрһәтелеп, спектакль дауамында бер тос фекер үткәрелә ине. Бөгөн, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, театрҙарыбыҙҙа йөкмәткеле спектаклдәр аҙ ҡуйыла.

### Сибайға еректем инде

Мин Өфө дәүләт сәнғәт институтын уҡып бөткәндә өйләнгәйнем инде. Кәләшем Рәмилә Сәлимгәрәева бер йыл алдан училище тамамлап, Сибайға эшкә китте. Мин дә уның артынан юлландым. Беҙҙең һөнәр өсөн диплом алыу әле ул актер булыуҙы аңлатмай. Артист булыр өсөн арыу ғына тоҙло һурпа эсергә кәрәк. Институт тупһаһынан сығыу менән аяғына ныҡлы баҫып уйнап киткәндәр бик һирәк. Шуға ла Өфөлә ҡалыу мөмкинлеге булһа ла, Сибайға китеүемдең тәүге сәбәбе - кәләшем янына барыу булһа, икенсенән, йәш артист булараҡ, халыҡ араһында бер-ике йыл эшләп, тәжрибә туплау мөһим ине. Сибай театрына барыу менән мин коллективта үҙ кеше булып киттем, шундуҡ төп ролдәр бирҙеләр. Шулай, ижад йөгөн баштан уҡ ныҡлы егелеп тарта башланым. Бер-ике йыл эшләрмен дә, кире Өфөгә китермен, тип уйлағайным, әммә Сибай үҙендә тотоп ҡала килде. Ул ваҡытта йәш актерҙар араһында конкурс үткәрелә ине. Бер конкурста Әхтәм Абушахманов менән икәү еңеп сыҡтыҡ һәм беҙҙе Мәскәүгә ял итергә ебәрҙеләр. Шунда Чехословакияның бер театрында "Ай тотолған төндә" спектаклен ҡуйып ҡайтып килгән Лек Вәлиев менән осраштыҡ. Ул миңә Өфөгә күсергә тәҡдим яһаны, әммә мин ҡайһы бер талаптар менән килешмәнем. Өс-дүрт йыл эшләгәндән һуң мине Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исеменә тәҡдим иттеләр. Аҙаҡ фатир мәсьәләһе туҡтатты. Кеше тупһаһында йөрөү ялҡыткайны, үҙ мөйөшөң булғас, ҙур ҡалаға барып, шул уҡ ыҙаларҙы яңынан кисерергә теләмәнем. Сағырыуҙар булып торҙо, әммә туған театрҙы ташлап китергә барыбер йөрьәт ителмәне. Хәҙер инде "минең театрым", тип эшләйем, бөтә көсөмдө, һәләтемде шунда һалам.

### Төп ролгә һәр кем ынтыла ла ул…

Беҙҙең артист халҡының сәхнәләге яҙмышы режиссерға бәйле. Һәр артист төп роль башҡарырға теләй, әлбиттә, әммә ул беҙҙең ихтыяр буйынса ғына хәл ителмәй. Режиссер ниндәй роль бирһә, риза булып, шуны урынына еткереп башҡарырға тейешһең. Үҙең уйнарға теләгән, яратып башҡарған һәм тамашасы ихлас ҡабул иткән ролдәр бик һирәк була. Унан һуң, һәр кемдең төп ролде уйнағыһы килһә лә, был барыһының да һәләтенән килә, тигән һүҙ түгел. Әйтәйек, әгәр Арыҫлан Мөбәрәков тыуҙырған образдарҙы һәр кем уның кеүек башҡара алһа, Арыҫлан Арыҫлан да булмаҫ ине бит. Актерҙарҙа нәфсе көслө, һәр беребеҙ үҙебеҙҙе талант, тип иҫәпләйбеҙ, ә булдыра алыу-алмауыбыҙ тураһында уйлап та бирмәйбеҙ.

Үҙемә ҡалһа, мин ролдәремдән уңдым. Ниндәй генә образ тыуҙырғанда ла мин, асылда, Риф Сәйфуллин булып ҡалам. Һәр образға минең булмышымдың бер өлөшө һалына һәм шунан сығып, уның ыңғай йәки кире сифаттарын тукый башлайым. Шул уҡ ваҡытта был образдар ниндәйҙер кимәлдә минең күңелемдә лә эҙ ҡалдыра. Ғөмүмән, һин һәм тыуҙырған образың бер-береһенә тығыҙ бәйләнә. Актер булараҡ, һәр ваҡыт әҙләнеүҙәр менән йәшәйһең, һинең иғтибарыңды йәлеп иткән үҙенсәлекле сифат күҙеңә салынһамы, шуны тиҙ генә отоп алып, багажыңа һалып та ҡуяһың, уңайлы мәле сыҡҡанда ҡулланып ебәрәһең. Ысын актер бындай запасҡа эйә булырға тейеш.

### Кешеләрҙең вайымһыҙлығы борсой

Бөгөнгө тормошта мине иң борсоғаны - кешелә кешелелеклек сифаттары юғала бара, бер-беребеҙгә дошманға ҡараған кеүек ҡарайбыҙ. Мин Совет осоронда үҫкән кешемен, ул ваҡытта кешеләр бер-береһенә ҡарата күпкә мәрхәмәтлерәк ине. Ауылда кем дә булһа үҙ эш башҡара икән, барыһы ла ихлас ярҙамлаша, бер оло ғаилә булып йәшәй ине. Хәҙер кешеләрҙе аҡса түләп тә ярҙамға саҡырып алып булмай. Бөгөн кеше сағыштырмаса хәлле йәшәй, һәр хәлдә, тамаҡты - туҡ, өҫтө бөтөн итеп барыһы ла йәшәй ала, тик халыҡ шул тиклем ялҡауланды. Тап шуның өсөн дә бөгөн ҡаланы асарбаҡтар баҫты, ауылда эскелек көсәйҙе. Тиһтә тимер өҙөрҙәй ирҙәрҙең, бигерәк тә ҡатындарҙың, мәсет юлында йөрөр әбейҙәрҙең эсеүен күреү аяныс! Беҙҙең халыҡ указ буйынса, кемдәндер әйткәнен көтөп кенә эшләргә күнеккән, яңғыҙы бер нәмәне лә хәл итә белмәй. Колхоз, совхоздар тарҡалғайны, һыу ағымына сығарып ташланған юныҫҡы кеүек, баҙаны ла ҡалды. Элек халыҡ яҡты киләсәккә өмөт итеп йәшәне. Кеше бөгөн шул ышанысын юғалтты. Сосораҡтар, уңғандар, әлбиттә, йәшәйем, тип тырыша, ҡайҙан да булһа аҡса табыу юлын ҡарай. Беҙҙең театрҙың маҡсаты ла тап ана шул тыуып килгән проблеманы алдан күрә белеү һәм шуны иҫкәртеү. Ә беҙ, актерҙар иһә, һәр ваҡыт үҙебеҙҙе тәрбиәле торға тейешбеҙ. Беҙҙең һөнәр тышкы ҡиәфәтте лә, эске мәҙәниәтте лә тәртиптә тотоуҙы талап итә. Халыҡ сәхнәгә ҡарап һоҡланырға, артистарға ҡарап үҙенә өлгө, фәһем алырға килә. Беҙ шуға ла был исемгә тап төшөрмәҫкә, үҙебеҙҙе лайыҡлы тоторға тейешбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Актер Риф Сәйфуллиндың 60 йәш үренә үрләгәндә лә һаман йәш, матур, мөһәбәт кәүҙәле булып ҡалыуы уның уйҙарының яҡтылығынан, ихтыяр ныҡлығынан, сәхнәне, кешеләрҙе яратыуынан киләлер. Юбилярҙы күркәм байрамы менән ҡотлап, иҫәнлек-һаулыҡ, ялҡынлы ижад һәм тамашасылар һөйөүе теләп ҡалабыҙ.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СОВЕТ КЕШЕЛӘРЕНЕҢ...
## пенсияһына өҫтәмә

■ Америка ғалимдары бер ҡасан да көсө бөтмәй торған батарейка уйлап тапҡан. Был батарея ядерлы, энергияны радиоактив изотоптар тарҡалыуы һөҙөмтәһендә ала, шуға ла уның кеше өсөн хәүефһеҙ булыуын анығ ҡына әйтеп булмай. Әммә уны уйлап табыусы Миссури университеты ғалимдары әйтеүенсә, бында хәүефләнергә урын юҡ, сөнки ядерлы энергия сығанағы көнкүрештә күптән ҡулланыла, мәҫәлән, һаһалма йөрәк, космос спутниктары, пилотһыҙ оса торған аппараттар тап ошондай батареялар ярҙамында эшләй. Тик хәҙер ғалимдар был батареяны биш һумлыҡ тимер аҡса ҙурлығында ғына итеп һаһауға өлгәшкән, уны кәрәҙле телефондарға, ноутбуктарға, фотоаппараттарға ҡуясаҡтар. Иң мөһиме, уның менән йөҙ йылға яҡын ҡулланып буласаҡ.

■ Рәсәйҙә 2010 йылдың июненә тиклем сит ил машинаһы индергән өсөн һалымдың ваҡыты оҙайтылған. Был сара хөкүмәт тарафынан илдең машина етештереүселәргә һәм сит ил машиналарын Рәсәйҙә йыйыусыларға ярҙам итеү маҡсатынан индерелә. Хәҙер яңы сит ил машинаһын индергән өсөн һалым 25 проценттан - 30, ә 5 йылға тиклем тотонолған машиналарға 25 проценттан 35 процентҡа тиклем күтәрелде. Яңы закон үҙ көсөнә ингән ваҡыттан алып Алыҫ Көнсығышта сит ил машиналарын индереү 4 тапҡырға кәмегән. Шул уҡ ваҡытта һалымды ла 305 миллиард һумға күберәк йыйғандар. Әммә бындай саралар Рәсәй машиналар етештереүселәренә ярҙам итмәне: ғинуарҙан августа тиклем еңел машина етештереү 64 процентҡа кәмегән.

■ Көрсөк хәрбиҙәргә торлаҡлы булыуға ҡамасауламаясаҡ, быйыл да, киләһе йылда ла улар өсөн 45 меңгә яҡын фатир төҙөләсәк, быны өсөн хөкүмәт бөтә өҫтәмә аҡсаларҙы йүнәлтәсәк. Торлаҡ төҙөүҙән тыш, ҡорал һәм техника яңыртыу ҙа күҙ уңында тотола.

■ Эксперттар 2009 йылда инфляцияны билдәләнгән кимәлдә (11 һәм унан да түбәнерәк процент) тотоу мөмкин буласаҡ, әммә киләһе йылда уның түбәнәйеүен көтөргә кәрәкмәй, тип фаразлай. Инфляция менән бер рәттән, аҙыҡ-түлеккә һәм бензинға хаҡтар артыу көтөлә.

■ Совет осоронда хеҙмәт стажы булған Рәсәй граждандарының пенсияһына өҫтәмә көтөлә, был турала яңыраҡ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры Татьяна Голикова белдерҙе. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, пенсия уртаса 1100 һумға артасаҡ, был сара 36,5 млн кешегә ҡағыласаҡ. Шулай уҡ бала ҡарау буйынса пособие күләме артасаҡ һәм дарыуҙарға хаҡ төшәсәк. 70 йәштән уҙған пенсионерҙарҙың пенсияһы 1600-ҙән 1700-гә тиклем артыуы ла ҡаралған.

■ 1 августа 2009 йылдың башынан алып өсөнсө тапҡырға пенсия күләме арткайны. Хеҙмәт пенсияһының страховка өлөшө 7,5 процентҡа күбәйҙе һәм уның һөҙөмтәһе булып уртаса хеҙмәт пенсияһы 5536 һум тәшкил иткәйне. Рәсәй Пенсия фондынан хәбәр итеүҙәренсә, 36 млн пенсионер әле ошондай күләмдә пенсия ала, быны өсөн 41 млрд һум йүнәлтелгән. Голикова фекеренсә, пенсияны йәшәү минимумына тиклем еткереү өҫтөндә эш алып барыла, быны өсөн киләһе йылдың 1 ғинуарынан төбәк һәм федераль социаль өҫтәмә индереү тормошҡа ашырыла башлаясаҡ. Әгәр ҙә төбәктә йәшәү минимумы уртаса минимумдан түбәнерәк икән, түләүҙәр ил бюджетынан йүнәлтеләсәк, киреһенсә, юғарыраҡ булһа, урындағы властар түләйәсәк.

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ

**Көньяҡ Дания университеты ғалимдары кешеләрҙең уртаса ғүмер оҙайлығы 1840 йылдан алып даими үҫә килә һәм был процестың үҙгәреү билдәләре юҡ, тигән сенсацион белдереү менән сығыш яһаны. Быны факттар ҙа раҫлай. Һуңғы 50 йыл эсендә донъяның утыҙлап илендә 80 йәште үтеүселәр ике тапҡырға йышыраҡ күҙәтелгән. 1950 йылда 80-90 йәшкә етеү мөмкинлеге ҡатын-ҡыҙҙар өсөн уртаса 15 процент тәшкил итһә, ир-аттарҙыҡы 12 процент ине. 2002 йылда был күрһәткес ҡатын-ҡыҙҙар өсөн - 37, ирҙәр өсөн 25 процентҡа етте. Шуға күрә белгестәрҙең, алдынғы илдәрҙә тыуған балаларҙың яртыһынан күбеһе 100 йәшкә етәсәк, тигән һығымтаһының дөрөҫ булыуы ла ихтимал. Улай ғына ла түгел, кешелек йәшәрә бара. Ни өсөн Урта быуаттарҙа 40 йәштәге кеше ҡарт һаналһа, хәҙер был йәш кешенең яңы балҡыған мәле? Йәшлекте оҙайтыуға нимә йоғонто яһай: яҡшы йәшәү шарттарымы, йәки интеллект үҫешеме? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Рәсәй медицина фәндәре академияһы академигы, профессор, медицина фәндәре докторы, Рәсәй геронтология ғилми-клиник үҙәге директоры Владимир ШАБАЛИН яуап бирә.**



# АҠЫЛЛЫЛАР ОҘАҠ ЙӘШӘЙӘСӘК,
## ә ялҡауҙар үлеп бөтәсәк

### Бында цивилизацияның ҡыҫылышы юҡ

**- Бәлки, бында бер ниндәй йомаҡ та юҡтыр. Бары тик хәҙерге тормош мөмкинлектәре, яҡшы йәшәү шарттары беҙгә оҙағыраҡ йәшәргә булышлыҡ итәләр? Ни тиһәң дә, һыуыҡ мәмерйә эсендә ер иҙәндә йәшәһәң, ғәҙәти һыуыҡ тейҙереүҙән дә үлергә мөмкин. Ә хәҙерге заман кешеһенең торлағы йылы, ашарына бар, дарыуҙар тулып ята...**

- Бәхәсле һорау. Мәҫәлән, бөгөн медицина үлемгә дусар ителгән балаларға ла йәшәп китергә ярҙам итә ала. Әммә был балалар ниндәй булып үҫә? Генетик яҡтан көсһеҙ булып. Бынан тыш, цивилизация кеше сәләмәтлегә өсөн зыянлы булған химик, электромагнит, радиация көсөргәнеше бирә. Ә беҙ йәш көйө оҙағыраҡ йәшәүҙе дауам итәбеҙ. Шулай булғас, бында цивилизация рәхәтлектәренең ни ҡыҫылышы бар һуң?

Ғөмүмән, әгәр цивилизацияның кешелеккә ни биреүен һәм ни алыуын үлсәп ҡараһаң, ҡайһы яҡҡа файҙа күберәктер бит әле. Беҙҙең дөйөм планета йәшәреүендә эволюция мәнфәғәте лә бар, тигән гипотеза йәшәй. Ни өсөн, әйтәйек, эволюция борон кеше ғүмере оҙайлығын 40 йәшкә тиклем генә һаҡлаған? Сөнки был бала табыуға һәләтле осор. Йәғни, эволюцияға ерҙәге халыкты мөмкин тиклем тиҙерәк арттырыу кәрәк булған.

### 50 йәшкә тиклем бала табырға мөмкин

**- Ғүмер оҙайлығы һәм енси өлгөргәнлек араһында бәйләнеш бармы? Элек кешеләр 30 йәшкә тиклем генә йәшәгәндә 13-16 йәштән үк енси тормош алып барған, иртә йәштә бала тапҡан, шуға күрә лә иртә үлгәндәрҙер. Ә хәҙер 30 йәшлектәр араһында ғиффәтлеләрҙе лә осратырға мөмкин. Бәлки, шуға ла ҡартлыҡ һуңыраҡ киләлер?**

- Бөгөн енси тормоштоң һуң башланыуы биологик йәштең үҫеү һөҙөмтәһе булып тора ла инде. Элек утыҙ йәшкә тиклем генә йәшәгәс, мейегә "һинә тиҙерәк нәҫел ҡалдырыу кәрәк" тигән программа һалынған булһа, хәҙер был программа бүтәнсәрәк яңғырай: "кабаланма - ғүмерең алда әле". Тап шуға ла бөгөн күптәр бала табырға ашыға һалып бармай.

**- Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ 40 йәштән һуң бала тапһа, уның ғүмере оҙаямы?**

- 45-50 йәш - ҡатын-ҡыҙҙың бала табыу һәләте осороноң сиге. Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙға 50 йәштән һуң ауырға ҡалыу көсөргәнеше һалынһа, уның яҡты донъянан китеү хәүефе ҙур буласаҡ. Шуға күрә лә ауырға ҡалыу менән ғүмер оҙайлығы араһында тығыҙ бәйләнеш юҡ.

**- Идеаль шарттарҙа, мәҫәлән, барокамерала йоҡлап, иң таҙа һәм юғары сифатлы аҙыҡ ашап, саф һауа һулап, мәңге йәшәргә мөмкинме?**

- Айырым шарттарҙа үҫемлек йәшәйешен оҙайтырға мөмкин. Әммә кеше үҫемлек затынан түгел. Беҙҙең өсөн психик өлкә - иң мөһиме. Кешене барокамераға урынлаштырһаң, ул ауыр тормош шарттарына ҡарағанда ла тиҙерәк үләсәк.

**- Әммә был бит парадокс!**

- Һис тә парадокс түгел. Сөнки тәбиғәт кешене эш өсөн яралта, ә секстан һәм ашауҙан ғына ҡәнәғәтлек алһын өсөн түгел.

### Хеҙмәт - төп дарыу

**- Тимәк, тәбиғәт үҙ шарттарын ҡуя: эшлә, бәлки, шул саҡта оҙағыраҡ йәшәрһең? Шулаймы?**

- Эйе, хеҙмәт - ғүмерҙе оҙайтыу өсөн төп шарт булып тора. Ялҡауҙарҙы тәбиғәт тиҙ генә тормоштан ситкә алып ырғыта. Шуға күрә лә тәнебеҙҙең идара итеүсе төп ҡоралы - ул баш мейеһе. Ҡалғандар уның торошона бәйле. Ни өсөн үлем килә? Әйтәйек, спортсы мускулдарын тығыҙландырыу өсөн штанга күтәреү менән шөғөлләнә лә, аҙаҡ күнекмәләрен ташлаһа, мускулдары бәләкәсәйә. Был ваҡытта мейе нимә менән шөғөлләнә? Ул ҡан менән яҡшы туҡланыу өсөн тейешле эш менән тәьмин итеүҙе талап итә. Әгәр ҙә мейе эшләмәй икән, уға организмдың яҡшы торошо кәрәк тә түгел. Йәғни, мейе талаптары тәндең башҡа элементтарының физиологик торошо менән идара итә.

### 150 йыл ғүмергә хоҡуҡ

**- Ғүмер оҙайлығы милләткә бәйлеме, оҙаҡ йәшәүсе милләттәр бармы?**

- Генетик яҡтан ҡарағанда, кешенең уртаса йәшәү оҙайлығы милләткә бәйле түгел. Япондар, шулай уҡ шведтар ҙа оҙаҡ йәшәй. Көнсығышта ла, Көнбайышта ла оҙаҡ йәшәүселәр бар. Бында йәшәү шарттары йоғонто яһай. Билдәле күләмәстә әйтелгәнсә, Америка кешеһен беҙҙең шарттарҙа ҡалдырһаң, 40 йыл да йәшәй алмаҫ.

**- Шулай ҙа уңайлы шарттар оҙаҡ йәшәүҙең төп шарты булып сыға түгелме? Ә һеҙ әле генә уның киреһен әйткәйнегеҙ?**

- Геном беҙгә иң күбе 150 йәшкә тиклем йәшәргә хоҡуҡ бирә. Был уртаса ғүмер оҙайлығы түрә. Был сикте беҙ ҡасан да булһа үтә алыуыбыҙ шикле. Әммә беҙ уртаса 70-75 йәшкә тиклем йәшәйбеҙ. Йәғни, ҡәтғи йәшәү оҙайлығы - ул генетик мөмкинлектәрҙең һәм йәшәү, тирәяҡ мөхит шарттарының киҫелеше.

Ә уңайлы шарттарға килгәндә, ул кешегә психологик һәм интеллектуаль мөмкинлектәр асыуға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе, шулай уҡ тәндең биологик талаптарын тәьмин итеүсе шарттар. Әгәр юғары интеллектлы йәки музыкаль һәләтле кеше ауылда йәшәп, үҙенең талантын асыу мөмкинлегенә эйә булһа алмаһа, уның был һәләттәре лә юғала, кеше үҙе лә тиҙ үк бөтә һәм үлә.

ТӘҮБӘ




## 18-се һабаҡ : "Иҫке күлдәк" - ул холҡондағы кире сифаттарың, йомшаҡ яҡтарың, ихтыярһыҙ булыуың…

Көн һайын иртә таңдан тороп йүгереп кенә холоҡто үҙгәртеп буламы? Ғөмүмән, йүгереү генә кешенең эске булмышын үҙгәртәме? Әгәр ҙә көн һайын бер үк ваҡытта һәм йылдар буйы, ғүмерең һуҙымында йүгерһәң, әлбиттә, үҙгәртә...

Был хаҡта алдағы һанда бәйнә-бәйнә яҙҙыҡ. Йылдар буйына, көн һайын иртәнсәк, бер үк ваҡытта йүгереү холоҡто үҙгәртеүҙең иң тәбиғи һәм ябай юлы. Ғүмер - ул үҙе үк Йүгереү, Тыуым менән Үлем араһын йүгереп үтеү. Уны атлап үтергә лә була. Ваҡыт барыбер шулай уҡ үтә. Әммә атлау ғүмерҙе ҡыҫҡарта. Ни өсөнмө? Сөнки атлап барғанда юлды ҡыҫҡараҡ үтәһең, донъяны ла аҙыраҡ күрәһең. Йүгереп барғанда күберәк ара үтеүең ғүмереңде оҙонлоғона ла күсә. Һәр хәлдә, был саҡта ғүмерең дә оҙонораҡ булып күренә. Сөнки, әйткәнебеҙсә, Йүгереү - Ғүмер! Сөнки һин ғүмерең буйына йүгерәһең. Етмәһә, атлаһаң, ҡаның ойой, ултырғың, йоҡлағың килә башлай. Ҡан ойоу - ҡартлыҡ билдәһе, ғүмереңде ҡыҫҡалыҡ күрһәткесе. Йүгереү барыбер файҙалы.

Әммә йүгереп барған ерендән дә ниҙәр генә уйламайһың да, ниҙәр генә кисермәйһең? Тормошта ла ниндәй генә хәлдәр булмай? Ҡайғы ла килә, ауыр һүҙ ҙә ишетәһең. Ҡыҫҡаһы, йүгереү генә түгел, хатта йәшәгәләреңде килмәгән саҡтар ҙа була. Әҙәм балаһы барыһын да кисерә донъялыҡта, үҙлегенән сығарған көтөлмәгән хәлдәрҙән дә азат түгел. Донъя - хәҙер былай, хәҙер тегеләй.

Ололарҙың һөйләүе буйынса, элек халҡыбыҙҙа тәрән ҡайғыға юлығып, оҙаҡ ваҡыт күңел тынысլығы таба алмаған кешеләрҙе тау битләүе буйлап мәжбүр итеп йүгерткәндәр. Хәле бөткәнсе, ҡайғырырлыҡ әмәле ҡалмағансы (Ҡайғынан арыныуҙың бындай ысулы хаҡында алдағы һанда һөйләшербеҙ әле). Әлегә шуны ғына әйтеп киткем килә: тимәк, кеше бер туҡтауһыҙ йүгереп, ҡайғы-хәсрәттән дә арына ала.

Был юлы **кейем** хаҡында һөйләшәйек. Кейем нимә ул? Ағас күрке - япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк. Эйе, кешенең тәнен ҡаплай һәм һаҡлай торған сепрәк-сапраҡ. Башҡа төрлө материалдарҙан да тегелгән кейемдәр була. Тағы ла бер һорау: үҙегеҙҙең кейемде йәки шуның ишен башҡа кешенең өҫтөндә күреп ҡалһағыҙ, ни эшләйһегеҙ? Эйе, ер тишегенә инеп китерҙәй булып оялаһығыҙ, уңайһыҙлыҡ кисерәһегеҙ. Ә ни өсөн оялаһығыҙ? Сөнки... Уйлана торорғоҙ...

Йәки булмаһа, һеҙ йылғаға һыу инергә барҙығыҙ, ти. Мауығып, оҙаҡ ваҡыт һыуҙан сыҡмай торҙоғоҙ ҙа, сығыуығыҙға, кейемегеҙҙән елдәр иҫкән. Етмәһә, ярҙам һорарға яр буйында һыңар кеше лә ҡалмаған. Исмаһам! Һеҙгә ашығыс рәүештә өйгә ҡайтырға ла кәрәк. Ни эшләйһегеҙ инде? Етмәһә, өйгә ҡайтып еткәнсе ярты ҡаланы үтергә... Ярай, сара таба алмаһағыҙ, һыу инә торорғоҙ. Ә мин һеҙгә үҙем шаһит булған бер ҡыҙыҡлы һәм фәһемле ваҡиғаны һөйләй торам.

Беҙ, бер төркөм һабаҡташ егеттәр, уҡыу йорттарын тамамлауҙың бишенсеме йылында, Өфөлә осраштыҡ та, быны билдәләргә булдыҡ. Тегенеһен-быныһын алдыҡ та, Ағиҙелдең аръяғына юлландыҡ. Туҡталған еребеҙҙе барығыҙ ҙа яҡшы беләһегеҙ, Димдең Ағиҙелгә ҡойған йәмле ерендә, йылға аша Салауат батыр сәләм биреп торған ерҙә була инде.

...Осрашыуҙы матур иттереп билдәләнек. Эңер төштө, усаҡ яҡтыҡ. Ағиҙелдә шығырҙап-шаулап боҙ киткән йәмле ваҡыт. Күңелдәр күтәренке. Бына төн уртаһы ла етте. Шул саҡ бер егетебеҙ, үҙенә әллә күберәк булғанмы, әллә етмәй ҡалғанмы, сисенде лә һыуға сумды ла ҡуйҙы. Сәғәтенә 60-80 саҡрым тиҙлектә аҡҡан йылға уны күҙ асып-йомған арала ҡайҙалыр олаҡтырҙы, зым-зыя булды. Ҡыҫҡырып-һөрәнләп, яр буйлап таңға тиклем эҙләнек уны. Табалманыҡ. Ҡотобоҙ бот буйына китте, малай. Ни эшләргә лә белмәйбеҙ. Төрлөсә уйлап бөттөк, ҡара ҡайғыға төштөк. Осрашыуға бәйле күңел күтәренкелеге шул уҡ дәүмәлдәге күңел төшөнкөлөгө менән алмашынды.

Тиҙ генә йыйынып, дуҫыбыҙҙың да кейемдәрен алып, ҡалаға барырға, тейешле органдарға хәбәр итергә кәрәк, тип план ҡора башлағанда ғына... Ҡараһаҡ, беҙ кистән килгән һуҡмаҡ буйлап йүгереп килгән теге дуҫыбыҙҙы күреп ҡалдыҡ бит әй! Тере!

Үлеп-тереләдек... Дуҫыбыҙҙы илай-илай ҡосаҡланыҡ, ҡосаҡлай-ҡосаҡлай иланыҡ. Ул шилма егет менән нимә булған, тиһегеҙме?

Ул йылғаға сумған ыңғайға, көслө тулҡын эләктереп алып, боҙҙар менән бергә түбәнгә алып киткән. Сәғәтенә 60-80 саҡрым тиҙлегендә. Бына һиңә - мә! Боҙҙар менән көрәшә-көрәшә, беҙ туҡталған ерҙән ун биш саҡрымдай самаһы аҫта йылғанан тиге ярына барып сыҡҡан бит, исвулыш малай! Артабан ни эшләгән тиһегеҙме?

Әлеге лә баяғы һорау. Һеҙ һыу инеп сыҡҡансы, һеҙҙең дә кейемегеҙҙе урлап киткәйнеләр бит әле. Ә беҙҙең дуҫыбыҙ юғалып ҡалмаған. Тотҡан да... Иң тәүҙә спортсы ҡиәфәтен алып ҡайҡайып, турайып баҫҡан. Тешен ҡыҫып йылмайған, сәғәтенә 40 саҡрым тиҙлегендә йүгереп киткән. Таңғы Өфөнөң урамдарын үткәндә хатта уға иғтибар итеүсе кеше лә булмаған. Хәйер, иртә таңдан ҡала буйлап йүгереүсе кешеләр әҙме ни? Кейеме бармы? Бар! Йүгерәме? Йүгерә! Спортсымы? Спортсы! Маладисмы? Маладис! Инде нимә кәрәк инде башы эшләгән кешегә...

Иң мөһиме, дуҫыбыҙ бит юғалып ҡалмаған. Үҙен һәләкәт, үлем сигенә алып килгән хәлдән дә аңһат ҡына сығыу юлын тапҡан. Йүгереп сығыу юлын...

Хәҙер инде, тәжрибәле аналитик булараҡ, ошо хәлдәрҙән сығып, башта ҡуйылған һорауға яуап эҙләйек. Ниндәй һорау ине әле? Эйе... **Ни өсөн беҙ үҙебеҙҙең кейемде йәки уның ишен башҡа кешенең өҫтөндә күрһәк, ер тишегенә инерҙәй булып оялабыҙ, уңайһыҙлыҡ кисерәбеҙ?** Эйе, ни өсөн?..

Сөнки беҙ түбәнгә аң кимәлендә башҡа кешенең өҫтөндәге үҙебеҙҙең кейемдә үҙебеҙҙе, дөрөҫөрәге, үҙебеҙҙең етешһеҙ яҡтарыбыҙҙы күрәбеҙ. Үҙегеҙҙе телевизор экранында күргәнегеҙ бармы? Һоҡландығыҙмы? Иң беренсе, унда һеҙгә етешһеҙ яҡтарығыҙ күҙгә ташлана, шулай бит? Иң тәүҙә кейемегеҙҙән, үҙ-үҙегеҙҙе тотошоғоҙан, тауышығыҙҙан, фекерегеҙҙе тейешле әйтә белмәүегеҙҙән, шулай уҡ, оялаһығыҙ ҙа, тиҙ генә телевизорҙы икенсе каналға күсерә һалаһығыҙ. Кемдер берәү экрандағы, фотолағы үҙенә ҡарап һоҡлана ала икән, ул үҙен сыр яланғас күреү һәләтенә эйә һәм шуның менән бәхетле лә. Теге иртә таңдан спортсы ҡиәфәтенә инеп, Ағиҙел ярына йүгереп ҡайтҡан дуҫыбыҙ ҙа үҙ-үҙен сыр яланғас күреү һәләтенә эйә булған, тимәк.

Асылда кеше донъяла кейемһеҙ, сыр яланғас тыуа, йәшәй, фанилыҡҡа ауыша. Ә кейем шартлы ғына төшөнсә. Ул тәндәге етешһеҙ яҡтарҙы, оятһыҙ ерҙәрҙе ҡаплаусы, ҡояштан һаҡлаусы, йылытыусы ғына. Минеңсә, ояты булмағандар кейемһеҙ йөрөгән кеүек, холҡо буйынса күркәм кешеләр ҙә үҙҙәренең булмышын йәшермәй, алсаҡ, игелекле булыусан. Уларҙың хатта күҙҙәренә ҡарағанда ла, өҫтәрендә кейемдәре булыуҙарына ҡарамаҫтан, булмыштары үтәнән-үтә күренеүсән.

Хәҙер инде иң мөһим һығымта!!

Бәхтиһәң, беҙҙең холҡобоҙҙағы барлыҡ кире сифаттарыбыҙ, йомшаҡ яҡтарыбыҙ, ихтыярһыҙ булыуыбыҙ, үҙлегебеҙҙән сығарыусы хәлгә, мәғлүмәткә тейешенсә баһа биреп, тигеҙлек һаҡлап ҡала алмауыбыҙ өҫтөбөҙҙәге **иҫке күлдәк** кеүек кенә икән дә. Быны ни өсөн беҙ башҡа кешенең өҫтөндәге үҙебеҙҙең кейемдән һәм уның ишенән уңайһыҙланабыҙ, оялабыҙ икән! Сөнки беҙ ул кейемдә барлыҡ етешһеҙлектәребеҙ менән үҙ-үҙебеҙҙе күрәбеҙ. Ни эшләргә һуң? Ул кейемдән ҡотолорға кәрәк. Ә беҙ ни эшләйбеҙ? Саҡ ҡына иҫкерә, моданан сыға башлаһа, кейемебеҙҙе туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, таныштарыбыҙға бирәбеҙ. Уларҙы шул кейемдә күргән һайын, теге уңайһыҙланыу комплексы тағы уяна. Йә булмаһа, ул кейем өйөбөҙҙә һаҡлана. Ахыр сиктә, ул йыртылып, иҙән йыуғысына әүерелеп, ваннабыҙҙың бер мөйөшөндә урын ала. Үҙебеҙ туҙып, ҡартайып бөтәбеҙ, һуңғы сиктә беҙҙе табутҡа һалып, йорттан алып сығалар. Ә теге "иҫке күлдәк" һаман да йыуғыс рәүешендә булһа ла, йортобоҙҙа ятып ҡала. Сөнки ул ҡәҙерле, сөнки ул - үҙебеҙҙең булмышыбыҙ. Ул кире сифаттарыбыҙ билдәһе булһа ла, үҙебеҙҙеке, шуға ҡәҙерле лә. Сөнки шул кейем - үҙебеҙ.

Италияла һәм Португалияла булғандар уларҙағы бер ҡыҙыҡ йола хаҡында һөйләгәйне. Бәхтиһәң, унда кейем саҡ ҡына туҙа, моданан сыға башлаһа, йыуып, үтекләп, урамға, кеше күп йөрөгән ергә эләләр икән. Иң мөһиме, улар кейемдәрен кемдәр алып киткәнен күрмәҫкә тырыша. Ҡыҙыҡ йоламы? Ҡыҙыҡ! Ә уның нигеҙендә нимә ята тип уйлайһығыҙ? Шул уҡ "үҙеңдә булған кире сифаттарҙан арыныу" психологияһы!

Быларҙың барыһының да эсеүҙән ҡотолоу менән ниндәй бәйләнеше бар, тип һорайһығыҙмы? Бар! Туранан-тура бәйләнә! Эсеүҙән ҡотолоу - шул уҡ холҡоңдо, характерыңды, ғәҙмышыңды, тормошоңдо үҙгәртеүгә тиң, тинек. Тимәк, яңы тормош менән йәшәй башлар өсөн һеҙгә иң тәүҙә **"иҫке күлдәк"** комплексынан ҡотолорға кәрәк. Шуныһыҙ, барыһы ла киренән ҡабатланасаҡ. Эскелек - иҫке күлдәк кеүек, унан ҡотола алмау комплексы. Уға баяғы барлыҡ кире сифаттарың да инә.

Ҡайғы килгәндә, унан ҡотолоу өсөн тау битләүе буйлап йүгереүгә бәйле халҡыбыҙ йолаһы хаҡындағы һөйләшеүҙе гәзиттең киләһе һанына ҡалдырайыҡ. Әлегә, хөрмәтле дуҫым, иҫке күлдәгеңде, ғөмүмән, йортоңдағы иҫке кейемеңде үҙең тапмаҫлыҡ ергә йәшер, ташла. Бик-бик йәлләһәң, кейергә ярарлыҡтарын баҙарға алып барып һат та, аҡсаһына "Киске Өфө" гәзитенә яҙыл.

Юғиһә, һиңә икенсе ярты йыллыҡ башланғансы, яланғас йөрөргә тура киләсәк. Берүк һыра һатып алма, сөнки өҫтөңдәге әле яңы ғына һатып алған кейемең, күҙ менән ҡаш араһында, "иҫке күлдәк"кә әүереләсәк.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Үҙеңде үҙең сикләмә

Уңышҡа өлгәшеү юлдары күплеген беләһең, аптырар инеңме? Тағы ла... һәр хәл-ваҡиғаға ҡарата кәрәкле яуап табыу мөмкинлеген? Бөгөн өлгәшелгәндәр ул һинең ана шул күптәрҙең береһен һайлау һәҙәмтәһе булып тороуы менән килешмәйһеңме ни? Әгәр ҙә килешһәң, һин, тимәк, нимәнелер үҙгәртер өсөн тап шул юлды һайлағанһың булып сыға? Шуға ла ниндәй генә хәлдә лә һин үҙеңә: "Мин үҙ тормошомда үҙем хужа," - тип әйтә алаһың.

Әммә был фактның ыңғай яҡтарынан башҡа, кире яҡтары ла бар. Әйҙәгеҙ, бөрсәләрҙе нисек итеп өйрәткәндәрен ҡарап үтәйек. Уларҙы быяла банкыларға һалалар ҙа, быяла ҡапҡас менән ябып ҡуялар. Бөрсәләр банкынан сығырға уйлап, өҫкә ҡарай һикерә һәм үтә күренмәле ҡапҡасҡа барып төкәлә. Күпмелер ваҡыт үткәс, бөрсәләр һикереп сыға алыу мөмкинлеген онота һәм тағы ла төкәлеүҙән ҡурҡып, хатта ҡапҡас асыҡ булғанда ла, банкынан сығырға тәүәккәлләмәй. Күп тапҡыр уңышһыҙлыҡ кисергәндән һуң улар төңөлә...

Беҙҙең менән дә шул уҡ хәл ҡабатлана. Беҙҙең үҙ-үҙебеҙҙе сикләүҙәребеҙ ҡайһы саҡта оса алыуыбыҙҙы онотторға мәжбүр итә. Беҙ йыш ҡына тормошобоҙҙо быяла кәртәләр менән сикләйбеҙ. Беҙҙең иждад иткебеҙ килә, әммә күҙгә күренмәгән төрмә һаҡсылары беҙгә: "Һин быны булдыра алмайһың. Был тормошҡа ашырлыҡ әйбер түгел. Көс етмәйәсәк. Бик ҡиммәткә төшәсәк. Кеше көләр. Һин әлегә йәш әле. Ҡартайғанһың инде. Сәләмәтлегең насар. Быға ата-әсәйең рөхсәт бирмәйәсәк. Бик күп ваҡыт талап ителәсәк. Һинең кәрәкле белемең юҡ", - тип иҫкәртеп тора.

Әйтәйек, беҙ был ергә нимәгәлер өлгәшер өсөн тыуғанбыҙҙы иҫләнек, ошо мөғжизәле ғаләмдең балалары һәм вариҫтары булыуыбыҙға инандыҡ, ти. Ошоларҙан һуң да өҫкә ынтылыу һәм алға табан барыр өсөн быяла кәртәләргә үҙебеҙҙе сикләүгә юл ҡуйыр инекме ни? Әйтәйек, ярһыу, асыу, нәфрәт, ауырыу, һаранлыҡ беҙҙең юлдан алып ташланған быяла кәртәләр һәм беҙгә ҡамасаулаусы бөтә нәмә лә үҙебеҙ уйлап сығарған сикләүҙәр һәҙәмтәһе булыуын да белдек, ти? Беҙ бит аңыбыҙ нимәгә йүнәлтелгән, тормошобоҙға шуны йәлеп итәбеҙ. Беҙ быны шулай булыуын белеп ҡалыу менән үҙебеҙҙе үҙгәртергә мәжбүр итә алабыҙ - шул саҡта тормошобоҙ башҡаса "быяла ҡапҡастар" менән сикләнмәйәсәк.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

АФАРИН!

# РӘСӘЙҘЕҢ ИҢ КӨСЛӨ КЕШЕҺЕ -

## ул Арғаяш башҡорто Эльбрус

**Рәсәйҙең иң-иң көслө кешеһе исемен бынан байтаҡ йылдар элек раҫлаған башҡорт егете Эльбрус Ниғмәтуллин үҙенең яңы рекордын Өфөлә ҡуйҙы. Ул ауырлығы 760 тонна тартҡан "Нагатино" теплоходын 20 метрға хәтлем һөйрәне. Баһадир Эльбрус үҙенең был рекордын Республика көнөнә арнаны.**

Мин Эльбрус Ниғмәтуллиндың ғәжәйеп көслө булыуы хаҡында беренсе тапҡыр үткән быуаттың 90-сы йылдар башында ишеттем. Тыуған яҡтарға ҡайтмай булмай. Һағындыра, бик һағындыра Арғаяш районының бер ярынан икенсе яры күренмәгән күлдәре, ифрат матур Миәс йылғаһы буйҙары. Был юлы ҡайтҡанда ямғырлы көҙ ине. Советтар Союзы Геройы Ғәзиз Мырҙағәлиевтың тыуған ауылы Наҡайға барырға тура килде. Юл бысраҡ. Пассажирҙар тейәгән автобус бик әкрен бара. Ауылға етергә күп ҡалмағайны инде. Автобус батҡаҡта бөтөнләй туҡтап ҡалды. "Ауыл яҡын, трактор саҡырырға кәрәк", - тине берәү. "Һе, нимәгә ул трактор, Эльбрус тиҙерәк һөйрәп сығарыр", - тип һүҙгә ҡушылды икенсеһе.

Мин Эльбрус исемен ана шул саҡта беренсе тапҡыр ишеттем. Әммә уның трактор һымаҡ баһадир булыуына инанып етмәнем. Бынан һуң да уның тураһында байтаҡ легендалар ишетергә тура килде.

Тыуған яҡтарында легендаға әйләнгән Эльбрус Ниғмәтуллин үҙенең яңы рекордын Өфөлә ҡуясаҡ. Баш ҡаланың "Родина" стадионы эргәһендәге майҙан енел машиналар менән тулған, ә саҡ ҡына арыраҡ, яр буйына табан иҫ киткес йәнлелек. Халыҡтың шулай ҡырмыҫҡа иләүендәй мыжғып тороуы ҡояшлы йәй көндәрендә лә бик һирәк була. Ә әле йонсоу көҙгә көн, ямғыр быҫҡаҡлап тора. Яңы рекордтың нисек тыуыуын күрергә теләүселәр ямғырҙан ғына ҡурҡа буламы!

Затонда карап тар күп, ҡышҡы ялға туктағандар. Һәр береһенә ремонт кәрәк. "Нагатино" теплоходы уларҙан бер нәмә менән дә айырылмай. Бары тик 760 тонналыҡ ауырлығы менән генә айырыла. Әйтергә кәрәк, элекке замандарҙа бындай караптарҙы тиҫтәләрсә бурлаҡ һөйрәгән, ә хәҙер быны Эльбрус Ниғмәтуллин бер үҙе һөйрәргә тейеш! Ышанһаң - ышан, ышанмаһаң - тор, тиҙәрме әле. Үҙ күҙең менән күргәнгә нисек ышанмаҫҡа мөмкин һуң? Ысынлап та, "Нагатино" урынынан ҡуҙғала бит! Бына һиңә мөғжизә!

Эльбрус Хәмит улы Ниғмәтуллин профессиональ спортсы. Силәбелә йәшәй. Әммә Башҡортостанды ул үҙенең тыуған республикаһы, ата-бабаларының изге ере, тип иҫәпләй. Эльбрус Ниғмәтуллин боронғо башҡорт ауылы Аҡбашта урта мәктәпте тамамлай. Тәүҙә ауыр атлетика менән таныла. Артабан ҙур көс талап итеүсе спорт төрҙәренең береһенә күсә, "Рәсәйҙең иң-иң көслө кешеһе" титулы өсөн ярышта 4 тапҡыр еңеүсе була. Спорттың ике төрө буйынса спорт мастеры. Спорттың 4 төрө буйынса Рәсәй чемпионы. Транспорт төрҙәрен һөйрәү буйынса Рәсәй рекордсыһы. Хәйер, уның ниндәй ҙур ярыштарҙа ҡатнашыуын, еңеүҙәрен яҙыу өсөн бер бит ҡағыҙ етмәҫ ине. Шулай ҙа ҡайһы береһен яҙырға кәрәктер.

Башҡорт баһадиры үҙенең тәүге рекордын Мәскәүҙә ҡуя. 186 тонна тартҡан "Иван Калита" теплоходын 10 метрға һөйрәй.

2006 йылдың 29 майында 29,4 тонна тартҡан, бер-береһенә тағылған ике автобусты 10 метрға һөйрәй.

Рәсәйҙең иң-иң көслө кешеһе турнирҙарына, АҠШ-ҡа, Ҡытайға һәм башҡа илдәргә бара.

АҠШ-та һәр береһе бер центнер 10 кг булған ике сумаҙанды асфальт юлдан 10 метрға күтәреп алып бара.

Эльбрус Хәмит улы Силәбе өлкәһендә милли йәштәр хәрәкәтен етәкләүселәрҙең береһе. Силәбе ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы. Рәсәй региондарының башҡорт диаспоралары вәкилдәре менән тығыҙ бәйләнеш тота.



Эльбрус Ниғмәтуллин ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлек менән шөғөлләнергә лә ваҡыт таба. "Ғәҙел Рәсәй" партияһының милли сәйәсәт буйынса Советы ағзаһы. Силәбе өлкәһе Закондар сығарыу палатаһы депутаты.

Эльбрус Хәмит улы Ниғмәтуллин "Мин үлмәнем, башҡорттарым" фильмында Салауат ролен башҡарып, киң танылыу яулай. Телевизион фильмдарҙа ла ҡатнаша. Һәр өлкәлә үҙен һәләтле, талантлы итеп таныта Арғаяш башҡорто Эльбрус Ниғмәтуллин.

35 йәшлек Эльбрус Ниғмәтуллин спортта өлгәшкән уңыштар менән генә сикләнеп ҡалырға уйламай әле. Ул хәҙер 1000 тонналыҡ карапты һөйрәргә әҙерлек алып бара. Был "Донъяның иң-иң көслө кешеһе" титулын яулауға тиң буласаҡ.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# САБЫЙ ТӘНЕНДӘ -

## Ҡөрьән аяттары



**Дағстанда ысын мәғәнәһендә мөғжизә күҙәтелеү хаҡында урындағы бар халыҡ һөйләй. Туғыҙ айлыҡ сабыйҙың тәнендә йә һүҙҙәр булып, йә тулыһынса Ҡөрьән аяттары булып ғәрәпсә яҙыуҙар барлыҡҡа килә.**

Был үҙенсәлекле бала республиканың Кизляр районы Красно-Октябрьское ауылында донъяға килә. Бәләкәстең атаһы Шамил Ямадаев - милиционер, әсәһе Мәҙинә - хужабикә. Улдарына улар Ғәли (Али) тип исем ҡушҡан.

Был баланың тәне тыуғанда уҡ, бөтән сабыйҙарҙан айырмалы рәүештә, эске ағзалары һиҙелеп торорҙай үтә күренмәле була. Табибтар малайҙың йәшәп китеренә ышанмай. Әммә Ғәли һау ҡала, тик уға бәйле сәйер хәлдәр генә дауам итә. Был хикмәттәр күрше-тирәне генә түгел, ә тәрлә дин әһелдәрен дә битараф ҡалдырмай.

Бала тыуып, бер нисә көн үткәс, уның эйәгендә ғәрәп телендә "Аллаһ" тигән яҙыу сыға һәм шунан юғала. Ә бер ни тиклем ваҡыт уҙғандан һуң сабыйҙың аяғында ғәрәп телендә төрлө яҙыуҙар килеп сыға башлай. Баланың ата-әсәһе был аңлатып булмаҫтай күренеште кешегә бик белгертергә тырышмай. Бары тик Ғәлиҙе күҙәтеү аҫтында тотҡан медицина хеҙмәткәрҙәре генә был турала хәбәрҙар була, сөнки яҙыуҙар сыҡҡан ваҡытта баланың тән температураһы 40 градусҡа етә. Баланың тәнендә: "Аллаһ билдәһен кешеләргә күрһәтегеҙ", - тигән һүҙҙәр сыҡҡандан һуң ғына Шамил менән Мәҙинә бүтәндәргә лә был турала һөйләргә ҡарар итә. Әйтеп тораһы ла түгел, был мөғжизә дини ойошмаларҙың иғтибарынан ситтә ҡалмай, ә инде Дағстандың үҙәк мәсеттендәгеләрҙең был Аллаһы Тәғәлә күренеше булыуына иманы камил.

- Беҙ быныҡ мөғжизә генә түгел, ә юғарынан билдә булыуына шигебеҙ юҡ, - ти мәсеттең имам урынбаҫары Зәйнулла хажи Атаев. - Был бөтә кешелеккә иҫкәртеү. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе шулай итеп дингә ҡайтырға саҡыра. Бала тәнендә сыҡҡан яҙыуҙарҙың береһе: "Арағыҙҙа иң абруйлыһы - иң тәҡүәле кеше", тип, икенсеһе: "Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, тип таныҡлыҡ бирәм", тип яңғырай. Әлбиттә, был ғәҙәти булмаған күренеш беҙҙең өсөн ысын мөғжизә.

Ата-әсәһе әйтеүенсә, сабыйҙың тәнендәге яҙыуҙар йома һәм дүшәмбе көндәре килеп сыға һәм өс көн һаҡлана. Шулай ҙа медицина хеҙмәткәрҙәре был яҙмаларҙы ниндәйҙер билдә тип танырға ашыҡмай.

- Был күренешкә аныҡ ҡына билдәләмә бирер өсөн балаға тулыһынса медицина тикшереүе үткәрергә кәрәк, - ти Рәсәй ФМБА иммунология институтының ғилми бүлек мөдире Людмила Лусс. - Был механик имгәнеү булыуы ла бик мөмкин - бындай һөҙөмтәне борос, тоҙ, йод бирә ала.

Шулай уҡ уртикар дермографизм тигән сир ҙә була, ул халыҡтың бары тик биш проценттында ғына осрай. Бындай ауырыуға дусар булыусыларҙың тәненә ниндәй ҙә булһа тупаҫ башлы әйбер менән яҙып була һәм уның эҙе яндырылған кеүек тороп ҡала.

Нисек кенә булмаһын, был хикмәтле баланы күрергә теләп, Кизляр районына килеүселәр һаны артҡандан-арта бара.

**"Комсомольская правда" гәзитенән.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**29-30 октябрҙә** Башҡортостандың халыҡ шағиры, драматург Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуға һәм театрҙың 90 йыллыҡ юбилейына арналып, Мостай Кәрим әҫәре буйынса **"Ауыл адвокаттары"** премьераһы сәхнәгә сыға. Ролдәрҙә - Хөрмәтулла Үтәшев, Алмас Әмиров, Сәғиҙулла Байегет, Ирек Булатов, Илдар Сәйетов, Алһыу Бәхтиева, Миңзәлә Хәйруллина, Сара Буранбаева, Светлана Хәкимова һәм башҡа күренекле артистар.

## *К О Т Л А Й Б Ы Ҙ !*

Октябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе гәзит уҡыусыларыбыҙҙы - Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан **Миңлегөл Усманованы**, Йәрмөхәмәт ауылынан **Шәфкәт Мөъминовты**, Ярат ауылынан **Хәмиҙә Иҫсуринаны**, Өфө районы Йоматау санаторийынан **Гөлдәр Искужинаны**, Учалы районынан **Әклимә Абдрахманованы, Шаһиғәле Яҡуповты, Мәрйәм Фәйзуллинаны**, Межгорье ҡалаһынан **Шәүрә Яҡуповаһы**, Ейәнсура районы Самаҙы ауылынан **Хәлил Ҡылысбаевты**, Иҫәнғол ауылынан **Мөхлисә Ғүмәрованы**, Дәүләкән ҡалаһынан **Зөләрәм Снигиреваны**, Яңы Йәнбәк ауылынан **Марс Фазыловты**, Хәйбулла районы Баҡал ауылынан **Нурия Ишимованы, Йыһанур Боҫконовты, Вилә Ишимованы**, Благовар районы Языково ҡасабаһынан **Гөлсинә Фәрхетдиновалы**, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан **Данил Мурзинды**, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан **Тәнзилә Аҙнабаеваны**, Мәсетле районы Дыуан-Мәсетле ауылынан **Луиза Байтуллинаны**, Балаҡатай районы Яңыбай ауылынан **Т. Закировты**, Бөрйән районы Аҫҡар ауылынан **Миңһылыу Харрасованы**, Яңы Мөсәт ауылынан **Вәлимә Бүләковалы**, Әбйәлил районы Әбделмәмбәт ауылынан **Рәйхана Мусинаны**, Өфө ҡалаһынан **Нәфис Аҡҡоловты** һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡайнар ҡотлайбыҙ һәм ҡаҡшамаҫ ныҡлы һаулыҡ, күңел көрлөгө, шатлыҡ-ҡыуаныстарға бай яҡты көндәр теләйбеҙ.

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

✓ *Яҡшы хакимлыҡ иткән илдәрҙә ярлылыҡтан оялалар. Насар хакимлыҡ иткән илдә байлыҡ оят һынала.*

*(Конфуций).*



СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ҠУРАЙСЫ, ТИМӘК, ЙЫРАУСЫ ЛА УЛ

**Былтыр тәү башлап Өфө ҡала округы хакимиәте менән берлектә Башҡортостан ҡурайсылар союзы Әҙеһәм Исҡужин исемендәге Асыҡ ҡала ҡурайсылар конкурсын башлап ебәргәйне. Быйыл ул икенсе тапҡыр уҙғарыла.**



Шуныһын әйтеп үтергә кәрәк, был бәйгелә Башҡортостандан ғына түгел, ә күрше өлкә, республикаларҙан да теләгән һәр кем ҡатнашып, үҙенең ҡурайсы һәләтен һынап ҡарай ала. Конкурстың шарты ла үҙенсәлекле: ул ике турҙа 16 йәшкә тиклем һәм 16 йәштән өлкәндәр араһында уҙғарыла. Тәүге төркөм ике турҙа ла бер оҙон көй һәм марш, йәки бейеү көйө башҡара (тик улар ҡабатланырға тейеш түгел). Икенсе төркөмдәге ҡурайсылар иһә, беренсе турҙағы мотлаҡ программаға ингән, Әҙеһәм Исҡужин яратып башҡарған егерме оҙон көйҙөң береһен ҡурайҙа уйнап, йырлай һәм үҙе теләгән оҙон көйҙө уйнап ишеттерә, икенсе турҙа үҙе һайлаған оҙон көйҙө ҡурайҙа уйнап, йырлай (әгәр үҙенең тыуған ягында сыҡҡан һирәк яңғыраған йыр булһа, тағы ла яҡшыраҡ) һәм икенсе оҙон көйҙө ҡурайҙа башҡарырға тейеш була.

- Йырлау шарты был бәйгенең мөһим үҙенсәлеге, тип әйтергә мөмкин, - тип һөйләп китте конкурстың жюри ағзаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдинов. - Элек ҡурайҙа уйнаусылар ҙа күп булған, әммә ҡурайсы тип һәр кемгә әйтмәгәндәр. Фәлән ҡурайсы, тип ҡурайсы исемен дәрәжә итеп биргәндәр. Ә оҙон көйҙәрҙе йырлаған кешеләрҙе йыраусы тип йөрөткәндәр һәм ул да оло дәрәжә булған. Һәр йыраусы ҡурайҙа уйнамаүы ла мөмкин, ә бына һәр ҡурайсы, музыкаль һәләткә эйә кеше буларак (әйтәйек, моңдо ишетеү, тойоу һәләте, музыкаль хәтер, ритм), эстән генә мөңрәп йәки үҙ алдына йырлап йөрөй торғас, бер заман яңғыратып йырлап ебәрә ала. Абдулла Солтановты алайыҡ, ул бит заманында ҡурайсы буларак билдәле булған. Көтөү көткән сағында ҡурайы янында булмаһа, йырлап та йөрөгән. Ә бөгөн ул ҡурайсы булыуҙан бигерәк, йырсы буларак дан алған. Тарихта билдәле бөтә ҡурайсыларҙың да оҫта йыраусы булыуы мәғлүм. Ғата Сөләймәнов, Ишмулла Дилмөхәмәтов, уның атаһы Ишғәле ағай, Кәрим Дияров, Мөхәмәт Ҡәҙерғолов, Рәхмәтулла Бүләкәновтар бик оҫта йырланылар. Әҙеһәм ағай Исҡужин үҙе иҫ киткес ҡурайсы һәм иҫ киткес йыраусы булды. Мәҫәлән, мәшһүр Ғәбит сәсән һәр оҙон көйҙө ҡайһы ырыуға хас икәнен әйтеп уйнап, йырын йырлап, тарихын һөйләп ҡуя торған булған. Был борондан килгән ысын ҡурайсыларҙың һыҙаты. Ҡурайсы үҙе башҡарған оҙон көйҙөң йырын да йырлай белә икән, был уға көйҙө, тарихын күҙ алдына килтереп, тәрәнерәк тойоп, тулыраҡ, йөкмәткелерәк һәм камилыраҡ башҡарыуға өлгәшергә ярҙам итә, үҙенең күңелен байыта, тойғоларын байыҡландыра.

Бына ошо борондан килгән ҡурайсыларҙың йырлау традицияһын йәшләрҙә тәрбиәләүҙә төп маҡсат итеп ҡуя ла инде әлеге конкурс. Ысынлап та, бәлки, бөгөнгө ҡурайсылар араһында йырлау һәләте булып та, уны кешеләргә күрһәтергә баҙнатсылыҡ итмәй, эсендә йәшереп йөрөгәндәр барҙыр, кем белә? Тимәк, был бәйге йырсы буларак яңы талантларҙы ла асыу мөмкинлеген бирәсәк. Юлай ағай әйтеүенсә, былтыр конкурс тәүге йыл уҙғарылыуға ҡарамаҫтан, бик күп ҡурайсының оҫта йыраусы һәләтенә шаһит булғандар. Хәҙер уларҙың ҡайһылары йырлай ҙа башлаған.

- Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, райондарҙа боронғоса итеп уйнаған ҡурайсылар кәмей бара. Ә уларға алмашҡа кем килә һуң? Шуға күрә лә, беҙ, жюри ағзалары, бәйгелә ҡатнашыусыларҙың боронғоса көйҙәң төбөнә төшөп, күңелгә үтеп инерҙәй төмле итеп, традицион уйнау һәләтенә баһа бирәбеҙ. Бөгөн ошо традицияны һаҡлау - төп бурыс, - тип һүҙен дауам итте Юлай Ишбулды улы. - Беҙ Совет заманында тергеҙәбеҙ, үҫтерәбеҙ тигән һүҙҙәргә өйрәнеп алдыҡ. Ҡурай сәнғәтен нисек итеп үҫтерергә мөмкин? Ул бит инде үҫкән бөйөк музыка ҡоралы. Унан һуң, яңы ғына ҡулына ҡурай тотҡан, әле моңдоң нимә икәнен тойоп та өлгөрмәгән кеше нисек итеп уны үҫтерә алһын? Беҙгә үҙебеҙгә, киреһенсә, шул бөйөк ҡурайсыларыбыҙ кимәленә ынтылырға кәрәк. Был музыкаль уҡыу йорттарында белем алыуҙы инҡар итеү түгел, әлбиттә, ләкин традицион уйнауҙы уҡытып ҡына биреп булмай. Быға өлгәшеү өсөн йәш кеше эҙләнергә, мәшһүр ҡурайсыларыбыҙҙың яҙмаларын тыңларға һәм үҙ юлын, үҙ йөҙөн табырға ынтылырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡурай - башҡорттоң сәнғәттәге даһилығы, уның милли милке һәм хазинаһы, ҡурай - ябайлыҡтың бөйөклөгө", - тип яҙған Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми. Ҡулына ҡурай алған йәш кеше иң элек ошо халҡыбыҙ ҡомартҡыһының ҡағылғыһыҙ сафлығына, тәбиғилегенә, тиңһеҙ ҡиммәтенә ҡарата оло яуаплылыҡ йөрөтәсәген иҫтә тоторға тейеш. Ҡурай - үҙе мөғжизә булһа, ҡурайсы иһә ғүмер буйы ошо мөғжизәнең асылын аңларға, уның тәбиғилеген һаҡлап, уның моңон бар тулылығында, сикһеҙ тәрәнлегендә халыҡҡа еткерергә ынтылған оҫта булырға тейештәр. Әйткәндәй, Әҙеһәм Исҡужин исемендәге II Асыҡ ҡала ҡурайсылар конкурсы 29 октябрь Өфө сәнғәт училищеһының концерт залында үтә. Был көндө шулай уҡ З.Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте сығарған "Әҙеһәм ҡурайы" китабының презентацияһы буласаҡ. Бәйге 30 октябрь Ҡала мәҙәниәт һарайында Гала-концерт менән тамамланасаҡ. Ҡурай байрамына рәхим итегеҙ!**

**Буранбикә ЙӘНСУРИНА.**

## *ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерле атайыбыҙ
**Сәйфитдин Ғәйнетдин улы ӘХМӘТҠУЖИН**ды
тыуған көнө менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!



Атайыбыҙ беҙҙең өсөн мәңгелек нур һибеүсе яҡты ҡояш төҫлө: уның менән яҡты ла, йылы ла, рәхәт тә. Һинең кәңәшенә таянабыҙ, көслө рухлы, маҡсатлы, талапсан булыуыңды хөрмәт итәбеҙ, кешелеклегең алдында баш эйәбеҙ, миһырбанлы, итәғәтле булыуыңа һоҡланабыҙ. Һине ҡотлап, бөгөн ниндәй генә һүҙҙәр әйтһәк тә, ниндәй генә теләктәр теләһәк тә аҙ булыр төҫлө. Һинә бары өсөн дә ҙур рәхмәт! Киләсәктә лә тормошобоҙҙоң йәме, ҡото булып, балаларыңдың изгелеген күреп, һаулыҡ-сәләмәтлектә, күңел тыныслығы менән оҙон-оҙаҡ, ҡыуаныслы, бәрәкәтле ғүмер кисер.

**Иң изге теләктәр менән, Фәнүрә, Илһам, Миләүшә, Хәсән, Әлиә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, ғыйбрәтләр яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АТТАРҘЫ ТҮГЕЛ,

## кисеүҙә ишәктәрҙе алыштырыу кәрәк

Уға нисек аҡыллы булмаҫҡа, ти, - бөтә ғүмере буйы ахмаҡтар араһында йәшәй бит...

**(Василий Ключевский).**

Беҙ аҡсаға ҡарағанда йөрәгебеҙҙе ихласыраҡ тәҡдим итергә әҙербеҙ.

**(Ноуэл Ковард).**

Ҡатын-ҡыҙ булыу шуның өсөн ауыр, сөнки уға нигеҙҙә ир-ат менән эш итергә тура килә.

**(Джозеф Конрад).**

Яҡшы хакимлыҡ иткән илдәрҙә ярлылыҡтан оялалар. Насар хакимлыҡ иткән илдә байлыҡ оят һынала.

**(Конфуций).**

Бер ваҡытта ла күңелһеҙлектәрҙең ҡаршыһына сыҡма. Тыныс ҡына ултыра бир, шул саҡта ун күңелһеҙлектең туғыҙы һинә килеп етмәйәсәк.

**(Калвин Кулидж).**

Реклама - кешеләрҙе элек уйлап та ҡарамаған нәмәләрҙә мохтажлыҡ кисерергә мәжбүр итеүсе сара.

**(Мартти Ларни).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Дөрөҫ итеп сәй эсеү, тигәндә нисек аңларға? Бер Вьетнам фәлсәфәсеһе был өлкәлә ошондай кәңәштәр ҡалдырған:**

**Сәй эсеүҙән ләззәт алыу өсөн иғтибарҙы тулыһынсы әлеге мәлгә йүнәлтергә тейешбеҙ. Башҡа нәмә тураһында уйламағанда ғына беҙ сәй ҡойолған һауыттың йылыһын тояcаҡбыҙ. Тап шулай иткәндә генә сәйҙең тәме тойола, ыңғай үҙенсәлектәре күренә. Үткәндәр тураһында үкенеп, киләсәк хаҡында ҡайғырған саҡта сәйҙән ләззәт алып булмай. Ниһайәт, сәй һауытының төбөнә ҡарап, уның буп-буш ҡалыуын күрһәң, нимә кисерерһең икән?**

**Тормошта ла шул уҡ. Беҙ әлеге мәл, бөгөнгө көн менән тулы ҡанлы йәшәмәһәк, ғүмерең күҙ асып йомған арала үтер ҙә китер. Йөрәктә тик үкенеү тойғоһо ғына ҡалыр: тормоштоң тәмен, матурлығын ғына күреп йәшәмәгәнбеҙ ҙәһә! Арғымаҡтай сабып үткән дә киткән...**

**Йылдар үтте инде: биргән һабағы, тәжрибәһе өсөн рәхмәт әйтәйек тә, уларҙы артта ҡалдырайыҡ. Алда - киләсәк, ләкин кемгәләр килер ул, кемгәләр юҡ... Киләсәккә пландар ҡороуын ҡорабыҙ ҙа ул, ләкин улар хаҡында борсолоп, бөгөнгө көндөң бәхетле мәлен урлайбыҙ бит.**

**Үткәндәрҙе артта ҡалдырып, киләсәк хаҡында артыҡ борсолоуҙы туҡтатһаҡ ҡына, әлеге мәл менән йәшәй башлаясаҡбыҙ. Шул шарттарҙа ғына тормош тулы, йәмле, бәхетле буласаҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририят: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Динара ЯҠШЫБАЕВА, Таһир ИШКИНИН.

Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4572